✓ *Мәктәптән айырылғандан һуң мәктәптә бергә көн кисергән иптәштәрегеҙҙе онотмағыҙ. Уларҙы ихтирам итегеҙ. Иң олуғ дәрәжәләргә ирешһәгеҙ ҙә, иң түбәндәре алдында ололанмағыҙ. Был әҙәпһеҙлектең билдәһе икәнен иҫегеҙҙән сығармағыҙ.*

***РИЗАИТДИН нәсихәттәренән.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға   Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

14 - 20 НОЯБРЬ (ҠЫРПЫҒАЙ) 2009 ЙЫЛ

№46 (360)

**БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:**

**Модалы булғың килһә...**



милли үҙенсәлекле кейемдәр кей

5

**Бала ҡурҡа икән,**



уны әрләмә, ҡыйыу булырға өйрәт

6

**Улым, һиңә әйтәм, киленем дә тыңлаһын,**



йәки Ир-азаматлыҡ тураһында нәсихәт

8-9

**Әйт әле, нурлы көҙгөм,**



кем иң һөйкөмлөһө һәм матуры?

12

**ТВ программа**

14

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# РУХ ИШЕГЕНӘ ТОТҠА

Халыҡтың бөйөклөгө уның тарихи хәтере булыуы, сәйәсмәндәренең, ғалимдарының, рәссамдарының, артистарының, яҙыусыларының, композиторҙарының, спортсыларының һ.б. шундай киң билдәле һәм арҙаҡлы шәхестәренең күплегенә бәйле. Үҙ тарихын, мәҙәниәтен белгән, улар менән ғорурланған, телен һөйгән, уға тоғро ҡалған кешеләре күп булған халыҡ - һоҡланғыс халыҡ, һәм уның киләсәге лә өмөтлө. 20-се быуат сәйәсәте иһә шәхестәребеҙҙе ҡырып, ҡыҫып, баҫып, кәмһетеп кенә ҡалманы, халҡыбыҙҙың тарихи хәтерен дә юйып, уны меҫкенләндерә яҙғайны һәм юғалыу, йотолоу алдына килтереп баҫтырғайны.

Бәхетебеҙгә күрә, һуңғы 20-25 йылдар элекке хәлдәр, беҙҙе һиҫкәндереп ебәреп, көс-ҡеүәте һис кәмемәгән, данлы һәм шанлы тарихы булған, рухи байлығы мул, бынамын тигән шәхестәр тыуҙыра алырлыҡ халыҡ икәнебеҙгә ышандырып, яурындарыбыҙҙы киреп , буй-һындарыбыҙҙы турайтырға мөмкинлек бирҙе. Һәм ошо саҡта халыҡтың үҙ хәтерен яңыртыу ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерлек мәғлүмәти баҫмалар талап ителде, һәм, әлбиттә, улар барлыҡҡа килде лә. "Киске Өфө" гәзите аң-хәтерҙәребеҙҙәге мәжбүри бушлыҡтарҙы тултырыу буйынса изге эше менән ошо саралар араһында иң һөҙөмтәлеһе. "Киске Өфө" гәзите - шаҡтай шаңҡыған халҡыбыҙҙы аңына ҡайтара алырлыҡ көскә эйә баҫма. "Киске Өфө" гәзитендәге мәғлүмәттәрҙе үҙләштереү генә лә халҡыбыҙҙың дауамы булырлыҡ йәш быуынды тәрбиәләү нигеҙенең иң ныҡ һәм тайшандырмаҫлыҡ ташы була ала. Шуға ла мин, был гәзиткә һәр мәктәп, һәр уҡыу йорто, милләтебеҙ яҙмышы борсоған һәр кеше яҙылырға тейеш, тип иҫәпләйем. Һәм яҙылыу, алдырыу ғына түгел, ә әлегә битарафтарҙы ла рух ишеге тотҡаһына әйләнгән "Киске Өфө" менән "осраштырыу", таныштырыу зарур, тип һанайым.

**Вәкил ХАЖИН,**
**БДУ-ның Сибай институты профессоры.**

*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ИҢ ЯҠШЫ ҒАИЛӘ -

## Батырхан менән Баязитты үҫтергәне



**Үткән аҙнала Өфө Ҡала мәҙәниәт һарайында баш ҡаланың иң яҡшы йәш ғаиләһе билдәләнде. Ҡала округы хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты һәм "Индиго" психологик-медик-социаль үҙәге ойоштороған был конкурстың төп маҡсаттарының береһе - йәмғиәттә ғаилә статусын һәм ғаилә тормошоноң баһаһын күтәреү, республикала йәшәүсе халыҡтарҙың милли-мәҙәни традицияларын таратыу, үҫтереү, шулай уҡ үҫеп килеүсе быуынды рухи-әхлаҡи яҡтан тәрбиәләү өсөн шарттар тыуҙырыу.**

(Дауамы 4-се биттә).

ИШАРА

# ҠЫРМЫҪҠА СЫҒЫП БАРА...

## филде һөйрәп

**Үткән һандарҙың береһендәге "Ишара" рубрикаһында Иҙрис Ноғомановхаттынан, Әхмәр Үтәбайҙың уйланыуҙарын һәм дә Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең "Европа - Азия" шиғырынан өҙөктө уҡып та сыктым, студент саҡтарҙа ишеткән көләмәс иҫкә килеп тә төштө.**

Бер ҙур фил ҡырмыҫҡаға: "Һинә рәхәт, ил сиге, тип тормайһың, тегендә-бында үтеп йөрөйһөң", - тип көнләшеүен белдергән, ти. Ҡырмыҫҡа: "Бәй, әгәр теләгең бар икән, мин һине лә иртәгә үк сит илгә алып сығам, бер ауырлығы ла юҡ быны, - тигән. - Тик һин ике түтәрәм икмәк һәм оҙон бау алып кил", - тип тә өҫтәгән. Икенсе көн ҡырмыҫҡа бер түтәрәм икмәкте филдең уң яҡ тәненә, ә икенсеһен һул ягына бәйләгән дә, бауҙың осон тотоп, ил сиге аша үтеп бара, ти. Ил сиге һаҡсыһы: "Әй, ҡырмыҫҡа, сиктәрҙе белмәй, тегендә-бында үҙең йүгереп йөрөүең етмәгән, әле филде лә алып сығып бараһыңмы?" - тип туктатҡан быларҙы. Ҡырмыҫҡа былай ҙа түп-түңәрәк күҙҙәрен аҡайтып: "Ниндәй филде күрәһең һин, бер ниндәй фил дә юҡ бында. Әллә үҙең менән бутерброд алып сығырға ла ярамаймы?" - тип ғәжәпләнеп, юлын дауам иткән, ти. Ил сиге һаҡсыһы ауыҙын асып, аптырап тороп ҡалған, ти...

"Ишара" рубрикаһында шундай фәһемле, фәлсәфәле мәҡәләне уҡып сыҡкан да, яуап итеп сәйер көләмәс яҙа, тиерһегеҙ. Гәзиттең был һанын алғанға тиклем үк шул Европа -Азия тураһында уйланып йөрөгән мәл ине. Илебеҙҙә юғары вазифалар биләгән кешеләрҙең балалары, ейән-ейәнсәрҙәре, иң байҙары Азиянан Европаға күсеп китеп, унда йәшәргә ҡалалар бит. Уҡырға китәләр ҙә, белем алғас, тыуған ил кәрәкһеҙгә әйләнә - имеш, унда тотороҡһоҙлоҡ, имеш, унда иртәгәһе көнгә ышаныс юҡ... Ҡырмыҫҡаларҙы гәйепләмәйем мин, тик баяғы йәштәребеҙҙе уларға оҡшатып ҡына ҡуйыуым. Ил байлығын йөкләп-йөкләп ситкә алып сығып бөтөүҙәре етмәй, сит мөхиттә үҫеп, сит ил мәҙәниәтен һеңдереп, тыуған иленә битараф кешеләргә әүерелеүҙәренә аптырайым.

Мин үҙем ситтә ун йылға яҡын уҡыным, эшләнем, йәшәнем, тик илемдә, милләтемдә, телемдә һөйөү һәм һағыныу хисе көсәйгәндән-көсәйҙе генә, шуға күрә илемә әйләнеп ҡайттым. Илемдең таланыуы, йәштәрҙең илһөйәрлек хисе һүрелеүе, прагматиктарҙың ишәйеүе ныҡ борсой мине, йәнем әрней шуға. Ә инде сит илдә белем алып, иленә ҡайтырға мәжбүр булған ҡайһы бер белгестәрҙең үҙ иленә нәфрәт менән йәшәгәне күренеп тора. Әленән-әле "тегеләр" менән сағыштыралар, шундағы ҡайһы бер йәшәйеш элементтарын беҙгә лә көсләп таҡмаҡсылар. Шул уҡ ваҡытта "тегеләрҙең" бер менталитет, беҙҙеке икенсе икәнен уйлап та бирмәйҙәр. Битарафланып, нәфрәтләнеп йәшәүселәр күбәйгәндә, ниндәй алға китеш, үҫеш булһын инде?!

Һәр таңда минең гүзәл илем, һоҡланып туймаҫлыҡ телем, халҡым бар, тип йылмайып уяныуҙан да ҙурыраҡ шатлыҡ бармы икән?..

**Фәүзиә ЯХИНА.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# БЫНАМЫН ТИГӘН...

## тәрбиә сараһы

**"Киске Өфө" гәзите республикабыҙҙа киң билдәле баҫмаларҙан һанала. Гәзиттә халыҡтың көнкүрешенә генә түгел, рухи тормошона ла даими иғтибар бирелә. Уның һәр һанында йәшәйешебеҙҙең иң мөһим ваҡиғалары хаҡында сәйәсмәндәр һәм иҡтисадсылар, ғалимдар һәм күренекле педагогтар, йәмәғәт, мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренең фәһемле фекерҙәре менән танышып барырға була. Дәүләтебеҙ сәйәсәтен яҡтыртыуҙағы ролен иҫәпкә алып, был баҫманы ҡала һәм республика етәкселеге лә юғары баһалай.**

Гәзит биттәрендә мәғариф өлкәһендә барған үҙгәрештәрҙең асылын аңларға ярҙам иткән, мәктәптәрҙең һәм профессиональ белем биреү учреждениеларының яңыса эшләү тәжрибәһен яҡтыртҡан мәҡәләләр йыш баҫыла. Бигерәк тә ғаилә тәрбиәһе проблемалары буйынса яҙылған материалдар әһәмиәтле, улар ғаилә тормошона ыңғай һәм һаҡсыл ҡараш булдырыу, халыҡ мәҙәниәтен, матур йолаларҙы һаҡлау, йәмғиәтебеҙҙе тотороҡлоландырыу йәһәтенән айырыуса һөҙөмтәле. Шулай уҡ ижтимағи-сәйәси, иҡтисади, этномәҙәни, тарихи, дини проблемаларға, республика тормошоноң башҡа ваҡиғаларына арналған "Аҙна шаңдауы", "Диалог", "Ижадхана", "Тәүбә" кеүек рубрикаларҙа донъя күргән мәғлүмәттәрҙе гәзит уҡыусылары көтөп ала. "Киске Өфө" гәзитендә баҫылған материалдарҙы башҡорт теле һәм әҙәбиәте, Башҡортостан мәҙәниәте һәм тарихы уҡытыусылары үҙҙәре өсөн бик файҙалы уҡытыу-тәрбиә ҡулланмаһы сифатында ҡабул итә. Күптәр өсөн баҫма башҡорт әҙәби телен дөрөҫ ҡулланыу өлгөһө булып тора, уҡыусыларҙың телмәр мәҙәниәтен үҫтереүгә булышлыҡ итә. "Киске Өфө" гәзитенең өгөт-нәсихәт потенциалы ҙур, ул йәш быуынды халҡыбыҙҙың ватансылыҡ менән һуғарылған рухи-мәҙәни традицияларына ярашлы тәрбиәләүгә лайыҡлы өлөш индерә.

**Рөстәм ИШМӨХӘМӘТОВ,**
**Башҡортостан мәғариф үҫтереү институты ректоры,**
**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-**
**Ҡоролтай депутаты.**

# РУХЫ ЯРЛЫ КЕШЕ...

## милләткә ҡамасау

**Башҡортом! Башҡорт милли баҫмаһын беҙҙән башҡа милләт ҡайғыртмаҫ, телебеҙҙе үҫтермәҫ бит. Ата-бабалар, үҙ асылын, телен, динен, илен яулап, күпме ихтилалдарға күтәрелгән, михнәтәфа сиккән. Дарьялай ҡан ҡойолған, зыялыларыбыҙ киҫелгән, туралған, әммә рух һүнмәгән, башҡорт үҙ булмышын һаҡлап ҡала алған, Башҡортостандың матур яҡты киләсәге өсөн тырышҡан. Рухы ярлы кешеләр милләт булып ойоша алмай. Беҙ бит борон-борондан дәүләт тотҡан ғорур халыҡ.**

Ә бөгөн рух ярлылығы, вайымһыҙлыҡ күрһәтәбеҙ. Ҡулынан килгән милләттәш етәкселәр гәзит-журналдарға яҙылыу мәлендә үҙ ҡулынан килерҙәй ярҙамын күрһәтмәй икән, минеңсә, был - ата-бабалар аманатына хыянат булыр.

Күркәм Башҡортостаныбыҙҙа күпме милләт йәшәй, уларҙың һәр береһе өсөн республикабыҙың исеме, теле һаҡланһа, яҡшыраҡ буласаҡ бит. Республикабыҙ хоҡуҡһыҙ бер өлкә сифатында ҡалмаһын, тип борсолоп, берәүҙәр күтәрелгәндә, беҙ ситтә ҡалабыҙмы? Милли баҫмабыҙҙың тиражын арттырыу, телебеҙҙе үҫтереү, мәҙәниәтебеҙҙе таратыу - шул көрәшкә индергән өлөшөбөҙ бит.

"Киске Өфө" гәзитенә килгәндә, ул үҙ йөҙөн тапҡан, бөгөнгө ысынбарлыҡты юғары кимәлдә яҡтыртыусы баҫма. Ул киләсәктә лә уҡыусыһыҙ ҡалмаҫ, әлбиттә. Шулай ҙа тиражды арттырыу мотлаҡ, был башҡорт теленең бәсен күтәрәсәк, балаларыбыҙҙа үҙ тамырҙарына, теленә хөрмәт тәрбиәләргә ярҙам итәсәк. Гәзит тә уҡымағас, быға нисек өлгәшербеҙ һуң?

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**
**Мәләүез районы.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**● 2010 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бара, тип иҫегеҙгә төшөрәбеҙ. Башҡорт телендә сыҡҡан баҫмалар араһында иң арзан хаҡ - "Киске Өфө"нөкө: 50665 индекслыһы - 306 һум 84 тин, 50673 индекслыһы (льготалыһы) - 294 һум 78 тин.**



**● Бүләк алыу барыбер ҙә күңелле икәнен уйлап, гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә бүләктәр отошо ла тәҡдим итәбеҙ. Ул бүләктәр араһында төҫлө телевизор ҙа, микротулҡынлы мейес тә, үтек-сәйнүктәр ҙә, кеҫә телефоны ла булыр. Шулай уҡ квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 200 уҡыусыбыҙ 2010 йылға Дини календарь алып та шатланыр.**

**● "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, тыуған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек.**

**● Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов "Бала йөрәгенә ҡағыл" Бөтә Рәсәй мәрхәмәтлек акцияһы үткәреү тураһында" бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Ул быйыл ноябрҙә үтәсәк.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев муниципалитеттар, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары етәкселәре менән үткәргән селектор кәңәшмәһендә грипп пандемияһына ҡаршы етди саралар күреүҙе талап итте. A/H1N1 вирусы буйынса һөйләшеү видеоконференция режимында барҙы. Раил Сәлих улы һаулыҡ һаҡлау министрлығының үтенесен ҡәнәғәтләндереп, үпкәләрҙе һаулыҡ ялға еллә әтеү аппараттары һәм вирусҡа ҡаршы өҫтәмә препараттар алырға күрһәтмә бирҙе.

✓Башҡортостан туризм индустрияһы союзын ойоштороу йыйылышы булып үтте. Уның рәйесе итеп БР иҡтисади үҫеш министры Евгений Евтушенко һайланды. Йәмғәт ойошмаһының төп маҡсаты - туризм хеҙмәттәре баҙарын көйләү, төбәктә туризмды үҫтереү, Башҡортостан туризмы өсөн дөйөм бер бренд булдырыу. Туризм индустрияһы союзына 500-ҙән ашыу ойошманың инеүе көтөлә.

✓РФ Дәүләт Думаһы депутаттары административ ҡағиҙә боҙоу тураһындағы кодексҡа төҙәтмәләр индереп, уҡылмаған, стандартҡа тап килмәгән йәки дәүләт стандарты талаптарын боҙоп ҡуйылған номер билдәләре өсөн штрафты биш йөҙ һумғаса арттырҙы. Бынан тыш, депутаттар теркәлмәгән һәм техник тикшереүҙе ваҡытында үтмәгән машинала йөрөгән өсөн яуаплылыҡты арттырырға тәҡдим иткән. Улар водитель танытмаһынан мәхрүм ителгәндәргә уны ҡайтарып алыу өсөн яңынан имтихан тапшырыу ихтималлығын да ҡарамаҡсы.

✓Башҡортостандан тәүге төркөм Сәғүд Ғәрәбстанына хаж ҡылырға юлланды. Башҡортостан мосолмандары диниә назаратынан хәбәр итеүҙәренсә, быйыл республиканан яҡынса 350-ләп кеше хаж ҡыласаҡ. Былтыр күберәк кеше хаж ҡылған булған. Быйыл сәфәргә сығыусыларҙың кәмеүен финанс кризисы һәм суска киҙеүе менән аңлаталар. Хаж сәфәренең хаҡы быйыл мосолмандарға 75 мең һумдан 140 мең һумға тиклем барып етәсәк.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# МАЙОР ДЫМОВСКИЙ БУНТЫ,

## йәки Интернет аша ғына революция эшләп буламы?

**Аккурат байрам алдынан ғына... Дөрөҫөрәге, бер байрамды билдәләп, икенсеһен ҡаршыларға йөрөгәндә генә... Нишләп улайтҡандыр инде? Башҡа берәй көн һайлап булманы микән? Мәҫәлән, ул мәрхүм Борис Николаевич Ельцин кеүек, 31 декабрҙә сығыш яһаһа, берәү ҙә ишетмәҫ ине лә, күрмәҫ ине. Иғтибар ҙа итмәҫтәр ине. Әллә махсус рәүештә йылына бер генә килә торған оло Байрамды - Милиция көнөн боҙорға ниәтләгәнме ул? Аңлашылмай.**

Төшөнгәнһегеҙҙер, һүҙ был юлы Новороссийск ҡалаһы эске эштәр идаралығының хеҙмәткәре майор Алексей Дымовскийҙың Интернеттағы видеомөрәжәғәте хаҡында барасаҡ. Теләһә кемгә түгел, ә Путиндың үҙенә бит әле. Шунда уҡ һорау тыуа: ә ниңә Президентҡа түгел икән? Әллә Дымовский Дмитрий Анатольевич Медведевты кешегә (дөрөҫөрәге, Президентҡа!) һанамаймы? Әллә, ул дәүләтебеҙҙең башында президент түгел, ә премьер-министр тора, тип уйлай микән? Ғәжәп.

Ғәжәп хәлдәр бының менән генә бөтмәй әле. Башлана ғына. Милиционер, нишләптер, мөрәжәғәтен Интернетта 7 ноябрь көнөндә урынлаштыра. Йәғни, Милиция көнөнә өс тәүлек ваҡыт ҡалғас. Милиционерҙар формаларын һәм аҡ күлдәктәрен үтекләп ҡуйғас. Рәсәй Президенты хакимиәтендә хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәренә ҡотлауҙар һәм наградалар әҙерләгәс. Әртистәр милицияға булған йырлы-моңло тәбриктәрен һайлағас. Гәзит-журналдарҙа батыр һәм ҡыйыу, көслө һәм егәрле (был һүҙҙәрҙә бер генә лә кинәйә юҡ, милиция сафтарында ундайҙар ҙа бар) участковыйҙар, оперативниктар, ОМОН хаҡында репортаждар яҙылғас һәм полосаға ҡуйылғас. Тап ошо мәлдә теләһә ниндәй сайттарҙа түгел, ә Дымовскийҙың үҙенең шәхси сайтында (уның фамилияһы менән аталған) бер түгел, ике видеосюжет барлыҡҡа килә. Хәтерләһәгеҙ, был хәл 7 ноябрь көнө була. Әле бер нисә йыл элек кенә беҙ был көндә Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының сираттағы йыллығын билдәләй торғайныҡ. Интернетта был сюжеттар тураһындағы хәбәр далалағы янғын тиҙлеге менән тарала. Ике көн эсендә ул видеороликтарҙы 600 меңдән ашыу кеше ҡарап өлгөрә. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк: Интернетта сайт теркәү һәм асыу өсөн билдәле бер ваҡыт һәм күпмелер аҡса кәрәк була. Тағы ла - сайтты теләһә кем эшләй алмай. Бының өсөн махсус белем һәм тәжрибә талап ителә лә баһа. Һорау тыуа: ни өсөн милиционер Путинға үҙенең ялыуын хат аша юлламай? Ә? Почтаға ышанысы юҡмы? Барып етмәҫ, тип уйланымы? Юлда асып уҡырҙар, тип шикләндеме? Әллә почта аша ебәрелгән мөрәжәғәт бында көслө шаңдау тыуҙырмаясағын аңланымы? Майорға нимә кәрәк һуң - Рәсәй эске эштәр органдарында тәртип урынлаштырыуҙы, әллә ошолайтып билдәлелек яулаумы?

Үҙенә үҙе "Бер минутлыҡ дан" тапшырыуын ойоштороп түгелме Дымовский? Бик ҡиммәт "тапшырыу" килеп сыға бит. 9 ноябрь көнө үк майор Краснодар крайы эске эштәр идаралығының махсус комиссияһы тикшереүе һөҙөмтәһендә эштән бушатылды. Йәнәһе, бөтә ғаләмгә Интернет аша ғәйбәт һөйләп тик ултыра. Әйткәндәй, әллә милиция хеҙмәткәрҙәре Хеҙмәт кодексы буйынса эшләмәй инде? Кешене тотоп алып эштән ҡыуып булмай бит, әгәр ҙә ул үҙе теләмәһә. Уны сығарыу өсөн тәүҙә уның эшмәкәрлеген тикшерергә, ғәйептәрен асыҡларға кәрәк бит әле. Тағы ла ҡыҙыҡ бер нәмәне асыҡланым - баҡтиһәң, Путин үҙе был видеоны ҡарамаған икән. Йәғни, милиционерҙың видеомөрәжәғәте (асыҡтан-асыҡ Интернетта урынлаштырылған булһа ла һәм уны, ябай ғына итеп әйткәндә, ярты Рәсәй халҡы ҡарап өлгөрһә лә) адресатҡа барып етмәгән булып сыға. Бәлки, был мөрәжәғәт Путинға түгел, ә ваҡытлы матбуғат сараларына тәғәйенләнгәндер.

Тағы ла ғәжәп хәл: илдең дөйөм мәғлүмәт саралары Дымовскийҙың видеоһы тураһында төрлө яҡлап яҙһа ла, һәр нәмәнән сенсация эҙләгән журналистарҙың тел төбөнән шуны аңлап була - милиционер-бунтарь эске эштәр органдарының эшмәкәрлеге тураһында йәмәғәтселек белмәгән бер нәмә лә әйтмәгән. Йәғни, быға тиклем дә хоҡуҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәренең ҡырын эштәре хаҡында бар ғаләмгә билдәле ине. Был хаҡта журналистар ҙа, милиционерҙар ҡулына эләккән ябай граждандар ҙа, милиционерҙар үҙҙәре лә әйтә торғайны. Тик был юлы милиция хеҙмәткәре битен йәшермәне генә. Тимәк, ул үҙенең һәр бер һүҙе өсөн яуап бирергә әҙер.

Илебеҙҙең Эске эштәр министрлығының был сығышҡа мөнәсәбәте бик ҡыҙыҡ тойолдо. Тәүҙә, Дымовскийҙың видеоһында яңғыраған факттарҙы тикшереү өсөн Краснодар крайына Рәсәй МВД-һының махсус комиссияһы йүнәлтеләсәк, тип хәбәр ителде. Артабан, крайҙың эске эштәр идаралығы белдереүенсә, факттар Мәскәү комиссияһына тиклем үк тикшереп өлгөрөлгән, улар раҫланмаған, ә Дымовский эштән ҡыуылған. Һәм, ниһайәт, Рәсәй Эске эштәр министрлығының эске именлеге департаменты (ул подразделение милиционерҙарҙың эшмәкәрлеген тикшерә, хыянатсыларҙы асыҡлай һ.б.) Дымовский менән сит ил йәмәғәт ойошмаларынан аҡса алған хоҡуҡ яҡлаусылар бәйләнештә тора, йәғни, милиция майорының сығышы менән сит илдәр идара итеүе ихтимал, тип белдерҙе. Ә был бит "ҡыҙыл-һары" революцияға әҙерлек тигән һүҙ.

Ғөмүмән, һуңғы арала сит илдәрҙең беҙҙең Эске эштәр министрлығына йоғонтоһо айырыуса көсәйҙе һымаҡ. Һәр хәлдә, 2009 йылда был бигерәк асыҡ күренә. Ул бигерәк тә майорҙарға ҡағыла, шикелле. Иҫегеҙҙәлер, яҙғыһын Мәскәүҙә майор Евсюков урам буйлап йөрөп, кешеләрҙе пистолеттан "сүпләгәйне". Бында ла сит ил ойошмаларһыҙ булмағандыр ул. Евсюков кеше атыр алдынан араҡы эскән булған. Был эсемлек махсус рәүештә Евсюковҡа эсереү өсөн ситтән килтерелеүе, алдан сит дәүләттәрҙең йәмәғәт ойошмалары тарафынан әҙерләп, "өшкөрөп" ҡуйылыуы бик ихтимал.

Бынан тыш, тағы ла ике майорға сит дәүләттәрҙең йоғонтоһо ныҡ һиҙелде. Улары ябай майор түгел, ә генерал-майорҙар. Береһе - Бүрәт Республикаһының эске эштәр министры Виктор Сосюра, 17 октябрҙә Улан-Удэ ҡалаһында ҡулға алынып, Мәскәүгә оҙатылды. Икенсеһе - Тыва Республикаһының эске эштәр министры Виктор Лесняк. Тәүгеһе ойошҡан енәйәтсел төркөм булдырып, контрабанда менән шөғөлләнеүҙә ғәйепләнә. Икенсеһе иһә үҙе бигүк енәйәтсе лә түгел, әммә хеҙмәткәрҙәре аяуһыҙ башкиҫәрҙәр булып сыҡты. 24 октябрь көнө Тываның баш ҡалаһы Ҡыҙылда иҡтисади енәйәтселек менән көрәш идаралығы хеҙмәткәре тәүҙә юл-пост хеҙмәте инспекторын һәм взвод командирын, һуңынан үҙен атып үлтерә. Күрәһең, улар менән дә сит илдәр идара иткәндер. Нисек, ниндәй ысул менән - әлегә аңлашылмай. Бәлки, йыһан юлдаштары ашалыр?

Ғөмүмән, эске эштәр органдары бөгөн - юл сатында. Унда үҙенсәлекле революцион ситуация килеп тыуған. В.И.Лениндың мәңгелек формулаһына ярашлы, "аҫтағылар теләмәй, өҫтәгеләр булдыра алмай". Ошо урында, әлбиттә, үҙ эшен намыҫлы башҡарған, енәйәтселек менән аяуһыҙ көрәшкән, "ҡыҙыу нөктә"ләрҙә ҡан түккән милиционерҙарҙы иҫкә алырға кәрәктер. Һәр хәлдә, фабула шулай ҡуша һымаҡ. Асылда иһә, бөгөн эске эштәр органдары системаһы шулай ҡоролған - унда эшкә килеүселәр, иртәме-һуңмы, барыбер система талаптарына буйһоноп йәшәргә, йәки уны ташлап китергә мәжбүр. Кемдер көрәшергә маташа - хаттар яҙа, инстанциялар буйлап йөрөй, судлаша. Әммә системаны еңеп буламы һуң? Уны емерергә генә мөмкин. Система оҙаҡ йылдар туплаған тәжрибәгә таянып, Дымовскийҙы төрлө юлдар менән тапарға, юҡ итергә тырыша һәм тырышасаҡ. Уны "аҡылдан яҙған" тип иғлан итергә мөмкин. Уның милиционер булып эшләгән осорондағы төрлө хаталарын, етешһеҙлектәрен (ә кем был донъяла хатаһыҙ ғына эшләй һәм йәшәй әле?) килтереп сығарып, "фашларға" була. Һис юғында, ул баш бирмәй маташһа, ғаиләһенә, бисәһенә, балаларына, ахыры сиктә, үҙенә берәй ҡурҡыныс янарға мөмкин. Мәҫәлән, машинаһының тормозы тотмауы, йәки башына кирбес килеп төшөүе ихтимал. Кеше лә юҡ, проблема ла юҡ.

Был мин уйлап тапҡан әйтем түгел. Был мафияның төп эш итеү принцибы. Дымовскийҙың мөрәжәғәтенән һуң эске эштәр органдары тарафынан уға ҡарата яңғыратылған белдереүҙәргә иғтибар итегеҙ әле - улар тап ана шул юҫыҡта түгелме? Әйткәндәй, "ҡыҙыл-һары" революцияларҙы ойоштороусылар иң тәүҙә эске эштәр органдарының эшмәкәрлеген тотҡарларға, уларға теләһә ниндәй ысулдар менән кәртә ҡуйырға тейеш икән. Әллә ысынлап та илебеҙҙә яңы революция көтәме?

**Таһир ИШКИНИН.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Майор Дымовскийҙан һуң Интернетта үҙҙәренең видеомөрәжәғәттәрен Мәскәү Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһының элекке старшинаһы Вадим Смирнов һәм Коми Республикаһы Эске эштәр министрлығының элекке хеҙмәткәре Михаил Евсеев та урынлаштырҙы. Был юлы элекке "мент"тарҙың етәкселектең законһыҙ ҡыланыуҙарына зарланыуҙары Премьер-министрға түгел, ә Президентҡа төбәлгән.**

**Фараздар дөрөҫкә сыға түгелме?**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов 12 ноябрҙә Мәскәүҙә Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышы палаталарының берлектәге ултырышында ҡатнашты. Ошо ултырышта РФ Президенты Анатолий Медведев үҙенең Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһе менән сығыш яһаны.

✓ Йырсыларҙың Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Асыҡ республика конкурсы 16-19 ноябрҙән 14-18 декабргә күсерелде. Ул Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында үтәсәк.

✓ 20-22 ноябрҙә Өфөлә волейбол буйынса Башҡортостан Республикаһы Президенты Кубогы үтәсәк. Уйындар "Динамо" стадионында үтә. Унда "Урал" ( Өфө), "Войводина" (Сербия), "Ярославич" (Ярославль), "Локомотив-Изумруд (Екатеринбург) командалары ҡатнаша.

✓ БР Яҙыусылар союзының конференц-залында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев үҙенең "Хазина" исемле яңы поэмаһын уҡыны. Халыҡ шағирының яңы поэмаһын тыңларға ҡәләмдәштәре генә түгел, уҡытыусылар, студенттар ҙа йыйылғайны. Союзда әҙәби кесаҙна ошо сығыш менән асылды ла инде.

✓ Өфөлә "Әсә һәм бала" клиникаһы асылды. Төп бурысы - комплекслы тикшеренеү һәм ғаилә иштәрен заманса алымдар ҡулланып дауалау. Клиника ғаилә иштәренең һәм ҡатын-ҡыҙҙың репродуктив сәләмәтлеге боҙолоуын дауаларға мөмкинлек биреүсе ҡиммәтле юғары технологик ҡорамал менән йыһазландырылған. Уның базаһында операция бүлмәһе һәм көндөҙгө стационары булған гинекология бүлеге, ЭКО бүлеге һәм үҙенең лабораторияһы булған консультатив-диагностика бүлеге йәйелдерелгән.

✓ БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың һуңғы ултырышында депутаттар Башҡортостан Республикаһы профсоюз хеҙмәткәре көнөн рәсмиләштерҙе. Был көн йыл һайын 12 ноябрҙә билдәләнәсәк, сөнки 1948 йылдың 12 ноябрендә Өфөлә башҡорт профсоюздарының союз-ара беренсе өлкә конференцияһы уҙғарылған.

*✓ Рәзилә лә, Руслан да үҙ халҡының, үҙ нәҫеленең тарихына битараф түгел. Рәзилә үҙенең егерме быуынын белә, уның тамырҙары арҙаҡлы Бабсаҡ бейгә барып тоташа. Руслан әлегә туғыҙ быуынын өйрәнгән.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ДӘРЕСКӘ ЙӨРӨМӘЙ ТОР

**Башҡортостан Республикаһы хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев киҙеү һәм ОРВИ-ға ҡаршы етди саралар күреүҙе талап итте. Муниципалитеттар, һаулыҡ һаҡлау учреждениелары етәкселәре ҡатнашлығында үткән селектор кәңәшмәһендә һүҙ A/HINI вирусына ҡаршы өҫтәмә профилактика һәм эпидемия саралары тураһында барҙы.**

Бөгөн республикала ОРВИ һәм миҙгел киҙеүе менән 24 мең кеше ауырый, уларҙың 68 проценты - ун ете йәшкә тиклемге балалар. A/HINI-2009 пандемик киҙеүе рәсми рәүештә 10 кешегә ҡуйылған. Раил Сәлих улы эпидемия ваҡытында дарыуҙарға, медицина тауарҙарына нигеҙһеҙ хаҡ күтәрелергә тейеш түгеллегенә лә баҫым яһап, фармацевтика селтәре хеҙмәткәрҙәренә кеше һаулығында спекуляция эшләнергә тейеш түгел, тигән ҡәтғи иҫкәртеү яһаны. Ул, киҙеү һәм ОРВИ эпидемияһы мәлендә дарыуға хаҡтарҙы арттырыу буйынса һәр факт хоҡуҡ һаҡлау органдарына мөрәжәғәт итеү өсөн сәбәп буласаҡ, тип билдәләне.

"Роспотребнадзор" хәбәр итеүенсә, Өфөлә эпидемия күрһәткесе 23 проценттан юғары булыу сәбәпле, ҡалала карантин индерелеп, уҡыусыларҙың көҙгө каникулы бер аҙнаға оҙайтылды. Өфөгә бер нисә район һәм ҡала мәктәптәре лә ҡушылды. Мәктәптәрҙән тыш, баш ҡалала ҡайһы бер юғары һәм урта һөнәри белем биреү уҡыу йорттарында ла дәрестәр туҡтатылған.

## ҮҘ ЙОРТОҢА НИ ЕТӘ!

**БР төҙөлөш, архитектура һәм транспорт министры Рауил Ибәтуллин планлаштырылған 2,4 миллион квадрат метр торлаҡты төҙөп бөтөү төҙөлөш комплекстары алдында торған төп бурыс, тип билдәләне.**

"Үҙ йортом" тигән программа ошо маҡсатта эшләй ҙә инде. Ул әлегә Өфө районының Шамонин, Жуков, Дорогин ауылдарында тормошҡа ашырыла. Рауил Ибәтуллин әйтеүенсә, йыл аҙағына бында 1000-гә яҡын йорт файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Торлаҡ төҙөү менән бер рәттән, башҡа мәсьәләләр ҙә хәл ителә, мәҫәлән, тиҙҙән Өфө һәм Шамонин араһында транспорт йөрөй башлаясаҡ. Программа сиктәрендә Йоматау, Алексеевка, Базилевка тирәһендә лә йорттар төҙөү планлаштырыла, был үҙ сиратында 2,5 мең торлаҡ йорт төҙөүгә мөмкинлек бирәсәк. Был программа республиканың башҡа ҡалаларында һәм райондарында ла эшләйәсәк. Рауил Ибәтуллин бындай төҙөлөштәрҙә инженер- коммуникация үткәреү өсөн сығымдарын республика үҙ өҫтөнә аласағын да белдерҙе. Бынан тыш, программа сиктәрендә керамик плитәләр етештереүсе "Ласселсбергер" заводында майҙаны буйынса ҙур булмаған биналарҙы тиҙ арала төҙөргә мөмкинлек биргән линия асыласаҡ. Бындай йорттарҙа биҙәү эштәрен дә төҙөүселәр башҡарасаҡ, ә торлаҡтың бер квадрат метры 11-12 мең һум торасаҡ. Быйыл торлаҡ төҙөү өсөн бюджеттан ун миллиард һумдан ашыу аҡса бүленгән.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ИҢ ЯҠШЫ ҒАИЛӘ -

## Батырхан менән Баязитты үҫтергәне

**"Йәш ғаилә - 2009" ҡала конкурсының финал өлөшөнә сыҡҡан ете пар араһынан Гран-прины Киров районынан Рәзилә һәм Руслан Шәйхетдиновтар яуланы. Биш йәшлек Батырхан менән бер йәшлек Баязит исемле улдар тәрбиәләгән был ғаилә 2002 йылда "Йәшлек-шоу" конкурсында таныша. "Йыр һәм моң беҙҙе осраштырҙы, ҡауыштырҙы", - тиҙәр Шәйхетдиновтар үҙҙәре.**

Әле ғаилә башлығы Октябрь районында Федераль миграция хеҙмәте идаралығы етәксеһе булып эшләһә, Рәзилә "Тамыр" телерадиостудияһында "Байтус" тапшырыуының мөхәррире. Шулай ҙа уларҙың йыр-моңдан бөгөн дә айырылғаны юҡ. Рәзилә шиғырҙар ижад итә, Руслан көйҙәр яҙа, "Любизар" төркөмөндә йырлай. Батырхан "Тамыр" студияһына йөрөй, атаһы һымаҡ, йә милиционер, йә етәксе булырға хыяллана. Шуға ла каратэ секцияһында шөғөлләнә, "Ысын егет көслө булырға тейеш", - ти ул. Баязит та ағаһына эйәреп, төрлө уйындар уйнарға, йүгерергә ярата. Әле бәләкәй булыуынан файҙаланып, ағаһы уның табип булырын хәл итеп тә ҡуйған.

- Улдарыбыҙға ысын ир тәрбиәһе бирергә тырышабыҙ, - ти Руслан Шәйхетдинов. - Өйҙә уларҙы тыймайбыҙ, тик артыҡ шашып китһәләр, шелтәләп алырға ла тура килә. Батырхан каратэға йөрөй, был көрәш төрө уға үҙен яҡларға ғына түгел, ә тормоштағы төрлө хәлдәрҙән дөрөҫ сыға белергә, сыҙамлылыҡҡа, ихтыяр көсөнә лә өйрәтә.

Рәзилә лә, Руслан да үҙ халҡының, үҙ нәҫеленең тарихына битараф түгел. Рәзилә үҙенең егерме быуын ата-бабаһын белә, уның тамырҙары арҙаҡлы Бабсаҡ бейгә барып тоташа. Руслан әлегә туғыҙ быуынын өйрәнгән, конкурсҡа әҙерләнгән мәлдә архивта эҙләнеп, әсәһе яғынан Аҡкөсөктәр нәҫеленең Шәғәле Шаҡманға бәйле булыуын асыҡлаған. Был данлы нәҫелдән булған Көсөк старшина үҙ ваҡытында Белорет, Әбйәлил, Учалы яҡтарында берҙән-бер табип булып, халыҡты дауалауын иҫләүселәр был төбәктә әле лә бар. Былар Русландың күңелен үҫтерә, олаталары рухы гел изге эштәргә әйҙәп тора. Шуға ла "Йәш ғаилә" конкурсының шәжәрәгә ҡағылышлы өлөшө бигерәк фәһемле һәм файҙалы булды, ти улар. Тырышлыҡтарын жюри ағзалары ла юғары баһаланы: "Ғаилә тарихына ихтирамлы ҡараш өсөн" тигән махсус диплом менән бүләкләне Шәйхетдиновтарҙы. Инәнән күргән - тун бескән, атанан күргән - уҡ юнған, тиҙәр, әле барыһына ла бик уҡ төшөнөп етмәһәләр ҙә, матур яңғырашлы боронғо исемдәр йөрөтөүсе Батырхан менән Баязит та киләсәктә олатайҙары менән ғорурланыр, уларҙың исеменә тап төшөрмәҫкә тырышып йәшәр, үҙҙәре лә нәҫелдәрен лайыҡлы дауам итерҙәй улдар үҫтерер.

Быйылғы конкурстың тағы ла бер үҙенсәлеге - "Ғаилә гербы" тип аталған бәйге ине. Шәйхетдиновтар ғаилә гербын яһауға ла ижади ҡараған: унда тирмә, Рәзилә менән Русландың ырыу тамғалары төшөрөлгәйне. Герб бер ҡараһаң - ҡалҡан, бер ҡараһаң - ҡаурый формаһында. Ҡалҡан, беренсенән, ғаиләне символлаштырһа, икенсенән, хоҡуҡ һаҡлау органдарын, йәғни Русландың эшен аңлата. Ә ҡаурый - Рәзиләнең шиғри күңеленә ишара.

Тағы ла бер матур ғаилә байрамы артта ҡалды. Ҡала тормошонда күркәм ғәҙәткә әүерелгән был конкурс быйыл да татыу, берҙәм, ижад менән янып йәшәгән йәш ғаиләләр менән һоҡланырға мөмкинлек бирҙе, дәртләләрҙең күңеленә осҡондар һалды, уйһыҙҙарҙы уйландырҙы. Ә Шәйхетдиновтарға йыл аҙағында "Йәш ғаилә - 2009" Республика конкурсында баш ҡаланың данын яҡлап сығыш яһау бәхете йылмайҙы. Төп мөғлүмәти бағыусы "СТС-Өфө" телекомпанияһы еңеүселәрҙе Мәскәүҙә "Папины дочки" телесериалы геройҙары менән осрашыуға билет менән дә бүләкләне. Кем белә, бәлки, был ғаилә сериалының киләһе сериялары Рәзилә Шәйхетдинова сценарийы буйынса төшөрөлөр?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Йәш ғаилә - 2009" ҡала конкурсында өсөнсө урынға Ленин районынан Екатерина һәм Александр Пустовиттар, икенсе урынға Калинин районынан Анна һәм Константин Морозовтар, Совет районынан Лилиә һәм Руслан Ғәзәйеровтар, беренсе урынға Орджоникидзе районынан Анна һәм Дмитрий Шемагоновтар ғаиләләре лайыҡ булды. Уларҙың барыһына ла конкурстың бағыусылары ҡиммәтле бүләктәр тапшырҙы.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**



## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Бөгөн баш ҡала бюджеты коммуналь хеҙмәт өсөн түләүҙәр рәүешендә инә торған аҡсаның биш процентын йыйып бөтөрмәй. Шуны иҫәпкә алып, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәрен коммуналь түләүҙәр буйынса бурыслыларға ҡаршы бар саралар менән көрәшергә саҡырҙы.

✓Баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Өфөлә грипптың бер аҙ сигенеүе тураһында хәбәр ителде. 5 ноябрҙә дауалау учреждениеларына 2100 кеше мөрәжәғәт итһә, 9 ноябрҙә ундайҙар 1500 кеше тәшкил иткән. Был мәғариф учреждениеларында карантин иғлан итеү һөҙөмтәһелер, тип билдәләне Павел Качкаев. Оператив кәңәшмәлә шулай уҡ гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы барышы тураһында ла мәғлүмәт тыңланды.

✓Өфөлә балалар өсөн "Ҡыш Бабайға хат" Яңы йыл проекты тағы ла старт алды. Уны Ҡаланы үҫтереү йәмәғәт фонды ойоштора. Биш йәштән ун биш йәшкә тиклемге баш ҡала балалары быйыл ҡылған изге эштәре тураһында бишенсе декабргә тиклем Ҡыш Бабайға хат яҙып ебәрә һәм бүләк ала. Хатты ошо адрес буйынса ебәрергә: 450047, Өфө ҡалаһы, а/й -Ҡыш Бабайға.

✓21 ноябрҙә Ҡала мәҙәниәт һарайында эстрада йырҙарының "Аҡ һыуһар" исемле асыҡ ҡала конкурсы асыласаҡ. Һәләтле һәм тәүәккәл йәштәр, йыр бәйгеһендә ҡатнашып, маһирлығын һынай ала.

✓Баш ҡала аптекаларында вирусҡа ҡаршы битлектәр табып булмай башлағас, Өфө ҡала округы хакимиәте бер нисә ательеға битлектәр тегергә заказ бирҙе. Уларҙың үҙкиммәте ете һумға ғына төшәсәк, әммә уларҙы "Салауат Юлаев" матчтарында, башҡа спорт сараларында, халыҡ күп йөрөгән урындарҙа, шулай уҡ поликлиникаларҙа бушлай таратасаҡтар. Битлектәрҙең тәүге партияһы әҙер ҙә инде.

✓"Өфө" аэропортында бөгөн утыҙ йүнәлеш буйынса осоштар яһала. Өфөнән Минск, Киев, Рига, Душәнбе һәм башҡа ҡалаларға авиабәйләнештәр асыу тураһында һөйләшеүҙәр алып барыла. Шулай уҡ Вьетнам, Ҡытай, Чехия кеүек илдәргә яңы рейстар асыу перспективаһы ла бар.

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

**"Яңы тулҡын" тип аталды быйыл унынсы тапҡыр уҙғарылған "Евро-Өфө-Азия - 2009" Мода форумы. Юбилей "Модалы булырға ваҡыт" тигән девиз аҫтында үтте. Ә быйылғы мода ниҙән ғибәрәт һуң? Ошо форумға арналған матбуғат конференцияһында Өфө ҡала округы хакимиәтенең хеҙмәтләндереүҙе координациялау һәм көйләү бүлеге начальнигы Ольга Завьялова әйтеүенсә, "ялтырауыҡ һәм сағыу кейемдәр артта ҡалды. Быйыл стилде һаҡлау модала".**



# МОДАЛЫ БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ...

## милли үҙенсәлекле кейемдәр кей

Ысынлап та, сарала ҡатнашыусы автор коллекциялары, яңы асылған ателье эштәре, йәш дизайнерҙарҙың ижад өлгөләре тап ошо хаҡта һөйләне. Беҙ әленән-әле сәхнәлә сығыш яһаусы модель ҡыҙ-егеттәрҙәге кейемдәргә ҡарап, ошо стиль тигән төшөнсәнең һаҡланыуын күҙәттек. Әлбиттә, йәш ижадсылар, һәр ваҡыттағыса, экстравагантлыҡҡа ынтылырға тырыша. Был юлы ла, мәҫәлән, Шамил Шәйхуллин "Аҡ ҡуян эҙенән" тигән коллекцияһы менән сығыш яһаһа, "Миллениум" мода театрынан иң йәш ҡатнашыусылары тамашасы хөкөмөнә "Үлсәүҙәр йондоҙлоғо аҫтында" тигән фантастик коллекция тәҡдим итте. Кем белә, бәлки, киләсәктә тап ошондай кейем төрөн үҙ итеүселәр ҙә булыр. Мода форумы башланғандан алып әлегә тиклем үҙ йөҙөн юғалтмаған, һаман да актуаллеген һәм күркәмлеген һаҡлай килгән коллекциялар ҙа юҡ түгел. "Салауат", "Восход", "Дамское счастье" ательелары тәҡдим иткән кейем өлгөләре тап шулар рәтендә ине.

- Форум үҙенең ун йыллыҡ йәшәү дәүерендә баш ҡала тормошоноң мәҙәни өлөшөнә әүерелде. Ул шоу, мода күрһәтеүҙән бигерәк, мода һәм матурлыҡ индустрияһы өлкәһендә эшләгән белгестәргә, ателье-салондарға үҙенең һөнәри оҫталығын, ижади мөмкинлеген, абруйын үҫтерергә, ә йәш модельерҙарға республикабыҙ күгендә генә түгел, Рәсәй мода донъяһында ла үҙ исемен танытырға этәргес булып тора, - тине мода форумының төп маҡсатына асыҡлыҡ индереп БР-ҙың Эшҡыуарлыҡ һәм сауҙа буйынса дәүләт комитеты рәйесе Ринат Зәйнуллин.

Былтыр "Евро-Өфө-Азия" Мода форумында ҡанат нығытҡан Гөлназ Хамматова күптән түгел Ҡаҙан ҡалаһында үткән I Халыҡ-ара мосолман модаһы конкурсында ҡатнашып ҡайтты. Был юлы ул мосолман ҡыҙ-ҡатындары өсөн "Ваҡытты тарат" тигән коллекцияһын тәҡдим итте. Алтын ҡояш нурҙары аҫтында, ҡом бөртөктәре һибелеүе - модельер коллекцияһының төп темаһы. "Шаян ел уйнаған һайын ҡом бархандарының иҫ киткес бөгөлөштәре барлыҡҡа килә. Ваҡыт та ҡом кеүек үҙгәреүсән. Был кейемдәрҙә замансалыҡ һәм күп быуаттарҙан һаҡланып килгән традициялар бер булып сағылыш тапҡан," - ошондай ҡылыҡһырлама бирелде Гөлназ Хамматованың ижад емешенә.

Һуңғы ваҡытта башҡорт милли колориты сағылыш тапҡан кейем өлгөләренең баш ҡала модаһына ҡыйыу аҙымдар менән килеп инеүе ҡыуаныслы күренештәрҙең береһе булып тора. "Профессиональ кейемдең яңы йөҙө" номинацияһында ҡатнашыусы Бөтә Рәсәй музыка йәмғиәтенең Башҡортостан етештереү комбинаты үҙенең иҫ киткес милли балҡыш тапҡан коллекцияһын тәҡдим итте. Ҡурай моңо аҫтында бындай матурлыҡҡа тамаша ҡылыу шул тиклем һоҡланғыс һәм тулҡынландырғыс булды. "Матур" модель агентлығы ҡыҙҙары күрһәткән был коллекция көслө алҡыштар менән оҙатылды. "Салауат" ательеһы иһә, тәбиғи күн һәм тиренән тегелгән "Ҡалала ҡыш" коллекцияһы менән сығыш яһаны. Бында ла беҙ милли үҙенсәлектәр менән байытылған кейем өлгөләрендә юғары зауыҡ һәм затлылыҡ хакимлыҡ итеүенә шаһит булдыҡ. Быйыл форумдың ҡунағы булараҡ сығыш яһаусы Өфө трикотаж фабрикаһы тәүгеләрҙән булып башҡорт милли колориты сағылған, халыҡ рухы һәм сафлыҡ бөркөлгән мосолман кейемдәре өлгөләре менән һушты алды. Улар ҡупшы, нәзәкәтле, уңайлы һәм заманса итеп тегелеүе менән иғтибарҙы йәлеп итте. "Һуңғы йылдарҙа халыҡтың ныҡлап Исламға килеүе кейем ихтыяжын да тыуҙырмай ҡалманы. Ҡала урамдарында Ислам шәриғәте буйынса кейенгән мосолман ҡыҙ-ҡатындарын көндән-көн күберәк осратабыҙ. Улар күпселек Мысыр, Төркиә илдәренән килгән кейемдәрҙе ҡиммәт хаҡҡа һатып алырға мәжбүр. Беҙ ошоларҙы күҙ уңында тотоп, "Ағиҙел" предприятиеһы менән берлектә урындағы халыҡтың милли мөхитенә, мәҙәни тормошона тап килгән кейем өлгөләрен тегергә ҡарар иттек. Улар уңайлы ла, йылы ла, иң мөһиме, зауыҡлы, матур һәм күпкә арзан бит. Шуға ла беҙҙең тауарҙар ҙур һорау менән ҡулланыла. Ғөмүмән, хәҙер милли колоритлы кейемдәр кейеү модала", - тип һөйләп үтте фабриканың генераль директоры Римма Стасина.



Гөлназ ХАММАТОВА коллекцияһы.

Быйылғы "Евро-Өфө-Азия" Мода форумының юбилей Гала-шоуында башҡа йылдарҙан айырмалы рәүештә еңеүселәр билдәләнмәне. Ателье директорҙарына, шәхси эшҡыуарҙарға иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды, матур концерт ойошторолдо һәм сара һуңында байрам торты тәҡдим ителде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүҙлектә "Мода - ул айырым бер зауыҡтың ҡайһы бер тормош өлкәһендә батшалыҡ итеүе" тиелә. Кемдәрҙер модаһыҙ күренеүҙән ҡурҡып, тотам да ҡалышмай, был шауҡым артынан эйәрә, кемдәрҙер кейемгә бөтөнләй битараф ҡарай. Миңә ҡалһа, кейем - күңел матурлығының тышҡы донъя менән ярашыуылыр ул. Кейемде һын-килбәтеңә, булмышыңа килешле итеп, әхлаҡи-рухи асылыңа тап килтереп, шәхси үҙенсәлек һаҡлап һайлағанда һәр ваҡыт зауыҡлы һәм матур күренергә булалыр.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

### Ҡасып йөрөһә...

**Ирем алимент түләүҙән ҡасып йөрөй, уға эҙләү һалдыҡ. Етмәһә, әле булһа хосусилаштырылмаған фатирҙа теркәлгән, мин уның өсөн коммуналь хеҙмәттәргә түләргә мәжбүрмен. Уны нисек теркәүҙән төшөрөргә?**

- Суд пристав-башҡарыусылар хеҙмәте тарафынан ирегеҙҙе эҙләтеү һөҙөмтәләре буйынса төҙөлгән документ нигеҙендә торлаҡ-эксплуатация участкаһы (ЖЭУ йәки ЕРКЦ) унан коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләтеүҙе туҡтата ала. Ә инде фатирға теркәүҙән төшөрөү фәҡәт суд тәртибендә башҡарыла.

### Етешһеҙлек тапһағыҙ

**Бер ҡыҙ менән егет өйөбөҙгә килеп, саң һурҙырғыс һатып алырға өгөтләне. Күҙ алдыбыҙҙа уны эшләтеп тә күрһәттеләр. Ҡатыным астма менән сирләгәс, саң һурҙырғыс беҙгә бик кәрәк, етмәһә, 2 меңгә ташлама яһарға вәғәҙә иттеләр. Шулай итеп, беҙҙе офистарына саҡырып, 35 меңлек саң һурҙырғысҡа кредит килешеүе төҙөнөләр, беҙ ҡул ҡуйҙыҡ, ләкин тауарҙы өйгә алып ҡайтып, эшкә ҡушҡас, уның етешһеҙлектәре асыҡланды. Тауышһыҙ эшләй, тигәйнеләр, был бик ныҡ шаулай. Беҙ был тауарҙан баш тарта алабыҙмы?**

- Бындай килешеүҙәр суд тәртибендә ғәмәлдән сығарыла. "Ҡулланыусы хоҡуғын яҡлау тураһында" РФ Законына ярашлы, ҡулланыусы тауарҙың һатыусы тарафынан алдан иҫкәртелмәгән етешһеҙлектәрен асыҡлаған хәлдә:

- тауарҙы ошо уҡ маркалағы башҡаһы менән алмаштырыуҙы;
- тейешле хаҡын иҫәпләшеп, тауарҙы башҡа маркалы шундай уҡ тауарға алмаштырыуҙы;
- тауарҙың хаҡын кәметеүҙе;
- тауарҙы тиҙ һәм бушлай йүнәттереүҙе;
- ахыр сиктә, һатыу-һатып алыу килешеүен ғәмәлдән сығарып, түләнгән аҡсаны кире ҡайтарыуҙы талап итергә хоҡуҡлы.

Килешеүҙе ғәмәлдән сығарыу бер яҡлы тәртиптә талап ителгән хәлдә ул РФ Законар Кодексы буйынса бойомға ашырыла.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



### Хәтер насарайһа

Ҡарттарға бигерәк тә файҙалы ысул. Бер стакан һуған һутына бер стакан бал ҡушып болғайһың да, һыуытҡыста һаҡлап, 2 ай буйы көнөнә өс мәртәбә ашарҙан 1 сәғәт алда берәр ҡалаҡлап эсәһең. Ашағас, ике сәғәттән һуң эсеү файҙалы.

### Аяҡтарҙы көҙән йыйырһа

Йоҡлар алдынан табанды лимон менән ышҡырға. Кипкәс, икенсе мәртәбә ышҡырға һәм йөн ойоҡ кейеп ятырға. Иртән торғас, аяҡтарҙы тағы лимон менән ышҡығыҙ. Аҙна тирәһе үтеүгә көҙәндең эҙе лә ҡалмай.

### Һөйәлдән ҡотолоу

Үксәлә, табанда, ус төбөндә тире ҡатып, ҡалыная. Уны ҡатыу тип тә атайҙар. Ауыртa ла, әйбер тоторға ла уңайһыҙ. Был һөйәлдән ҡотолоу өсөн ҡалынайған урынды 20 минут самаһы эҫе һабын күбегендә йомшартырға. Ҡатлам ҡуба. Асылған урын кипкәс, аҡ май йәки крем һөртөргә. Ярҙам итмәһә, бешкән һуған йәки йәшел һуған ҡыяғын төйөп, ҡайнар көйө һөйәлле урынға һылап бәйләргә. Дауалауҙы һауыҡҡансы эшләргә.

### Йүтәл йонсотһа

Бер стакан һөткә бер балғалаҡ бал ҡушып эсеп ятығыҙ, иртән тороуығыҙға тамағығыҙ йомшарыр. Икенсе бер ысул да бар: ас ҡарынға шәкәр ҡушып, ағарғансы туғылған йомортҡа һарыһын эсеү. Ярты стакан һөткә ярты стакан кишер һуты ҡушып эсһәң дә файҙаһы тейә.

### Һуған ҡабығы

Һуған ҡабығын көнө буйы, үҙеңә кәрәгенсә, һары төҫкә ингәнсе ҡайнатырға. Сәй, һыу, һут урынына эсергә. Астманан ҡотҡара, йүнәлгәнсе эсергә кәрәк.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

✓ *Тиҫтерҙәре менән аралашыу ҙа баланы ҡурҡыта ала. Сабыйығыҙ балалар баҡсаһына барыуҙан баш тарта икән, ундағы балалар коллективы уны үҙ итмәй икән, моғайын да, ул кәмһетелеүҙән ҡурҡалыр.*






## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Остаз һәм мөғәллим

● Мөғәллимдәргә буйһоноғоҙ, ҡаршыларында әҙәпле ултырығыҙ, нәсихәттәре буйынса ғәмәл ҡылығыҙ, сауаплы булыу өсөн ҡушҡан эштәрен еренә еткереп башҡарығыҙ, уларға ялыныҒыҙ, башҡа урында ялыныу мөьмин сифаты булмаһа ла, ғилем өйрәнеү өсөн ялыныу мөьмин сифаты була.

● Мөғәллимдәргә ҡаршы килмәгеҙ, улар менән ҡысҡырышмағыҙ, уларҙың һәр матур эшенә йәнегеҙ һәм тәнегеҙ менән эйәрегеҙ. Аңламаған урыныгыҙ булһа, шул килеш ташлап китмәйенсә, әҙәп һәм сабырлыҡ менән: "Әфәндем, ошо урынды аңламаным, ошо һүҙҙе белмәнем", - тип ҡабатлап һорағыҙ.

● Мөғәллимдәрегеҙ йәки мәктәп етәкселәре янығыҙға килгән ваҡытта әҙәп һәм хөрмәт менән ҡаршы алығыҙ. Әфәнделәр берәй нәмә һораһалар, һүҙегеҙҙе үлсәп кенә, хуш яуап бирегеҙ.

● Дәрестәр тамамланғас та, мәктәпте бөтөргәс тә мәктәп етәкселәре, мөғәллимдәр һәм йыйыштырыусыларҙың хөрмәттәрен хәтерегеҙҙән сығармағыҙ. Осраған ваҡытта хөрмәт итеүҙә кәмселек күрһәтмәгеҙ. Һәр намаҙҙан һуң һәм күнелегеҙ күтәренке саҡтарҙа улар өсөн хәйер-доғала булығыҙ.

### Шәкерттәр

● Мәктәптә бергә уҡыған шәкерттәр менән матур йәшәгеҙ. Уларҙы туғандарығыҙ кеүек күрегеҙ. Улар менән йомшаҡ һөйләшегеҙ. Осрашҡан ваҡытта шатланып ҡаршы алығыҙ. Шатлыҡ һәм ҡайғыларығыҙҙы уртаҡлашығыҙ.

● Яман холоҡ йоғошло була. Шуның өсөн яман холоҡло шәкерт барлығын белһәгеҙ, унан айырылығыҙ.

● Атайығыҙҙың байлығы йәки һөнәре, кейемегеҙ, дәрес әсбаптарығыҙ менән башҡа шәкерттәргә маҡтанмағыҙ. Улар менән һәр ваҡыт ихтирамлы һәм кеселекле булығыҙ.

● Шәкерттәр менән бергә ойошторған мәжлесегеҙ мөхәббәт һәм белем мәжлесе булһын. Шуның өсөн унда күңел ҡайтарасаҡ хикәйәләр, әҙәпһеҙ һүҙҙәр һөйләмәгеҙ, кәрәкмәгән урында ҡысҡырышмағыҙ, һүҙ көрәштермәгеҙ, хәтерҙәрен ҡалдырасаҡ эштәр эшләмәгеҙ, бигерәк тә ҡул күтәреүҙән һаҡланығыҙ.

● Мәктәп тәртиптәренә ярамаған йыйылыштар ойоштормағыҙ. Кәрәкмәгән эштәр арҡаһында дәрестәрегеҙҙе ҡалдырмағыҙ.

● Иптәштәрегеҙҙә күргән әйберҙәргә ҡыҙыҡмағыҙ, уларҙы һорамағыҙ. Белегеҙ: бөйөклөк алыуҙа түгел, биреүҙә.

● Мәктәптән айырылғандан һуң мәктәптә бергә көн кисергән иптәштәрегеҙҙе онотмағыҙ. Уларҙы ихтирам итегеҙ. Иң олуғ дәрәжәләргә ирешһәгеҙ ҙә, иң түбәндәре алдында ололанмағыҙ. Был әҙәпһеҙлектең билдәһе икәнен иҫегеҙҙән сығармағыҙ.

АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

# БАЛА ҠУРҠА ИКӘН,

## уны әрләмә, ҡыйыу булырға өйрәт



**Балағыҙ ҡараңғынан ҡурҡамы? Өйҙә бер үҙен ҡалдырып китеү мөмкин булмаған хәлме? Уны нимә ҡурҡыта икәнен нисек асыҡларға? Был һорауҙар, иртәме-һуңмы, һәр ата-әсәне борсоуға һала.**
**Кеше һәр ваҡыт нимәнән булһа ла ҡурҡа. Бала - бигерәк тә, сөнки уны әлегә бөтөнләй таныш булмаған донъя уратып алған. Бала саҡтағы ҡурҡыуҙар ҙурайғас та үтмәүе ихтимал. Шуға ла балаға ваҡытында ярҙам итеү һәр ата-әсәнең, тәрбиәсенең, психологтың бурысы.**

### Нимә ул ҡурҡыу?

Ҡурҡыу - бөтә тойғолар араһында иң хәүефлеһе. Ысынбарлыҡта булған йәки уйлап сығарылған хәүеф мәлендә уны бөтәгеҙҙең дә кисергәне бар. Кеше организмы шулай ҡоролған: ул ҡурҡыу менән оҙайлы көрәш алып бара алмай. Биологик яҡтан ҡарағанда, ҡурҡыу - ҡанға ҙур күләмдә адреналин бүлеп сығарып, кеше организмында гормондарҙың ҡапыл артыуына килтергән тойғо. Психологик күҙлектән, ҡурҡыу -кире эмоциялы, көсәргәнешле, йәшәү өсөн ҡурҡыныс янау тойғоһо. Балала ҡурҡыу тойғоһо тирә-яҡ донъяны танып-белеү эшмәкәрлегенә бәйле барлыҡҡа килеүсән. Тик шуны ла оноторға ярамай: бала социумда үсешә һәм уны тәрбиәләүҙә ата-әсә мөһим роль уйнай. Шуға ла әйткән һүҙҙәрегеҙ һәм ҡылыҡтарығыҙҙың балаһың психологик сәләмәтлегенә йоғонто яһауын онотмағыҙ.

### Ҡурҡыу ҡайҙан барлыҡҡа килә?

Тәүге сәбәп - баланы ҡурҡыуға һалған аныҡ ваҡиға (эт тешләгән, лифтта бикләнеп ҡалған). Бындай төр ҡурҡыуҙарҙан арыныу ҙа еңелерәк.

Күп осраҡта өлкәндәр үҙҙәре баланы ҡурҡырға өйрәтә. Уйламай әйтелгән һүҙ баланың хәтерендә уйылып ҡала һәм ул аҙаҡтан был әйбер йәки ваҡиғанан аңһыҙ рәүештә ҡурҡа башлай. Баланың ҡурҡыуы нигеҙендә ата-әсәләрҙең, тәрбиәселәрҙең бер туҡтауһыҙ тыйыуы ла ята ала. "Шәп атлама - ҡолап китерһең", "Тотма - ҡулыңды яндырырһың", "Һыйпама - тешләр" һ.б. Был осраҡта ололарҙың бала өсөн ҡурҡыуы балаға ла күсә һәм ул нимәнән ҡурҡырға кәрәк икәнлеген аңламаһа ла, хәүефте тоя, ҡурҡыу реакцияһы барлыҡҡа килә.

Ҡурҡыу балаларҙың уйлап сығарырға маһир булыуына ла бәйләнгән. Бәләкәс кешегә ҡараңғыла ниндәйҙер имәнес йәнлектәр, әрәктәр йөрөй, өй мөйөшөнән килеп сығып, әҫкә нимәләр ташланыр кеүек тойола. Ҡурҡыныс йәнһүрәттәр йәки фильмдар ҡарау ҙа ошондай уҡ эҙемтәләргә килтерә. Бындай ҡурҡыуҙар ҙурайғас та онотолмауы ихтимал.

Атай менән әсәйҙең бер туҡтауһыҙ һүҙгә килешеүе лә баланы хәүефкә һала һәм ул бындай ирештәрҙең сәбәбе булып ҡуйыуҙан ҡурҡа башлай. Тиҫтерҙәре менән аралашыу ҙа баланы ҡурҡыта ала. Сабыйығыҙ балалар баҡсаһына барыуҙан баш тарта икән, ундағы балалар коллективы уны үҙ итмәй икән, моғайын да, ул кәмһетелеүҙән ҡурҡалыр. Йәше буйынса ҙурыраҡ балаларҙың төрлө ваҡиғалар уйлап сығарып һөйләүе лә ҡурҡыу тойғоһон барлыҡҡа килтерә ала.

Иң һуңғы сәбәп - невроз, уны табиптар ғына дауалай ала.

### Ҡурҡыу төрҙәре

1 йәшкә тиклем балалар көслө тауыштан ҡурҡа. 2-3 йәш тирәһендә яҙанан, ауыртыуҙан (мәсәлән, табипҡа барыуҙан), яңғыҙлыҡтан һәм ҡараңғылыҡтан ҡурҡа башлай. Был йәш өсөн бындай ҡурҡыуҙар нормаль һанала. 3-4 йәштә фантазия үсеше менән бәйле ҡурҡыу барлыҡҡа килә. Ә 6-7 йәшкә еткәс, бала үлемдән, яҡынынды юғалтыу мөмкинлегенән ҡурҡа. Кеше ғүмере өсөн хәүеф тыуҙырыусы ваҡиғалар (йәшен йәшнәү, электр тогы һ.б.) мәлендә лә ул үҙен тынысһыҙ тота.

### Ҡурҡыуҙы нисек еңергә?

Ҡурҡыу һәҙөмтәһендә тиҙ ҡыҙып барыусанлыҡ, бушҡа мыжыу, тиҫтерҙәр менән аралашыуҙа ҡыйынлыҡтар, үҙ-үҙенә бикләнеү, төрлө комплекстар, невроздар һәм башҡа етди проблемалар тыуыуы ихтимал.

Иң тәүҙә бала менән һөйләшергә кәрәк. Быны тыныс урында, баланы алдына ултыртып йәки эргәһенә яҡын ултырып эшләү яҡшыраҡ. Бала менән уны ҡурҡыуға һалған әйберҙәр тураһында аңғамә ҡороғоҙ, бала уны һүрәтләп бирһен - ул ҡурҡыу тураһында ни тиклем күберәк һөйләһә, шул тиклем тиҙерәк онотасаҡ. Үҙегеҙҙең бала сағығыҙҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, ҡурҡыуҙарығыҙ һәм, мотлаҡ рәүештә, уларҙы нисек еңеүегеҙ менән уртаҡлашығыҙ.

Балағыҙ менән ҡурҡыу тураһында әкиәт йәки хикәйә уйлап сығарығыҙ. Әҫәрҙең аҙағында ҡыйыу герой ҡурҡыуҙы еңһен.

Бала ҡурҡҡан нәмәһен һүрәткә төшөрһөн. Һуңынан уны яндырығыҙ һәм "Бынан һуң ул һине бер ҡасан да борсомаясаҡ, сөнки беҙ уны яндырҙыҡ", тип балаға аңлатырға кәрәк буласаҡ. Ҡағыҙҙың көлөн бала менән бергә ташлағыҙ һәм был саҡта: "Калай һин ҙур һәм ҡыйыу", - тип маҡтап алырға онотмағыҙ.

Бала ҡараңғынан, яңғыҙ йоҡлауҙан ҡурҡа икән, күнекһен, тип ҡараңғы бүлмәгә ябып ҡуймағыҙ. Бынан ул, киреһенсә, тағы ла ныҒыраҡ ҡурҡасаҡ. Бер ҡасан да ҡыҫҡырмағыҙ, баланың ҡурҡыуын мыжыу итеп кенә ҡабул итмәгеҙ, язаға тарттырмағыҙ.

Бала үҙенең ҡурҡыуҙарын үҙе еңергә тейеш, әммә бында һеҙҙең ярҙамығыҙ ҙа кәрәк, хөрмәтле ата-әсәләр. "Мин янында саҡта бер нәмәнән дә ҡурҡма", - тип, йышыраҡ әйтегеҙ, ул һеҙгә ышанырға өйрәнһен.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Лариса ЯМАНЬЯРОВА, тәрбиәсе:** Яңыраҡ шундай күренешкә тап булдым: ҙур магазинда әсә кеше бәләкәй ҡыҙын эскалаторҙың хәрәкәтләнеп торған баҫҡыстарына баҫтырырға маташа. "Әсәй, ҡурҡам!" тип илаған ҡыҙын әсә: "Һин бит бәләкәй түгел, минә һинең өсөн оят", - тигән һүҙҙәр менән битәрләй-битәрләй, тартҡылауын дауам иткән мәлдә улар янына оло ғына йәштәге бер ир килде лә: "Ә һин беләһеңме, был нимә? Был бәләкәй генә ҡуян балалары өсөн баҫҡыс. Төн етеп, магазин бикләнгәс, улар йәшеренгән ерҙәренән сыға ла, ошо баҫҡыстар буйлап һикерә башлай - был уларҙың яратҡан уйыны. Көндөҙ улар баҫҡыстарын бәләкәй генә ҡыҙ һәм малайҙарға биреп тора", - тине. Ҡыҙ ышаныс тулы күҙҙәре менән был сал сәсле олатайға ҡараны һәм әсәһенең ҡулынан етәкләп, баҫҡысҡа баҫты. Был ваҡиға яҡшы тамамланһа ла, ни өсөндөр, күнелдә өйкәп тик торҙо. Бының сәбәбенә мин һуңғараҡ төшөндөм. Өлкәндәр ҡыҙҙы эскалаторға баҫырға ризалатһа ла, ҡурҡыу тойғоһонон нормаль хәл икәнен береһе лә төшөндөрмәне. Шул урында әсә: "Бөтә балалар ҙа бәләкәй саҡта нимәнән булһа ла ҡурҡа. Улай баҫҡыстарҙан ҡурҡһаң, әйҙә, мин һине ҡулындан тотоп торам, бәлки, ҡыҙыҡ әкиәт һөйләргәләр?" - тип әйтһә, яҡшыраҡ булыр ине. Сөнки бала ололар аңламаған тойғолар (был осраҡта, хәрәкәтләнеп торған баҫҡыстарҙан ҡурҡыуы) кисереүе, бының өсөн уны яратмай башлаясаҡтары өсөн хәүефләнә башлай. Йәшендән йәки ҡараңғынан ҡурҡыу насар, әммә яратҡан кешеләреңдең һине бының өсөн әрләүҙәре тағы ла ҡурҡынысыраҡ.

Ололар шуны аңлаһын ине: бала донъяны бөтөнләй икенсе күҙҙәр менән күрә. Яңғыҙы бер бүлмәлә йоҡларға ҡурҡҡан ҡыҙына бының бер ниндәй ҡурҡынысы ла юҡ икәнен аңлатырға тырышҡан әсәһенә ҡыҙ былай тип яуаплай: "Мин һинең ҡараңғылығыңдан ҡурҡмайым, мин үҙемдең ҡараңғылығымдан ҡурҡам". Баланың бай фантазияһы уны көслө тойғолар кисерергә мәжбүр итә, шуға ла сабыйығыҙҙың тәрән кисерештәренә буш нәмәгә ҡараған кеүек ҡарамағыҙ.

Бала ҡурҡыуҙың тәбиғи тойғо икәнен аңлаһа ғына ҡурҡыу юҡҡа сығасаҡ. Балағыҙға башҡа бик күп балаларҙың да ҡурҡыу тойғоһо кисереүен әйтегеҙ, ҡыҙығыҙ йә улығыҙ уның ҡурҡыуын аңлауығыҙҙы, ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер булыуығыҙҙы белеп торһон. "Һин, бәлки, ҡурҡырһың, ул саҡта иларға ла мөмкин. Шулай ҙа һинә еңелерәк булһын өсөн мин һине ҡулыңдан ныҡ итеп тотоп торам", - тигән һүҙҙәр ишетеп ингән бала табип кабинетында иң ҡыйыу бала икәнен бер ҡасан да онотмағыҙ.

Ләйсән НАФИҠОВА әҙерләне.

*✓ Тимер иретеү, унан ҡорос эшләү серҙәрен, бигерәк тә ҡаты, һығылмалы ҡорос эшләү серҙәрен ҡуҙсығала (кузняла), аҙаҡ заводта эшләгән һолло башҡорт ҡороссолары бик яҡшы белгән.*

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# БУЛАТ ҠЫЛЫС ОҪТАҺЫ...

## башҡорт улы Булат булыр

Шунан файҙаланып, Лугинин Ҡуңғырат ауылы ерҙәренә ҡушып, Түһәле, барындарҙың Ҡаҡсырҙы, Бурай алды, хәҙерге Устиново, Косачево ауылдары ултырған ерҙәрен 400 һумға ғына һатып ала. Мулдаҡай ауылы кешеһе Бикбулатов Нурғәли олатай һәм Яруллин Тәминдәр ағай һөйләүе буйынса, Ҡуңғырат ауылында старшина булып торған Күкей Бикбулатовты көсләп араҡы эсереп, ә сотник Миңлебай Сәлиховты ҡул ҡуймаған өсөн бәйләп, ҡамсы һуҡтырып, бармаҡтарын баҫтырып алалар. Был турала былай тип яҙыла: "лета 1775, сентября 17, Оренбургской губернии Куваканской волости Кундратского рода, выбранные от всех мужских людей поверенные старшины Кукей Бикбулатов, сотник Минакай Салихов и другие продали мы и все волостные люди с общего согласия тульскому первой гильдии купцу Лариону Ивановичу Лугинину ...собственную нашу землю" (Новикова В. А. Сборник материалов для истории Уфимского дворянства. Уфа, 1879. С. 242. Был халыҡ ҡасандыр Ҡуңғырат үзбәктәренән айырылып, Ҡыуаҡан ырыуына ҡушылған ҡәүем булһа кәрәк. Шулай итеп, Күкей старшина менән Миңлебай сотник үҙ йортон, ерен, һыуын Лугининға һатып ебәрә.

Ларион Лугинин Исәт провинцияһы канцелярияһы менән килешеү акты төҙөп, Мейәс һыуы уртаһындағы Ҡара Табын һәм Мейәс, Уй, Ағиҙел, Яйыҡ башындағы барындарҙың барлыҡ ерҙәрен үҙенә мәңгелеккә беркетеп ҡуя. Был турала халыҡ, әлбиттә, йә бөтөнләйгә белмәй, йә һалпы-һолпо ғына ишетеп ҡала. Тәүҙә ул көтөүлектәрҙе һәм арпа, тары сәскән һөрөнтө ерҙәрҙе ҡулланыуға сик ҡуймай. Нигеҙҙә, халыҡ ерҙе нисек ҡулланһа, шул рәүешле ҡулланыр булған, әммә рәсми рәүештә ер Лугиндыҡы булып иҫәпләнгән. Ул барлығы 700000 мең десятина, йәғни 70 мең гектар башҡорт ерен ала.

Тарих ҡабатлана. Шул уҡ ваҡиға бөгөн кире ҡайтты. Йә тау сәнәғәте, йә үткенселәр 49 йылға, ә ысынбарлыҡта, әгәр Рәсәй дәүләт системаһы шундай йүнәлеш менән барһа, мәңгелеккә тағы ла Ҡараҫ Табын, Барын-Табын, Ҡыуаҡан, Әйле ерҙәрен үҙҙәренә ҡағыҙҙа беркетеп ҡуйҙы. Бөгөн дә тау сәнәғәте, алтын, баҡыр табыу булһынмы, таш онтау һәм башҡа ойошмалар артында Мәскәү, Петербург кешеләре тора.

Л. И. Лугинин 1789 йылда ҡапыл үлә. Златоуст яҙыусыһы П. П. Падучев Ларион Лугининдың үлемен былай тип яҙа: "...Если верить неясным рассказам, почти внезапная смерть заводчика окружена какою-то тайной. Говорили, что он задушен лакеем или рабочим, залезшим к нему в спальню, чтобы поживиться богатством железного сундука, на котором больной старик лежал день и ночь... Виновника его смерти схватили и с привязанным к шее камнем бросили в воду" ("Исторический вестник", 1896 г.).

1798 йылда Златоуст заводы "...отдан в вечное потомственное арендное содержание московскому первой гильдии купцу Андрею Андреевичу Кнауфу".

Әле Лугинин осоронда уҡ Златоуст тимер иретеү заводы ҡуҙсыҡкандарында бик күп тимер, ҡорос ҡойоу оҫталары эшләй. Шулай итеп, Златоуста тимер, ҡорос һуғыу осоро башлана. Рәсәй империяһының бер туҡтауһыҙ баҫҡынсы һуғыштары өсөн ҡоралға ихтыяжы бермә-бер арта. Тимер иретеү, унан ҡорос эшләү серҙәрен, бигерәк тә ҡаты, һығылмалы ҡорос эшләү серҙәрен ҡуҙсығала (кузняла), аҙаҡ заводта эшләгән һолло башҡорт ҡороссолары бик яҡшы белгән.

Уҡыусыларҙың ҡайһы береһе аптырап та ҡалыр. Шундай ҙур мәсьәлә нишләп әлегә тиклем рәсми тарихсылар тарафынан тикшерелмәй ята, тиер. Эйе, кемдер күтәреп сыҡмаһа, ятасаҡ та ятасаҡ был мөғжизә. Был мөғжизә генә түгел. Был - ысынбарлыҡ! Яҙмамдың башында уҡ күп осраҡта хәҡиҡәттең хәҡиҡәт булып ҡала алмауы өсөн һыҙланғаныма ишаралағайным. Яҙыласаҡ төп ваҡиғаны нигеҙләр өсөн килтерҙем алда бәйән ителгән тарихи мәғлүмәтте. Әле 1970 йылдарҙа уҡ Силәбе өлкәһе Уй районы Булат ауылы кешеһе Хажиәхмәт Ғәбитов бабайҙың Буғай хаким тураһында ентекләп-ентекләп һөйләгәндәре лә ошо мәғлүмәтте раҫлай. Төрлө ваҡытта бер-береһенә бөтөнләйгә ят кешеләрҙең бер үк фекерҙе нигеҙләүе күптәнән өйкәй ине күңелде. Әйтерһең дә, ул ваҡиғалар бер-береһенең дауамы. Ваҡиғаларҙың ғына дауамы түгел, халҡымдың тарихының дауамы, әле асылмаған, яҡтыртылмаған бер семтеме генә. Шул турала тарихҡа оло хәреф менән тағы ла ҡабаттан яҙып ҡалдырырлыҡ бер ваҡиғаны миңә Мәскәүҙә йәшәгән Златоуст кешеһе, инженер Кочубей Иван Михайлович тигән кеше һөйләгән ине.

1966 йылдың көҙө. Мин Мәскәү ауыл хужалығы академияһы студенты булған саҡ. Һәр йылдағыса, атайым менән инәйем хужалығына бесән сабып, өйөп, утын ярып, еңел күңел менән сумаҙанға кипкән ҡорот, һары май, тоҙланған өйрәк, тауыҡ иттәре һалып, Мейәс ҡалаһында Силәбе - Мәскәү поезына ултырҙым. Төн ҡуйыһын йыртып, еүеш һаҙлыҡтар, ҡырҡмаһа-ҡырҡ эреле-ваҡлы йылғалар аша мөһабәт Урал армыттарының осон эҙләп, борола-борола бара торғас, поезд Алтынтамаҡ (Златоуст) ҡалаһына килеп етте.

Пассажирҙарҙың төшкәне - төшөп, башҡалары инә башланы. Мин ултырған купеға ҡырҡ биш-илле йәштәрҙәге урта буйлы, киң яңаҡлы, зәңгәр күҙле, әммә ҡара сәсле кеше кереп, урын алды. Иҫәнләште. Иван Кочубей, тине. Кейем-һалымына ҡарағанда - интеллигент. Сисенде. Юл кейемдәрен кейҙе. Ул арала поезд ҡуҙғалып китте.

"Ну что, попутчик, давай поближе познакомимся, - тип тағы ла ҡул һуҙҙы, - Иван Михайлович Кочубей". "Спартак Ильясов", - тинем. Тиҙ генә таныштыҡ. Ул да Мәскәүгә бара икән. Һөйләүе буйынса, фән эшмәкәре, инженер. "Работаю в области твердых сплавов", - тине. Минең турала һорашты. "Ты башкир, так ведь? Я догадался, да?" - тип һораны. Артабан беҙҙең һүҙҙәр ҡуйырҙы.

Ер-һыу, география, халыҡ оҫталары т,ураһында һүҙ сыҡҡас, ул миңә: **"Знаешь, Спартак, ведь все эти земли башкирские... А видел ли ты памятник металлургу Аносову на площади Третьего Интернационала в Златоусте?"** - тип һораны. **"Видел, знаю"**, - тип яуапланым. **"Это памятник описавшему секреты булатной сабельной стали. Так официально утвердилось в русской истории, во всяком случае. А ведь фактически сотворитель, кователь булатной стали не Аносов. Автор и сотворитель булатной стали - сталевар и кузнец с этих же краев, башкир по имени Булат!** Как и все многие рабочие завода, он был каторжанином. Его далекие деды были наемными мамлюками в Персии, Египте. В одной из битв он был пленен кавказцами в тяжелораненном состоянии. Продан в Персию, далее - в Испанию. Сбежал, но был схвачен и продан в Германию. В составе металлургов-немцев попал в Россию. На долгие годы был закован в кандалы. Прошел все ужасы крепостей Германий, тюрем России. Сидел под чужим именем в Петропавловской крепости. По его узорам, начерченным на кусочке шелка, были сделаны многие решетки и узоры крепости и даже Петербурга.

За грамотность в металлургии ему обещали свободу с условием обучения таких же каторжан, как он сам, тонкостям выплавки стали. Так он этапом, не то с немцами, не то с крепостными попал в Златоуст. Работал ли Аносов в это время в Златоусте, я не знаю. Мой прапрадед, бывший половец, тоже был пленен где-то на Кубани. Долго они были вместе с Булатом. Когда им предложили работу в кузнице на Урале, Булат сразу согласился, сказав, что Урал - историческая родина его дедов. В кузнице, затем на заводе он был главным выплавщиком и кователем. Секрет выплавки и ковки держал в себе. Когда из металла, выплавленного Булатом, ковали саблю, как раз приехал губернский начальник и представитель Сената. По указанию начальника своего, немца, Булат дал в руки губернскому начальнику только что сделанную им саблю. Нажимая на его плоскую сторону с конца клинка, сделал полукруг к ручке и резко отпустил. Господин не смог удержать саблю, и она, выпрямившись, кружась, полетела и глубоко вонзилась в дощатую дверь. Сенат не Булата, а начальника наградил большой денежной премией. С тех пор твердая упругая сталь и сделанная из нее сабля стала называться "булатной". И российская булатная сталь позже стала Аносовской. Аносову памятник поставили перед заводом, а название "булатная сталь" осталось. Жаль, только самого Булата забыли.

Секрет булатной стали Булат унес с собой, не сказав даже самому Аносову. После долгих лет по структуре и составу настоящего булата ученые сделали булатную сталь. Но эта сталь - настоящая ли сталь?

Будет ли разгадан секрет настоящей булатной стали? Хотя сейчас умеем для военных заказов делать нечто подобное. Более 100 лет либо были строго засекречены, либо были утеряны секретные приемы ковки булатной стали. Это факт истории. Однако позже, когда металлургической науке стало известно о зерновой структуре металла, мыслителям металлургии удалось из выплавленной стали ковать булатообразную сталь. Но это - не настоящая булатная сталь", - тип туҡтап ҡалды боронғо ҡыпсаҡ нәҫелле Иван Михайлович.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**(Дауамы бар).**

*БЫЛ - ГОНАҺ!*



# ИЛАҺТАРҒА ТАБЫНМА

**Аллаһы Тәғәлә беҙҙе был донъяға Кеше итеп яралтҡан һәм беҙгә иң бөйөк ниғмәт - аң биргән. Беҙ ошо аңыбыҙ ярҙамында башҡа мәхлүктәрҙән өҫтөн торабыҙ, тормош мәғәнәһен, ғүмер ҡәҙерен, йәшәүебеҙҙең асылын төшөнөргә, хәҡиҡәтте табырға, ғүмеребеҙҙе файҙалы уҙғарырға тырышабыҙ. Гонаһтарҙан нисек кенә пакланырға тырышмайыҡ, һәр кемебеҙҙең, бәләкәйме ул, ҙурмы, гонаһы бар. Кәмселектәрҙән беребеҙ ҙә азат түгел... Бәйғәмбәребеҙ (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм): "Әгәр ҙә биш ваҡыт намаҙ араһында, йома намаҙҙары араһында ҙур гонаһтар ҡылынмаһа, намаҙҙар бәләкәй гонаһтарҙың ғәфү ителеүенә сәбәпсе буласаҡ!" - тигән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күптәр ҙур гонаһтарҙы, шулай уҡ уларҙы башҡарған өсөн ҡаты язаланыуҙар киләсәген белмәй, белһә лә, уларҙан ҡасырға тырышмай. Ҡөрьәндә былай тиелә: "Әгәр ҙә тыйылған оло гонаһтарҙан ҡасһағыҙ, һеҙҙең бәләкәй гонаһтарығыҙҙы кисерербеҙ һәм һеҙҙе шәрәфле бер ергә урынлаштырырбыҙ". Шулай итеп, "Был-гонаһ!" тигән яңы рубрикабыҙҙа оло гонаһтар тураһында һөйләйәсәкбеҙ.**

## Беренсеһе: "Аллаһҡа тиңдәш ҡуйыу"

Ширҡ - ул Аллаһҡа тиңдәшлек ҡуйыу һәм ул тиңдәшкә Аллаһы Тәғәләгә табынған кеүек табыныу, йәғни уларҙы илаһилаштырыу. Ҡояш, ай, шәйех, кеше, ендәр, йондоҙ, түрә һәм башҡалар илаһилаштырылған булыуы мөмкин. Ҡөрьән Кәримдә ширҡ тураһында шулай тиелә: "Аллаһҡа тиңдәш эҙләүсе иң ҙур гонаһҡа батып, ялған уйлап сығарған кеше булыр" (Ән-Ниса,48).

"Белеп тороғоҙ, кем дә кем Аллаһҡа тиңде эҙләй, мотлаҡ Аллаһ уға йәннәтте харам ҡылыр, ундай кешенең керәсәк урыны утлы тамуҡ" (Әл-Мәидә, 72).

"Аллаһтан башҡа уйҙырма илаһҡа табынма. Күп илаһҡа табыныуҙан да ҙур гонаһ юҡ! (Лоҡман, 13).

Башҡа илаһтарға табынып, мөшрик булып үлеүсенең тәҡдире - тамуҡ. Ә был донъянан иманлы йөрәк менән китеүселәр, үҙҙәренең бөтә гонаһтары өсөн язаланыуға ҡарамаҫтан, һуңғы һөҙөмтәлә ожмахҡа эләгә.

Бәйғәмбәребеҙҙең шундай һүҙҙәрен еткерәләр: "Бөтә гонаһтарҙан да бөйөк гонаһ тураһында белгегеҙ киләме? Ул - ширҡ!"

Икенсе бер хәҙисендә Бәйғәмбәр (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) былай ти: "Әгәр ҙә мосолман үҙенең динен алмаштырһа, уны үлтерегеҙ".

Түбәндәге хәҙисте Әбү Бәкер еткерә: "Бер ваҡыт Бәйғәмбәр (салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) сәхәбәләренә әйткән: "Һеҙгә ҡайһы гонаһтарҙың иң ауыры икәнен әйтергәме?" Шунан: "Был күп илаһтарға табыныу һәм ата-әсәне рәнйетеү", - тигән, һуңынан ултырған урынынан ҡалҡына биреп, тағы ла бер нисә тапҡыр өҫтәгән: "Һәм ялғанлауҙан һаҡ булығыҙ!"

***✓ Донъялар арыулана, тормош көтөүе еңеләйә биргәс, ил-йортҡа ғаилә тыныслығын емереүсе хәтәр яман афәт килде - ун ике башлы аждаһаға тиң хәмер әҙәм балаларының зиһенен ағыулай башланы.***

# Улым, һиңә әйтәм, йәки Ир-азаматлыҡ

## Ир затының өҫтөнлөгө тәбиғәттән бирелгәне

Тәбиғәт ғәли йәнәптәренең тотошлайы менән үтә ҡатмарлы бер организм икәнен бөгөн бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ. Уның бөтә күренештәре лә билдәле бер тәртипкә һалынған. Йәғни тәбиғәттең үҙенең яҙылмаған ҡануниәте бар. Ул кешеләр аҡылы менән төҙөлөп, ил хакимы алышынған һайын үҙгәртелеп тороусы конституцияларға һәм ошо нигеҙҙә сығарылған закондарға буйһонмай. Әлбиттә, тәбиғәттә лә беҙ катаклизм тип йөрөткән киҫкен үҙгәрештәр, һелкенеү-тулғаныуҙар булып ала. Һуңғы осорҙа бындай хәл-әхүәлдәрҙең йышайыуына егерменсе быуаттағы фәнни-техник үҫештең йоғонтоһо булыуы ла ихтимал (хәҙергесә әйткәндә, кеше факторы була инде).

Тәбиғәттә бөтә нәмәнең дә үҙ урыны, үҙ тәғәйенләнеше бар. Кеше уның аң-аҡылға эйә булыусы иң юғары бер өлөшө икәнен белә тороп, ғәҙәттә, тәбиғәтте йәнһеҙ тип күҙ алдына килтерергә күнеккәнбеҙ. Бында беҙҙең быуындың атеизм рухында тәрбиәләнеүе лә сағылмай ҡалмағандыр. Шулай ҙа Ислам һәм Христиан диндәрендәге уртаҡ бер нәмәгә - Ерҙең яратылыуы һәм унда тормош барлыҡҡа килеүе тураһындағы миф-риүәйәткәме, әллә тәғлимәт рәүешендә йәшәп килгән инаныуғамы иғтибар итһәк, ғәжәп бер күренешкә юлығабыҙ: Аллаһы Тәғәләбеҙ Ерҙәге кешелек тормошона нигеҙ һалған саҡта иң тәүҙә атабыҙ Әҙәмде, йәғни Ир кешене яралтҡан. Тимәк, ир затына баштан уҡ өҫтөнлөк бирелгән. Шунан сығып уй йөрөткәндә, был ваҡиғаға бик тәрән мәғәнә һалынғанлығы тойола.

Аллаһы тарафынан раҫланған был өҫтөнлөк, оҙон-оҙаҡ дәүерҙәр һуҙымында ныҡлы һынау үтеп, бөтә донъяла танылыу таба. Быға ышаныу өсөн тәү ҡарамаҡҡа әллә ниндәй тәрәнлеге булмағандай тойолған ҡайһы бер миҫалдарға күҙ һалып үтәйек.

Өйләнеү, бергәләп донъя көтөү тураһында башлап егет кеше - буласаҡ ир - һүҙ ҡуҙғата. Бындай тәҡдим булмаған тәҡдирҙә гүзәл затҡа ҡарт ҡыҙ булып ултырып ҡалыу хәүефе янай. Әүәлгерәк осорҙа ҡунаҡҡа барғанда алдан ир кеше атлай, ә ҡатыны уға эйәреп бара ине. (Әлбиттә, һәр нәмәгә ваҡыт үҙ төҙәтмәһен индерә: хәҙер ҡултыҡлашып атлайҙар). "Кем улы-ҡыҙы булаһың?" - тигән һорауға яуап биреүсе атаһының исемен әйтә. Урыҫтарҙы алһаҡ, Иван Степанович, бер ҙә генә Иван Надеждович түгел. Башҡорттарҙың шәжәрәләрендә лә ырыу ағаһының тармаҡтарын ир балалар тәшкил иткән. Дөрөҫ, һуңғы йылдарҙа ҡыҙ-ҡатындарҙы ла (ҡатын-ҡыҙ түгел, ҡыҙ-ҡатын, сөнки ҡатын ҡыҙға әйләнмәй, ә - киреһенсә) шәжәрәгә теркәү башланды, һәм был ғәҙелерәк тә. Фамилиялар индерелгәндә башҡорттарҙа шулай уҡ ир затына бирелгән өҫтөнлөк һаҡланған. "Кәримов" бар, ләкин "Кәримәев" юҡ. "Атай йорто", "атай нигеҙе" (шул уҡ йортта, нигеҙҙә әсәй ҙә йәшәгән һәм йәшәй бит), беҙҙең заманда телмәргә инеп нығынған "ата-әсәләр йыйылышы" төшөнсәләрен һәм бүтәнсә быға оҡшаш миҫалдарҙы етерлек килтерергә була. Әйтелгәндәрҙән күреүебеҙсә, һәр осраҡта ла атай кеше алдан йөрөй. Шулай итеп, ирҙәргә тәбиғәттең үҙе тарафынан ниндәйҙер дәрәжәлә өҫтөнлөк бирелгәненә ышанмау мөмкин түгеллегенә тағы бер төшөнәһең.

## Атайһыҙ ғаиләнең күрекһеҙ булғаны

Беҙҙең бөгөнгө көнкүрештә хәлдәр нисек, ғаиләлә атай кешенең урыны ниндәйерәк һуң? Был һорауға өҙә һуғып, аныҡ ҡына яуап биреп буламы? Мин иғтибарығыҙҙы башҡорт ғаиләһендә атай кешегә ҡарата булған мөнәсәбәт мәсьәләләренә йүнәлтмәксе булам. Үҙ күҙәтеүҙәремдең һөҙөмтәһе әллә ни ҡәнәғәтләнерлек түгел, тигән һығымтаға килеп ҡуям. Бөгөн башҡорт ғаиләләренең атай культы юҡҡа сығарылған, атай "тәхете" ҡаҡ бүкәнгә алмаштырылған. Бының сәбәптәре лә етерлек.

1941-1945 йылдарҙағы һуғыш ғәрәсәте арҡаһында һәр икенсе тигәндәй ғаилә ирһеҙ-атайһыҙ ҡалды. Донъя ауырлығы ҡыҙ-ҡатын иңенә төштө. Өҫтәүенә, фронттан ҡайтҡан ҡайһы бер ир-атайҙар үҙҙәрен дүрт күҙ менән көтөп торған ҡатындарын, балаларын ташлап, икенселәр ҡуйынын йылытты. Төп таяныстан мәхрүм ҡалған бындай ғаиләләрҙә ир-атай культы урынын әсәй, йәғни ҡатын культы алды. Тағы бер нәмә тураһында хәтергә төшөрөп китергә кәрәкле һанайым: тәбиғәт һәр тере зат алдында үҙ талабын ҡуя, уға буйһонмау мөмкин түгел. Ирҙәре яуҙан ҡайтмаған, йәки бөтөнләй иргә бара алмай ҡалған ҡыҙ-ҡатын сараһыҙҙың көнөнән "уйнаштан тыуған" балалар табырға мәжбүр булды. (Коммунистар законһыҙ тип иғлан иткән күп ҡатынлылыҡ булғанда, ирһеҙ башҡорт ҡатындары бындай хәлгә төшмәҫ тә ине. - **Ред.** иҫк.) Ошо күренештең бер ниндәй яҙыҡлығы, ғәйебе, гонаһы юҡ. Бала табыу - ҡыҙ-ҡатынға тәбиғәт ҡуйған талап һәм бурыс.

Атайһыҙ, әсәй ҡарамағында ғына үҫкән балаларҙы алдағы көндәрендә етди һынауҙар көтә ине. Быларға өҫтәп, атай-әсәй йылыһынан тулыһынса мәхрүм булып, балалар йорттарында тәрбиәләнгәндәрҙе лә ҡушһаҡ, хәл тағы ла ҡатмарлаша төшә: үҫеп етеп, үҙҙәре тормош ҡора башлағас, йәш ҡатындар "ир тәрбиәһе" тигәнде, ә йәш атайҙар балаларға күрһәтелә торған "атай үрнәге" һәм "атай талабы" тигән төшөнсәне күҙ алдына ла килтерә алманы. Үҙең күрмәгән-белмәгәнде, татымағанды икенселәргә өйрәтеү йәки шуны башҡаларҙан талап итеү үтә лә ҡыйын мәсьәлә. Халыҡ әйтемендәгесә, ояһында саҡта бындай бурыстар һәм талаптар менән таныш булмағас, осҡанда ауырға тура килеүе аңлашылып тора. Был ир менән ҡатын, атай менән бала мөнәсәбәттәренә ниндәйҙер кимәлдә кире йоғонто яһамай ҡалманы, әлбиттә.



***Беҙҙең бөгөнгө көнкүрештә хәлдәр нисек, ғаиләлә атай кешенең урыны ниндәйерәк һуң? Был һорауға өҙә һуғып, аныҡ ҡына яуап биреп буламы? Мин иғтибарығыҙҙы башҡорт ғаиләһендә атай кешегә ҡарата булған мөнәсәбәт мәсьәләләренә йүнәлтмәксе булам. Үҙ күҙәтеүҙәремдең һөҙөмтәһе әллә ни ҡәнәғәтләнерлек түгел, тигән һығымтаға килеп ҡуям. Бөгөн башҡорт ғаиләләренең атай культы юҡҡа сығарылған, атай "тәхете" ҡаҡ бүкәнгә алмаштырылған. Бының сәбәптәре лә етерлек.***

## Хәмер тигән аждаһаның ғаиләләрҙе емергәне

Донъялар арыулана, тормош көтөүе еңеләйә биргәс, ил-йортҡа ғаилә тыныслығын емереүсе хәтәр яман афәт килде - ун ике башлы аждаһаға тиң хәмер әҙәм балаларының зиһенен ағыулай башланы. Йәшерен-батырыны юҡ, быға дәүләт башында торған етәкселәр үҙҙәре фатиха бирҙе, сөнки хакимдар халыҡ хәстәрен, халыҡ мәнфәғәтен ситкә ҡуйып, ниндәй ысул менән булһа ла ҡаҙнаны тулыландырыу менән мәшғүл ине. Был хәл бөгөн дә дауам итә.

"Аждаһа" тәүҙә өй тотҡаһы, таянысы булған ир кешене - атайҙы үҙ һаҙлығына һөйрәне. Ғаиләлә яйлап ҡына атай абруйы түбән тәгәрәне. Гүзәл заттарҙан һаналған әсәләрҙең дә ҡайһы берҙәре күңел тойғоларын хәмер менән йыуа башлағас, ғаилә усаҡтары һүнеп, ата-әсәһе бар көйөнә етем ҡалған балалар барлыҡҡа килде. Ғаилә йылыһынан мәхрүм ителгән ошо етемдәрҙең, үҙ ғаиләһен ҡорғас, балаларына ниндәй тәрбиә бирә алыуын күҙаллау ҡыйын. Араҡы шешәһе ҡосаҡлаған ата-әсәнең туҡтауһыҙ ыҙғыш күренештәре уларҙың күңел төпкөлөндә уңалмаҫ яра булып бик оҙаҡҡа ҡаласаҡ.

## Ҡатын-ҡәйнәнең ирҙе ирлегенән яҙҙырғаны

Уҙған быуаттың икенсе яртыһынан алып килен менән кейәүҙең ғаилә статусы үҙгәреш кисерҙе. Әгәр элегерәк ҡыҙҙар ирҙәренә кәләш, ҡайны-ҡәйнәләренә килен булып, улар "ҡурайына бейеһә", йәғни ошо ғаилә ҡанундары буйынса донъя көтһә, хәҙер иһә күп осраҡта егет кеше кәләш алып, ҡайны-ҡәйнә донъяһында "малайлыҡта" йөрөй. Элеккенән айырмалы рәүештә, ошондай ир бала үҫтергән ата-әсә, бигерәген дә әсәйҙәр үҙҙәрен бәхетһеҙ һанай. Уларҙың: "Ана, малайҙарҙы ипләп-бәпләп үҫтерҙек тә, кешегә биреп ҡуйҙыҡ. Килеп хәлде лә белгәндәре юҡ, килендәр ебәрмәй", - тип зарланғандарына шаһит булырға тура килгеләй. Мин быны ҡатын кешенең әсәһе "ярҙамында" ире менән икеһе араһында үҙе барлыҡҡа килтергән яһалма кәртә сифатында күрәм, сөнки ҡыҙ-ҡатындар мөхитендә мин-минлекте өҫтөн ҡуйыу көсәйә бара.

Ҡәһәрле һуғыш арҡаһында кесе йәштән атайһыҙ үҫкән бер ҡорҙашым ошо уҡ сәбәптән әсәй ҡарамағында ғына тәрбиә алған дүрт ҡыҙҙың кинйәһенә өйләнеп, ҡәйнәһе менән бер ғаиләлә йәшәне. Йәштәр ике улға ғүмер бирҙе. Малайҙар үҫә төшкәс, атай кеше эшкә киткәнендә уларға хужалыҡта еңел-елпе генә эштәр ҡушҡылай башланы. Ләкин... атай ҡайтыуға ҡыл да ҡыбырлатылмай икән. "Ни эшләп мин ҡушҡанды эшләмәнегеҙ?" - тигәс, балалары: "Атайығыҙ ҡайтҡас, үҙе эшләр, таш тумырып йөрөмәй әле, тип, өләсәйебеҙ рөхсәт итмәне", - тип яуаплай. Бындай "тәрбиә" оҙаҡ йылдар дауам итте. Ҡорҙашым ир кеше булараҡ, ҡатынына шелтәлерәк һүҙ әйтһә, ҡыҙын яҡлашып - әсә-ҡәйнәһе, ҡәйнәгә һүҙ әйтһә - ҡатыны ырғып сығыр ине. Етмәһә, балалар алдында икәүләшеп атай кешене төрләсә кәмһетер, түбәнһетер булдылар. Ҡәйнә кеше ингәнсыҡҡан алдында кейәүенең "яманатын" сығарыуға ла күп көс һалды. Кейәүҙәре өйҙә юҡ саҡта башҡа ҡыҙҙарына ла ирҙе нисек "бейетеү" тураһында күрһәтмәләр бирер ине. Әммә ирҙәрҙе "тапап" йөрөүгә ҡоролған был алым кире һөҙөмтәгә генә сәбәпсе булды. Атайының берҙән-бер вариҫы булған ҡорҙашым серләшеп йөрөгән саҡтарҙа, кәм тигәндә биш бала үҫтерәм, тип хыялланһа, ысынбарлыҡта икәү менән сикләнеп ҡалды. Олораҡ кейәүҙәрҙең береһе ғаиләһен ташлап китергә мәжбүр булды, икенсеһе хәмер диңгеҙенә батып юғалды. Дүрт ғаиләнең икеһе ирһеҙ-атайһыҙ ҡалды. Ә ҡәйнә "йүнһеҙ" кейәүҙәренә ғәйеп тағыуҙан, ҡарғыш яуҙырыуҙан ләззәт тапты.

Күп йылдарҙан һуң бер танышым менән осрашып, хәл-әхүәл һорашҡанда уның һөйләгәндәренә иҫем китте, быны әле булһа башыма һыйҙыра алмайым.

- Әсәйем мәрхүм инде, - тип һөйләне танышым, - ярты йылдан күберәк түшәктә ятты. Ярауы өйҙә булды. Эштән ҡайтып, үҙем түккәнсе, биҙрәһе бүлмәһендә ултыра торғайны. Һуңғы көнөнә тиклем әсәйемде үҙем йыуындырҙым. Бына шулай минең хәлдәр.

- Ә ҡатының һуң?

- Ҡурҡам, ҡулымда үлеп ҡуйһа, ни эшләрмен, тигән һылтау менән бүлмәһенә яҡын да барманы. Ҡырҡын уҡытҡанда саҡырылған кешеләр алдында ҡәйнәһен нисек "ихлас тәрбиәләгәнен", өҫтөн-башын "таҙа тотҡанын", йәне телгән "ризыҡтан айырмағанын" ауыҙ тултырып һөйләргә һис тә тартынманы. Бушты һөйләгәнен кеше юҡта үҙенә генә әйтер инең, аҙна-ун көнгә һуҙылған ыҙғыш көтә һине...

Тормошобоҙҙа булған ошондай хәл-ваҡиғалар күңелдә ауыр тойғо уята. Шуға ла оло йәштәгеләрҙең: "Эй, Аллаһы Тәғәләм, бер үк кеше көнлө итмә, аҙ ауырыу, анһат үлем бир инде!" - тип ялбарыуҙарына аптырайһы түгел.

## Ирлектең ғаиләлә яралғаны

Ғаиләлә ир абруйын күтәреү тәү сиратта ирҙәрҙең-атайҙарҙың үҙҙәренә бәйле. Бер үк ваҡытта ҡатындарға-әсәйҙәргә тиң хоҡуҡлылыҡ һәм тигеҙлек мәсьәләләрендә тәбиғәт тарафынан билдәләнгән урындарын, ролдәрен белеү ҙә мотлаҡ. Ни генә тимә, бала тәү башта әсә ҡарамағында, әсәй йоғонтоһонда була. Тимәк, балаға тәүге тормош һабаҡтарын да

**✓ Класс етәксеһе булған мөғәллимәләр ир уҡытыусыларҙың аҙ булыуы арҡаһында ҡуйылған маҡсатҡа өлгәшеүе ауыр булыуын инҡар итмәй. Шуға ла, ир-атты яңынан мәктәпкә йәлеп итеү фарыз йәмғиәтебеҙгә.**

# КИЛЕНЕМ ДӘ ТЫҢЛАҺЫН,

## тураһында нәсихәт

- Ләкин, - тип һөйләне уҙаман, - беҙ, өс ир бала, ауылға ҡайтҡаныбыҙҙа атай алдында бер ваҡытта ла рюмка күтәргәнебеҙ юҡ. Атайыбыҙҙың шешә менән дуҫлашып йөрөгән осоро ла булды. Шулай булһа ла, үҙе беҙҙе хәмергә яҡын ебәрмәне. Бында әсәйебеҙҙең роле ҙур ине. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә әсә кеше: "Аталары эскәс, балалары ла эсә инде", - тигән мәлдә беҙҙең әсәйебеҙ атайыбыҙ менән әрләшеү түгел, киреһенсә, уға ҡарата беҙҙән дә яман һүҙ әйттермәне. "Арҡыры ҡарамағыҙ, ул һеҙҙең атайығыҙ. Ауыр эштән арып ҡайтҡас, аҙыраҡ төшөргән икән, донъя емерелмәгән. Иртән тора ла, тағы эшкә китә ул", - ти торғайны. Ышанаһыңмы, юҡмы, биш-алты йылдан атайыбыҙ шешә менән дуҫлыҡты ҡырҡа ғына өҙҙө лә ҡуйҙы. Әсәйебеҙҙең яныял күтәрмәй, һәр саҡ тыныс юл менән эш итеүе ошондай ыңғай һөҙөмтә бирҙе, күрәһең. Әле лә берәй мәсьәлә буйынса кәңәш һораһаҡ, әсәйебеҙ: "Ана, атайығыҙ ни тип хәл итә, шулай булыр", - тип атайҙы үҙенән алда ҡуя. Бер яҡтан, был ғаиләлә ҡабул ителгән ҡағиҙәләр оло ихтирамға лайыҡ булып, күңелде күтәрһә, икенсе яҡтан, әлеге заманда бындай хәлдә йыш осратып булмауы үкенес тыуҙыра.

Һүҙ ыңғайында мәктәп тамамларға йөрөгән егет менән булған бер әңгәмә хәтергә килде.

- Атайым эскеләп ебәрә. Бының өсөн әсәйем уның менән әрепләшеп тә ала. Шулай ҙа мин өйҙә атайымды беренсе урынға ҡуям, тормошта унан үрнәк алырға тейешмен тип иҫәпләйем.

ул бирә. Күренеүенсә, бала күңеленә, бала аңына күп нәмә тана һөтөнә ҡарағанда инә һөтө менән инергә тейеш. Бында яңылышыу ярамай. Ҡамырҙы нисек әүәләйһең, баҫаһың, ҡаласың да шуға ҡарап бешә. Был тәрбиә эшендә атай кешенең ситтәрәк тороуы мөмкин, тигән һүҙ түгел. Ғаилә берәү, балалар уртаҡ, шулай булғас, тәрбиә эше лә уртаҡ.

Был яҙманың авторына ярайһы уҡ юғары вазифаларҙа эшләп йөрөгән, матур ғаилә ҡорған, балалар үҫтергән уҙаман менән фекерләшеү форсаты тейгәйне. Социаль баҫҡыста дәрәжәһе юғары, абруйы ҙур, тиң-тоштары менән ҡайһы ваҡыт "йомшарып алыу" ғәҙәте лә бар уның.

- Нисек, эскелек буйынсамы?

- Юҡ, һеҙ мине дөрөҫ аңламанығыҙ. Тормошобоҙҙа ҡатмарлы ситуациялар килеп тыуһа, әсәйем юғалып ҡала, аптырауға төшә, нишләргә белмәй. Атайым уны тынысландыра: "Ғауғаланма, юлын барыбер табырбыҙ. Ғаилә өсөн һинән алда мин яуаплы, быныһын - былай, тегенеһен - тегеләй итәрбеҙ, фәлән кеше менән кәңәшләшербеҙ", - ти. Һәм мәсьәлә атайым әйткәнсә хәл ителә, сөнки ул уйлап эш итә. Мин дә алдағы тормошомда атайым һымаҡ һәр нәмәгә уйлап тотонасаҡмын, сөнки ир ғаилә башлығы, донъя тотҡаһы булырға тейеш...

Был һүҙҙәр башта мине ғәжәпләндерҙе. Йөрөй торғас, йәштәрҙе "елбәҙәклек"тә ғәйепләргә күнегеп китһәк тә, улар араһында тормошта үҙ урынын һәм баһаһын аңлаусылар барлығы күңелгә ҡыуаныс орлоғо һалды.

Яҙмыштарын бергә бәйләгән ир менән ҡатынға төшкән бурыс һәм яуаплылыҡ мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә лә сағылыш таба. Мәҫәлән, "Ирҙе ир иткән - ҡатын, ҡатынды хур иткән - сей утын". Ә инде "Ир - баш, ҡатын - муйын" тигәндең мәғәнәһен хәҙерге гүзәл заттар үҙ яғына ҡайырған. Йәнәһе, муйын ҡайһы яҡҡа борола, баш шунда ҡарай. Ҡыҙыҡ өсөн, һылыуҡайҙар, эксперимент үткәреп ҡарағыҙ: башығыҙҙы бер нөктәгә ҡаратып, ике ҡуллап ҡыҫығыҙ ҙа, муйынығыҙҙы бороғоҙ. Килеп сыҡмай бит. Хәҙер шуның киреһен эшләгеҙ. Был, әлбиттә, уйынсалау. Әммә мәғәнәһе бар. Йәшәйештә тәбиғәт һәр кемгә урын тәғәйенләгән икән, уны алмаштырыу бер яҡҡа ла файҙаға булмай. Өйҙөң нигеҙен һүтеп, ҡыйығын һаҡлап булмай ҙа инде.

Бөгөн урта йәштәгеләр, олоғайғандар мөхитендә ир-ҡатын мөнәсәбәттәренә ҡағылышлы һүҙҙәр һөйләү, өгөт-нәсихәт бирергә тырышыу әллә ни уңышҡа килтермәйәсәк, сөнки уларҙың донъяға, ғаилә тормошона ҡарашы, үлсәме формалашҡан һәм ныҡынған. Кемдәрҙер юлдың уңҡынға тартылыуын аңлап, үҙ холоҡ-фиғеленә, булмышына тәнҡит күҙлеге аша ҡарап, ҡайһы бер мөнәсәбәттәрҙе тәбиғи хәленә ҡайтарыу маҡсатынан сығып эш итһә, хуплауға лайыҡ буласаҡ.

### Мәктәбебеҙҙең ир-атһыҙ ыҙаланғаны

Үҫмерҙәргә киләсәктә үҙҙәре ғаилә ҡороп, ата-әсә булып, балалар үҫтерәсәген, уларға ниндәй бурыс һәм яуаплылыҡ йөкмәтелеүен аңлата барыу иң әүәл атай-әсәйҙең өҫтөнә төшһә, был изге эштә мәктәптең дә өлөшө ҙур булырға тейеш. Мәктәптәрҙә ир һәм ҡыҙ-ҡатын уҡытыусыларҙың һан нисбәте бер сама булған саҡта балаларға тәрбиә биреүҙең ыңғай яҡтары күберәк булыуы һиҙемләнә. Хәҙерге шарттарҙа (оло быуын вәкилдәре эштән дә, тормоштан да китеп бөткәс) башланғыс кластарҙа ир уҡытыусылар юҡ. Тулы булмаған һәм тулы урта мәктәптәрҙән уларҙың коммерция-бизнес структураһына китеүе осраҡтары йышайҙы. Ә ҡыҙ-ҡатын уҡытыусылар уҡыусыларына үҙ предметынан ниндәй генә төплө белем бирмәһен, тәрбиә мәсьәләһенә бер яҡлыраҡ ҡарай, сөнки (хөрмәтле мөғәлимәләр, был бәндәнең фекере үтә субъектив тиһәгеҙ, автор һеҙҙән ғәфү үтенә) ҡыҙ-ҡатындар күпселектә тәбиғәте менән бер ни ҡәҙәре ваҡсылыраҡ халыҡ. Ата-әсәләр йыйылыштарында уларҙың тәрбиәгә ҡағылышлы мәсьәләләрҙә мөһимерәгенә ҡарағанда, әллә ни әһәмиәте булмаған ваҡ-төйәккә ныҡыраҡ диҡҡәт биреүе раҫ. Шул уҡ ваҡытта класс етәксеһе булған мөғәллимәләр үҙҙәре лә ир уҡытыусыларҙың аҙ булыуы сәбәбенән тәрбиәүи процеста ҡуйылған маҡсаттарға өлгәшеүе ауыр булыуын инҡар итмәй. Шулай булғас, киләсәктә ир-атты яңынан мәктәп мөхитенә йәлеп итә алыу юлдарын табыу фарыз йәмғиәтебеҙгә.

### Тәрбиә идеологияһының ил яҙмышын хәл иткәне

Тәрбиә эшенең билдәле бер идеологияға нигеҙләнмәүе дөрөҫ түгелдер, тим. Бәләкәй генә тамсы ла тама-тама ташты тишә. Океан арты "былбылдары"ның яйлап-яйлап һуғыштан һуң тыуған быуындар күңеленә юл һалыуына үҙебеҙ шаһит булдыҡ бит. Ошо быуын вәкилдәре ир етте, власҡа үрелде. Төҙөү урынына булғанын емереүҙе беренсе планға ҡуйҙы. Илебеҙҙең ҡан менән яҙылған, шул уҡ ваҡытта ватансылыҡ менән һуғарылған тарихи үткәнен дегет менән буяны. Үткән быуаттың 90-сы йылдары башында власҡа килгән төркөм илдә ысын демократия урынлаштырабыҙ, идеология беҙгә кәрәкмәй, тигән лозунг аҫтында балалар, йәштәр ойошмаларын тарҡатты. Һөҙөмтәлә илебеҙҙә власҡа буйһонмаған, йәмғиәттәге тәртип-талаптарҙы һанға һуҡмаған, аҡылды томалап, көс стихияһын алға һөргән "яңы урыҫтар" быуыны барлыҡҡа килде.

Идеологияның бер төрөн юҡҡа сығарыу һәм икенсеһенә өҫтөнлөк биреү донъяла күп тапҡырҙар һыналған алым. Донъя диндәрен алып ҡараһаҡ, уларҙың бөтәһе лә идеологияға ҡоролған. Һәр берененең алдына ҡуйған маҡсаты, кеше күңеленә йогонто яһай торған алымдары бар. Мәҫәлән, һәр кемгә мәсеткә йөрөү, намаҙға баҫыу, Ҡөрьән уҡыу мотлаҡ булмағанда ла, Исламдың ғаилә тәрбиәһенә ҡағылышлы талаптарына иғтибарлы булһаҡ, һис кенә лә зыян булмаҫ ине.

Һуғыш афәттәрен татып үҫеп, үҙҙәре ата-әсә булғандарҙың: "Беҙ күргән этлек балаларыбыҙға килмәһен инде", - тигән изге ниәттән балаларын төрлөсә әпәүләүе, үҙ ауыҙҙарынан өҙөп, үҙ өҫтәренән йолҡоп, "һаҡаллы бәпестәр"ен туҡтауһыҙ ҡурсалауы, шуға өҫтәп, балаларын да ишәйтмәүе йәмғиәтебеҙҙә ысын ир-егетлектең кәмей барыуына килтерҙе. Әҙергә-хәҙер тәрбиәләнеп, бар ваҡытын урамда ел һуғарып йөрөп, модалы күренеү өсөн өр-яңы ыштан-салбарҙарының осаһын-тубығын йыртҡыслап кейгән йәш быуын кастаһы барлыҡҡа килде.

Күңелен алдан кем эшкәртеп өлгөрә, бала шуның яғына ауыша. Бала күңеле ыуыҙ кеүек йомшаҡ, уны ҡайһылай теләһәң, шулай әүәләргә мөмкин. Көндәлек тормошта беҙ балаларыбыҙ күңеленә һәр саҡ үтеп инә алабыҙмы? Уларҙың уй-тойғоларын аңлайбыҙмы, уртаҡлашабыҙмы? Улдарыбыҙҙа башҡортҡа хас ир-азаматлыҡ, ҡыҙҙарыбыҙҙа инсафлылыҡ, әҙәплелек һәм тоғролоҡ тәрбиәләйбеҙме? Ошо һорауҙар беҙҙе уйландырырға тейеш. Милләтебеҙҙең киләсәге ошоға бәйле икәнен онотмайыҡ. Балаларыбыҙға үҙебеҙ ысын мәғәнәһендә һәйбәт өлгө булып, халҡыбыҙҙың быуаттар дауамында тупланған тәрбиәүи потенциалын ҡуллана алһаҡ, юғары әхлаҡлы, итәғәтле, илтифатлы, үҙенә төшәр бурысты һәм яуаплылыҡты аңлаған яңы быуын үҫеп сығыр һәм һәр кем үҙ урынын, тәғәйенләнешен белгән яңы ғаиләләр барлыҡҡа килер. Амин, шулай була күрһен.

**Мөнир ИШБУЛАТОВ.**

---

*АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ*

# НУР ТАМЫРЫ ҠОЯШТА,

## намыҫ тамыры оятта

◆ Әрһеҙ ағас, тип, муйылды һындырма - тамырынан ҡалҡыр; көсләмән, тип, кеше билен һындырма - ике ҡулың ҡаҡлығыр.

◆ Ирендән аша һикермә - аҡыллы ҡатын донъя йүгәнен иренә биреүсән.

◆ Ямандан йомош алма - биргәне менән битәрләр; яҡшынан хатаңды йәшермә - төҙәтер һәм дөрөҫ юлға баҫтырыр.

◆ Яҡшыға эйәрһәң, уңышҡа ирешерһең; яманға эйәрһәң, ҡазаға тарырһың.

◆ Ололар һүҙен күңеленә һал: уларҙа тәрән мәғәнә, бөйөк көс.

◆ Дуҫтан уңдым, тип булма ышаныусан - ул да ҡайсаҡ йыландай сағыусан.

◆ Эшем күп, кеше күп, тип өтәләнмә - өтөләрһең, өтөгөң менән башҡаларҙы ла төтәҫләрһең.

◆ Бер эштә лә ҡабаланма, сарғаланма - ҡабаланып ҡына һис берәү ҙә офоҡҡа ла етмәгән, салауат күперен дә сыҡмаған.

◆ Тормош шулай ҡоролған: дарьяларҙы аша сығып була, әммә яҙмыштарҙан аша атлап булмай.

◆ Ҡара уйҙар уйлама - ул ҡара дошман; изге уйҙар ғына уйла - изгелек килер уңдан.

◆ Кешене күрһәткән яҡшылығың менән битәрләмә - сикәләү менән бер булыр, үҙ күңеленә лә ҡара тамыр.

◆ Ҡулымда власть, тиеп, йоҙроғоң ҙураймаһын, харам мал менән кеҫәң тулмаһын, кәрәкмәгәнгә өйөң булмаһын бейек - һәр саҡ күңелең булыр бойоҡ.

◆ Затлы кейемем күп тип, ҡат-ҡат төрөнмә - тәнең тиҙ ҡартайыр, ғүмерең ҡыҫҡарыр, үлемең яҡынайыр.

◆ Ҡунаҡҡа матур кейенеп бар, тыйнаҡ бул, сөнки кейемгә ҡарап ҡаршылайҙар, ҡылығыңа ҡарап оҙаталар.

◆ Күңелең нур менән тулһын - өйөң бушлығы ла күренмәҫ.

◆ Бәндәгә шатлыҡта ла, ҡайғыла ла таяныс кәрәк, шуға күрә таяныс булғандай дуҫты уйлап, һынап һайлағыҙ.

◆ Файҙа күреү өсөн генә килгән ваҡытлы дуҫтан һаҡлан - ул мәкерле дошман.

◆ Донъяға үҙ тәҙрәңдән генә ҡарама, күршеләрең яғына ла күҙ һал.

◆ Ғәйбәт һөйләмә, кеше һүҙен йөрөтмә - "осоҡ" исемен тағырҙар.

◆ Файҙаһыҙға һүҙ һөйләмә, кеше артынан һүҙ сурытыуҙан һаҡлан.

◆ Ауырыуҙарҙың, йөрөй алмағандарҙың хәлен бел, ярҙам ит - үҙеңә лә ошондай көндәр килеүе бар.

◆ Ғорур ҡаяла үҫкән баһадир имән дә сереп ауа, ҡаяһы емерелә - кеше тормошо ла шуға тиң.

◆ Белгәнеңде кешегә өйрәт - сауап булыр, белмәгәнеңде һора - ғилемең артыр.

◆ Маһайма - маңлайың ярылыр; көнсөл дуҫың менән серләшмә - ғәйбәт таралыр.

◆ Халҡың йолаһын һанла, һаҡла, сөнки йола бөткән ерҙә әҙәп тә бөтә, иман да, ҡот та ҡаса.

◆ Яҡты көнгә шатлан - нур тамыры ҡояшта; намыҫлы бул - намыҫ тамыры оятта.

◆ Көнсөл булма - көнсөл күңелдә ҡорт бар, шуға ла уға донъя тар.

◆ Ерҙә үҙ ояһын ҡормаһа - кеше кеше түгел, сөнки барса гүзәл нәмәләр ерҙән башлана.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

✓ ***Юҡ, хәҙер юғалтыу юҡ! Нимә тип көлһәләр, мыҫҡыл итһәләр ҙә, арттарынан ҡалмаясаҡ. Троллейбус артынан йәйәү йүгерһә, йүгерер, кәрәк булһа, шыуышыр, ләкин юғалтмаясаҡ Гүзәлде!***

**Урал МОСТАФИН**

# ҠОЙОН ҠОЙРОҒО ОҘОН...

***(Повестың гәзит варианты)***



* * *

Әллә нисә көндәр үтте. Уҡыуҙар башланды. "Гүзәл, Гүзәл" тигән уй башын туҡып тик йөрөнө. Ҡайҙа икән ул? Нимә эшләй икән? Ҡалала йәшәйме, ҡунаҡҡа ғына килгәнме? Уҡыймы, эшләйме?.. Ошо һорауҙар менән үҙен ыҙалатҡан һайын, баҙнатһыҙлығына йәне көйҙө. Ул тиклем дә күңелен яулар тип кем уйлаһын. Ҡыҙыҡайҙы табып, әйтер һүҙҙәрен әйтмәйенсә тынысланмаҫ инде. Ә ниндәй һүҙҙәр әйтергә уйлағанын үҙе лә яҡшылап белмәй. Ысынлап та, нимә тип әйтер ине икән? Үҙе лә аптырап ҡалды. Атаң башы! Ауыҙыңа һыу уртлаған кешеләй иҫәнгерәп ултырғансы, шәп кеше булғас, ваҡытында әйтер кәрәк ине. Хәҙер алдына килеп баҫһа, нимә эшләр ине, ниндәй һүҙҙәр әйтер ине иң алда? Әллә тағы ла ауыҙын асып тороп ҡалыр инеме? Трамвайҙа барһа, ике күҙе тәҙрәгә төбәлде, урамда йөрөһә, күҙҙәре аҡшайып, тирә-яғына алан-йолан ҡаранырға ғәҙәтләнде. Юл аша сыҡҡанда машиналарҙы төкөп ауҙарырға йыйынған кешеләй күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй йөрөнө. Ҡасан, ҡайҙа барһа ла, таныш йөҙҙө эҙләне. Юҡ! Бәхетең булмай икән булмағас!

Көндәр үҙ яйына үтә торҙо. Артыҡ күҙгә күренерлек, күңелгә ятырлыҡ ваҡиғалар ҙа юҡ кеүек. Ҡәҙимге студент тормошо үҙенекен итте, уҡыу, иптәштәр менән аралашыу, төрлө башҡа саралар иғтибарҙы үҙенә йәлеп итеп, бәйләнсек үкенесле уйҙарҙан яйлап арындырҙы. Ноябрь айында, быға хәтлем ҡыланмағанын, профсоюз комитеты һәр төркөмгә театрға билеттар өләшеп биргән. Уныһы ла булһа, көлһәң-көлкө, опереттаға! Зал буш булмаһын тигәндәрме, әллә берәй шиҡәйәтле хәлме?

Билетта күрһәтелгән ваҡыт етеүгә, театр бинаһына инде. Ололар ғына түгел, йәштәрҙең дә байтаҡ булыуы күңеленә йылы бөрктө, бушҡа килмәнемме икән, тигән икеләнеүҙәре таралды. Был бинаға тәүгә инеүе булғас, бер ыңғай һәйбәтләп танышыу теләгенән залдарын әйләнеп ҡарап йөрөнө. Ҡупшы йыйыштырылған, ыҡсым йыһазландырылған, тыйнаҡ тантаналы мөхит күңеленә хуш килде, кәйефен күтәрҙе. Шик-шөбһә, икеләнеүҙәренән арындым тигәндә, алдындағы ике ҡыҙҙы күреп, торған ерендә ҡатты. Ҡыҙҙар бәләкәй генә ҡағыҙ биттәре менән йөҙҙәрен ярым ҡаплап, нимәгәлер шырҡылдашып көлөшәләр. Береһе - Гүзәл! Йөрәге дарһылдауын бөтә кеше ишетә кеүек. Күҙҙәре ҡыҙҙа, башҡа бер кемде лә күрмәй, бер кемде лә ишетмәй. Күпме шулай шаңҡып торғандыр, иҫенә килгәндә, аяҡтары сөгөн бағаналар кеүек, иҙәнгә йәбешкән, ҡулдары ҡарағай ботаҡтары кеүек тарбайған, бөтә кәүҙәһе килбәтһеҙ ҡиәфәттә ҡатып ҡалған ине. Ҡыбырларлыҡ, ҡымшанырлыҡ та әмәл, хәл, көс юҡ! Йәне терелеп, аңы эшләй башлау менән иң тәүҙә тәнен йәшен атҡандай ут яндырып үтте.

Егет, ни булһа ла булыр, тип, тәүәккәлләргә уйланы, бәлки, аяҡтарын иҙәндән айыра алыр? Бер аҙым, ике, өс... Ул үҙен был мәлдә һөжүмгә барған танк һымаҡ һиҙҙе. Юлындағыларҙың барыһын да иҙә тапап китеп бара кеүек. Ҡыҙҙар ҙа, өҫтәренә менеп килгән танктан һаҡланырға теләгән һымаҡ, ҡулдарындағы ҡағыҙҙарын өҫкәрәк күтәреп, биттәрен ҡапланы шикелле. Был ҡот осҡос күренеште ситтәге халыҡ аяныс менән күҙәтәлер инде, тип уйланы "танк" китеп барышлай. Нисек туҡтарға? Барып еттеме, юҡмы, бөтә көсөн йыйып туҡтаны. Һәләкәт булманы. Ҡолаҡтары ишетә, күҙҙәре күрә башланы, ниһәйәт. Театр бинаһы зыян күрмәгән, тирә-яғындағылар ҙа имен. Ҡыҙҙар ҙа илашып ҡасманы, йылмайышып торалар хатта. Ысын, ана, күҙҙәре йыҙылдашып йылмайып ҡарап торалар. Уны абайлаған Гүзәлдең йөҙө яҡтырып киткәндәй, үҙе уның яғына ынтыла биреп ҡуйғандай итте, әллә күҙенә генә шулай сайылдымы, ләкин егет әллә кемдең ят тауышы менән:

- Һаумыһығыҙ! - тип өндәште.

- Һеҙ ҙә театрға килдегеҙме?

- Юҡ, һыйыр һауырға, - тине эргәлә торған бер шәүлә, зәһәр йылмайып.

Егет был тиҫкәре яуаптан тағы юғалып ҡалды.

- Мин Батыргәрәй булам. Һеҙҙең исемегеҙ Гүзәл, мин поезда иптәш ҡыҙығыҙҙан ишеттем. Иҫләйһегеҙме, йәйгеһен беҙ бер вагонда килдек?

Ҡыҙыҡай, эйе, тигән кеүек, сәйер генә йылмайып баш ҡаҡты ла, өндәшмәне. Ә эргәһендәге шайтан радио һымаҡ тәтелдәп тора икән, яңы саҡ шәйләне.

- Ябай ғына, заманса әйткәндә, исемегеҙ Герой була инде, шулаймы? Батыргәрәй тип өләсәң ҡушҡандыр инде. Таныш булайыҡ, мин - Аля, әхирәтем Гуля. Тәүге тапҡыр театрға килеп, аҙашып ҡуймайым тип, таныштар эҙләйһегеҙме әллә? - Ҡалай әсе телле. Былай ҙа аңҡы-тиңке торған кешене мыҫҡыл итергә керешті.

- Эйе, был театрҙа тәүге тапҡыр. Быға тиклем оперетта ҡарағаным юҡ.

- Опереттаны ҡарау ғына түгел, тыңлай белергә лә кәрәк, Герой ағай.. - Был шайтанбикә менән әреплэшергә тағы һүҙҙәр табыр инеме, юҡмы, ләкин тамашаға саҡырған ҡыңғырау ҡотҡарҙы. Теге бисура:

- Урынығыҙҙы таба алмай, аҙашып, кеше аптыратып йөрөрһөгөҙ әле, - тип билетын һорап алды. - Ана, ошо ишектән инегеҙ, яҡыныраҡ булыр, яңғыҙ йөрөргә ҡурҡһағыҙ, минең итәккә йәбешегеҙ, беҙ ҙә шул тирәлә ултырабыҙ, - тимәһенме, яуыз. Үҙе әхирәтен ҡултыҡлап, фырт боролоп китеп тә барҙы. Ысынлап та, бер шайтан булып сыҡты был ҡыҙыҡай, ә барыбер эргәлә булыуы шәп булды, исмаһам, этеп-төртөп булһа ла һүҙ ҡуша бит. Ҡәҙимге һөйләшкән кеүек булдылар. Унһыҙ, өндәшеп тә яуап алмаһаң, бөтөнләй ҡаушап ҡалыр инең түгелме? Ниңә Гүзәл нәфис исемен боҙоп әйттерә икән?

Сараһыҙҙан, итәктәренә йәбешмәһә лә, ҡыҙҙарҙың арттарынан эйәрергә мәжбүр булды. Бер ишектән инер булғас, башҡа ҡайҙа барһын инде. Тамаша залына ингәс тә, ысынлап та, быҙау һымаҡ арттарынан эйәреп китеп тик бара. Ҡыҙҙар, рәттәре тәңгәленә етеп, урындарына ултырыша башлағас ҡына, туҡтап, үҙ урынын тәҫмәрләй алды. Билетында күрһәтелгән урыны ҡыҙҙарҙың артында ғына ике рәт аша булып сыҡты. Тамаша башланғандан алып сәхнәлә кемдәр нимә ҡыланғанын күрмәне, нимә йырлағандарын ишетмәне, уның нимә тураһында икәнен дә хәтерләмәй. Ул Гүзәлдең елкәһенә төбәлеп, сихырланған кеше кеүек, тик ултырҙы. Шунда ғына уға таныш, уның күңелен аңлаған серҙәше бар икәнен белә һәм унан ярҙам көтә, йәнәһе. Вагонда башҡалар йоҡлағанда уның менән шаярған, серләшкән сәс бөртөгөн эҙләне, әгәр тапһа, уға күңелен асыр, ары нимә эшләргә кәңәш, ярҙам һорар ине.

Театр тамамланыр, шунан нимә эшләргә? Оҙата барам! Ҡайҙа йәшәгәнен беләм! Теге шайтандан айырып алып ҡалып һөйләшәм! Осрашырға рөхсәт һорайым. Ошо ҡыйыу ҡарарға килеүенә үҙе аптырап ҡуйҙы. Кире уйлап ҡуймайым, типме, уларҙы бер туҡтауһыҙ эстән генә ҡабатланы. Тәнәфес тә булды. Ҡыҙҙар урынынан ҡуҙғалманы. Батыр ҙа тик ултырҙы. Ҡыҙҙарҙы күҙәтте. Улар ҡулдарындағы ҡағыҙҙарына әллә нимәләр яҙышып уҡыштылар. Тамаша барғанда ла шулайтҡандарын аңғарғайны, ә тәнәфестә ниңә ҡәҙимге һөйләшмәйҙәр икән, тип аптыраны. Әллә өйгә эш эшләйҙәрме, рефератмы, рецензия яҙалармы? Студент, уҡытыусы, әртистәрме? Кемдәр һуң был ҡыҙыҡайҙар? Театрҙан сыҡҡансы яҡын бара алманы. Бөтә ерҙә лә шулаймы икән: тамаша бөтөр-бөтмәҫтән залда мәхшәр, йүгереш, ғауға ҡуба. Үҙҙәрен, башҡаларҙы ихтирам итеп, ипле фекер алышып, шул арала сабыр ғына кейенешеп, әҙәпле генә таралышып булмаймы икән? Юҡ, баҙарҙағы һымаҡ: этеш-төртөш, шау-шыу, ығы-зығы! Яңы ғына бөйөк әҫәрҙәге тәрән тойғоларҙы сағылдырған тамаша күренештәренән илһамланып, күңелдәрен байытып сыҡҡан кешеләр тип һис уйламаҫһың. Вокзалда ла, баҙарҙа ла, театрҙа ла кеше бер төрлө икән...

Кейенергә сиратта торғанда, Батыр ҡыҙҙарҙы күҙ унынан юғалтманы. Арттарынан эйәреп, урамға сыҡты. Күҙҙәренә артыҡ салынмаҫҡа тырышһа ла, теге шайтан ботағы шәйләп ҡалып:

- Әйҙә, Герой ағай, йәбеш итәгемә, өйөңә оҙатып ҡуяйыҡ, йә аҙашырһың, - тип көлдө. Шаярыуына ҡушылып, уның ыңғайына шаярышып китһә була бит инде. Юҡ, һаман етди булып маташа. Аңлаһа ла, үҙ холҡо менән бер нәмә лә ҡыла алмай. Ахыры, өндәшмәй генә арттарынан эйәрҙе. Бар теләге - тәүҙә ҡайҙа йәшәгәндәрен асыҡлау, ә башҡаһы аҙаҡтан, тип уйланы ул, сөнки башҡаһына бөгөн әҙер түгел ине. Эҙләгәнен ҡапыл, көтмәгәндә тапҡас, албырғап, күңеле йомшарып ҡалды. Юҡ, хәҙер юғалтыу юҡ! Нимә тип көлһәләр, мыҫҡыл итһәләр ҙә, арттарынан ҡалмаясаҡ. Троллейбус артынан йәйәү йүгерһә, йүгерер, кәрәк булһа, шыуышыр, ләкин юғалтмаясаҡ Гүзәлде!

Ҡыҙҙарҙан алыҫтараҡ тороп, ул да ошонан ултырып китә, имеш, ниндәйен көткәнен белмәһә лә, троллейбус көтә башланы. 2-се һанлыһына ҡыҙҙар уҡталғайны, ул да йәһәт кенә менеп ултырҙы. Хәҙер ҡайҙа төшкәндәренән күҙ яҙлыҡтырмаһа булды. Улар төшкән туҡталышта төшөп, арттарынан эйәрҙе. Тегеләре әллә ысын абайламаны, әллә күрһәләр ҙә, күрмәмешкә һалышты, уға бөтөнләй иғтибар итмәнеләр, әйләнеп тә ҡараманылар. Теге енбикә, Гүзәл алдында этләшеп, тағы оятҡа ҡалдырыр, тип, үҙе лә эргәләренә барырға ҡыйманы. Ҡыҙҙар өс ҡатлы йортҡа инеп киттеләр. Ишек яҡтауы эргәһенә эленгән таҡталағы "Тегеү фабрикаһының 3-сө һанлы ятағы" тигән яҙыуҙы уҡығас, шунда йәшәгәндәре асыҡланды.

* * *

Бер ай тирәһе шаңҡып йөрөнө ул. Сираттағы килгәнендә лә өмөтө өҙөлөп, күңелһеҙ генә туҡталышҡа китеп бара ине, ҡаршыһына Гүзәлдең әхирәте килә ята! Онотмаған бит әле, шаталаҡ, ҡыйыу ҡыҙыҡай әллә ҡайҙан ауыҙын йырып, сәләмләп килә:

- Ә-ә-ә, беҙҙең таныш Герой ағай бында нимә эшләп аҙашып йөрөй икән?

- Һаумыһығыҙ, һылыу! Мин бер ай буйы инде һеҙҙе осратмаҫмынмы тип йөрөйөм... - Бәлки, аңлар, аңламаһа йәлләр типме, зарын һөйләй башланы. Ҡыҙыҡай әҙерәк тыңлап торҙо ла:

- Минең менән танышҡың киләме, әллә икенсе берәү кәрәкме? - тип һүҙҙе ҡыҫҡа тотто. - Һин асыҡ ҡына итеп әйт. Атыу теге ваҡыт та үҙең минең менән һөйләштең, ә күҙҙәрең Гүзәлдә ине. Мин кәрәкһәм, киттек, ҡайҙа саҡыраһың? Ә Гүзәл кәрәкһә, бел, ул барыбер сыҡмаясаҡ, бушҡа ыҙалап йөрөмә!

- Ул нимә уйлағанын ҡайҙан беләһегеҙ? Бәлки, сығыр, саҡырығыҙ, зинһар!

- Юҡ, саҡырып та тормайым, һоранма ла, бушҡа ыҙалайһың, тип бер әйттем бит инде, етәр, - тип тиҫкәреләнде ҡыҙ. - Беҙ һин килгәнде тәҙрәнән күргәнебеҙ бар, сығыр булһа, күптән сығыр ине, ныҡышма, был яҡтарға юлды онот, - тип, ниңәлер асыуланған һымаҡ ҡырҡа әйтте лә, ятағы яғына ыңғайланы.

Бер нисә көн үткәс, тағы килде. Файҙаһыҙ. Был тирәгә өйрәнеп тә бөттө, унда йәшәгәндәр ҙә үҙен танып, һаулыҡ һораша. Бер килгәнендә, тәүәккәлләп, ятаҡтан сыҡҡан олораҡ апайға өндәште:

- Һеҙ Гүзәл исемле ҡыҙҙы саҡырмаҫһығыҙмы икән? Мин уға килгәйнем...

Апай иғтибар менән тыңланы ла:

- Ҡайһы Гүзәл, фамилияһы кем? - тип һораны.

- Белмәйем шул...

- Беҙҙең ҡыҙҙар бөтәһе лә гүзәл дә, һылыуҙар. Кемдең сменаһында, кемдең бригадаһында эшләгәнен беләһеңдер, бәлки?

- Уныһын да белмәйем. Миңә кәрәк Гүзәлдең Аля исемле әхирәте бар.

- Хәлең бигерәк ҡатмарлы икән, егетем! Хәҙер ҡыҙҙарҙың һәр икенсеһе Аля ла Гуля, уларҙы шайтан айырһынмы, ысын исемдәрен үҙҙәре лә онотоп бөткәндәрҙер инде, - тип, үҙалдына һөйләнә-һөйләнә ары китте.

Бер тәүәккәлләгәндә тип, тағы ике-өс кешене туҡтатып һорашып ҡараны. Бөтәһе лә йә фамилияһын, йә бригадаһын һорашты. Тағы уңманы юлы. Һуңғы килгәнендә ятаҡ эргәһенән тегеләй-былай икеөс ҡат үтте лә, төңөлөп кенә ҡайтыу яғына юллanғайны, ятаҡ ихатаһынан башына пәлтәһенең көләпәрәһен кейә-кейә, йүгерә-атлай Гүзәлдең әхирәте төшөп килгәнде күреп, туҡтаны.

- Ниңә кеше бер әйткәнде аңламай икән? Гүзәл сыҡмай барыбер, тип әйттем бит. Ниңә уны ыҙалатып, кеше көлдөрөп йөрөйһөң һаман?

- Кемде ыҙалатам, кем көлә?

- Гүзәл тәҙрәнән күрә лә, һинең өсөн ҡайғыра, ыҙалай. Ҡыҙҙар күрә лә, ана, кавалерың килгән, тип, Гүзәлгә төрттөрөп көлә..

- Күргәс, ниңә сыҡмай һуң? Уны эҙләгәнемде белә бит. Һеҙгә лә әйттем!

- Ярай, белгең килһә, бел. Былай ғына аңламаҫһың инде. Гүзәл һөйләшә алмай. Аңланыңмы?

- Нисек инде һөйләшә алмай? Минең менән һөйләшкеһе килмәйме?

- Уй, Аллам! Бөтә тарихын һөйләйемме инде һин аңраға хәҙер? Һиңә нимәгә кәрәк ул? Һүҙ, ваҡыт әрәм итеп һөйләүемдән ни фәтүә, тыңлап бөтөр-бөтмәҫ, йәһәтләп тайыу яғын ҡарай башлаясаҡһың. Тимәк, тырышыуҙарың бушҡа ғына буласаҡ.

- Аңламайым, ниңә бушҡа буласаҡ?

- Поезда бергә килгәнегеҙҙә һөйләштеме? Театрҙа һөйләшкәнен ишеттеңме?

- Юҡ.

- Яҙышып һөйләшкәнебеҙҙе күрмәнеңме ни? Һиңә, исмаһам, бер тапҡыр һүҙ өндәштеме? Әйҙә, ҡаҡшатма кешене, ҡайт та, онот!

- Ярай, туҙынмай ғына һөйләшәйек инде...

- Аңламағасың, нисек туҙынмайым? Мин әйткәндәр етмәйме һиңә?

- Юҡ, үҙен күреп һөйләшкем килә! Үҙенән һорармын. Ауырыймы? Бәлки, уның өсөн бер нәмә эшләй, ярҙам итә аламдыр?

- Ун йыл буйы врачтар ярҙам итмәгәнде, һин нисек итәһең?

- Нимә булған һуң? Һеҙ һөйләшкән кеүек, үҙе менән мин дә һөйләшә алам.

- Йыуаш ҡына күренһәң дә, еңмеш икәнһең дә баһа! Һин дә мин, айырма юҡмы ни? Ояла ул! Яҡындары менән һөйләшһә лә, ауырлыҡ менән тотлоғоп саҡ һөйләшә.

- Ә! Һөйләшә бит! Шулай булғас, мин дә иплəп кенә аңлашырмын.

- Нимә аңлатырға уйлайһың? Ғашиҡ булдыңмы әллә? Йә-йә, йәшермә!

- Танышҡым, күргем килә. Йәйҙән бире эҙләнем, ул миңә нык оҡшаны.

- Танышһаң да, һин уның йөрәген генә ҡуҙғытып, ташлайһың барыбер, һау ҡыҙҙар бөткәнме һиңә? Былай ҙа ҡыҫҡа ғына ғүмерендә ул күргәндәрҙе Хоҙай дошманыңа күрһәтмәһен!

- Нимә булған һуң? Зинһар, ҡаршылышма инде!

- Хәҙер, мин һиңә һөйләргә әҙер торам ти, көт тә тор! Ҡалай, ҡырҙан ҡарап тороуға баҫалҡы ғына егет күренһәң дә, үҙһүҙле кеше булып сыҡтың әле!

- Әхирәтеңә яҡшылыҡ теләһәң, ниңә уға ярҙам итмәҫкә? Мин, мәҫәлән, бер кемгә лә аламалыҡ теләмәйем.

- Әйткәндәрем етмәйме ни? Тағы нимәһе аңлашылмай? Этйығышланма, бар, ҡайт! Һәйбәтләп уйла.

-Уйланым да ти, шунан? Килеп йөрөмә тигәсең, уйҙарымды кемгә әйтәйем?

- Әгәр ысынлап та ниәттәрең саф, уйҙарың яҡшы булһа, былай үҙең ныҡыш күренәһең, ошо белгәндәреңдән һуң да уны күргең килһә, кил. Үҙе менән мин дә һөйләшеп ҡарармын, бәлки, сығыр. Уның да йәне таш түгел, һине күргән һайын йәлләп ҡайғыра.

- Ҡасан киләйем? Иртәгә үк киләм!

- Ҡалай шәп! Ике аҙнанан беҙҙең смена бөгөнгө кеүек була, килһәң, ошо мәлгә килергә тырыш, - тине лә, шәп-шәп атлап инеп китте. Батыр ишеткәндәрен әле яҡшылап аңлап та өлгөрмәне, сөнки яңы хәбәр аңын тарҡатты. Нимә уйларға ла белмәне. Тәүге күргәндән Гүзәлдең үҙен сәйер тотоуына аптырамаһа ла, әллә нимә дөрөҫ түгел кеүек булғайны. Нимә икәнен аңлай алмай ыҙалағайны. Хәҙер аңланы. Артыҡ ҡаңғырманы, был хәбәрҙе уйхистәренән яҙҙырырлыҡ фажиғә тип тә ҡабул итмәне. Ярай, килермен, һөйләшербеҙ. Һөйләшмәһәк тә, аңлашырбыҙ. Мин уны аңлағым килә бит, шулай булғас, ниңә аңлашмаҫҡа тейешбеҙ? Иң мөһиме, ул Гүзәлгә ярҙам итә ала, һис юғында уны яҡлай, һаҡлай ала! Хәҙер Гүзәл уға элеккенән дә яҡыныраҡ тойолдо. Хәҙер Гүзәлде үҙенең күрәһе килгән ҡыҙыҡай йә танышырға теләгән ҡыҙ тип кенә түгел, ә иң яҡын туғаны, хатта һеңлеһе кеүек күрҙе.

- Ҡара, егет, әгәр Гүзәлде рәнйетеп ташлар булһаң, иҫеңдә тот, үҙем һине табып, башыңды яра һуғам! - Һөйләшкән көндәренә килгәнендә, тупһанан төшөп килгән ҡыҙҙың тәүге "яғымлы" һүҙҙәре шул булды.

- Ай-һа-ай, уҫал икәнһең. Ҡотто осороп бөттөң бит! - Күңелен әҙерәк йомшартайым тип, көслəп йылмайҙы егет.

- Юхаланма! Уйланыңмы? Бәлки, бөгөн үк баш тартыуың хәйерлерәктер?

- Уйланым. Теләмәһәм, килмәҫ тә инем...

- Быға хәтлем бер кемде лә яҡын ебәрмәй ине, әллә ниңә һиңә ышана ул, үҙ башына булмаһа ярар ине. Ярай, яманға юрамайыҡ. Теләһә нимә һорашып, теңкәһенә теймә. Ҡағыҙ, ручкаң бармы? Әйҙә, ятаҡҡа инәйек, фойела йылыла ултырып һөйләшерһегеҙ. Кеше иғтибарын йәлеп итерлек итеп, ҡысҡырып йә ҡулдарыңды болғап һөйләшмә. Ул яҡшы ишетә, һаңғырау түгел, һөйләгәнде һәйбәт аңлай. Оялһа йә ҡурҡһа, башҡа килеп күрермен тимә, белдеңме?

- Белдем, аңланым, иҫкәртеүеңә рәхмәт! - Аля артынан эйәреп, фойеға ингән егеткә: "Ошонда көт!" - тип бойорҙо ла, шәп-шәп атлап инеп китте. Ысынлап та, йылы, ыҡсым йыйыштырылған иркен бүлмә, ике йәтеш кенә журнал өҫтәле эргәһендә ултырғыстар, стеналағы кәштәләрҙә әллә нисәмә төрлө гөлдәр. Икенсе стена буйындағы өҫтәл артында дежурный ултыра, алдында телефондан башҡа нәмә юҡ. Журнал өҫтәлдәре торған стенала хаттар кәштәһен, янында стена гәзите һымаҡ һүрәтле плакат шәйләһә лә, артыҡ иғтибар итмәне. Ул хәҙер Гүзәлде күрәм, тип, тулҡынлана ине. Нисек булыр осрашыуҙары? Яңылыш хәбәр һөйләп, үҙенең килбәтһеҙ ҡыланышы йә ҡиәфәте менән ҡурҡытып, өркөтөп ҡуймаһа ярар ине. Ултырғысҡа ла ултырманы. Таҡта эргәһенә яуап бирергә сыҡҡан да, яуабын онотҡан уҡыусы һымаҡ, ҡатып тик торҙо. Шул тороуҙа үҙен эстән генә битәрләне: үҙеңсә бул, алсаҡ, мөләйем бул, торма ҡатып! Бер ниндәй ҙә трагедия юҡ, моратыңа ирешеү ҡыуанысы киҫерәһең түгелме?

Ҡыҙҙы йылмайып ҡаршы алды:

- Әйҙә, ултырайыҡ ошонда...

Инициативаны үҙ ҡулына алып, үҙе тураһында, башҡа хәл-ваҡиғалар тураһында күберәк үҙенә һөйләргә кәрәктер, тигән фекергә килеп өлгөргәйне инде ул.

- Теге юлы мин вагондан һинең артыңдан ҡапыл ғына сыға алманым, ҡаршыбыҙҙа ултырып килгән апай юлымды ҡаманы. Вокзалға сыҡҡас, һине эҙләп ҡарағайным, тапманым. Бөгөн күреүемә шатмын. Мин ауыл хужалығы институтында урман хужалығы һөнәре буйынса 4-се курста уҡып йөрөйөм. Поезға һин ултырған станциянан алдағыһында ғына ултырҙым. Быйыл йәй ундағы лесхозда практикала булдым...

Гүзәл уны иғтибар менән тыңланы, ҡыҙыҡ ерҙәрендә иплe генә йылмайҙы, көлдөрөрлөк хәбәр ишетһә, устары менән ауыҙын ҡаплап ҡына көлдө. Йөҙөнә, үҙен тотоуына ҡарағанда, ул тыныс ине. Йәйләп Батыр ҙа тынысланды. Гүзәлдең алдына блокнот менән ручка һалды:

- Нимәлер һорағың килһә, яҙ...

Гүзәл блокнот, ручканы алып: "Ашыҡмай, ҡысҡырмай ғына һөйлә, мин һәйбәт ишетәм, һине аңлайым", - тип яҙҙы. Батыр ҡыҙҙың тауышын ишетмәгәс, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡысҡырыбыраҡ һөйләй башлаған икән. Ҡайтарып һүҙ ҡушмаған кеше менән аралашҡанда үҙенән-үҙе тыуа торған тәбиғи кисерештер инде ул.

"Беҙ 4-әр көн өс сменала эшләйбеҙ. 2-се, 3-сө сменалар тура килһә, сыға алмайым. Килә алһаң, 1-се сменала эшләгәндә йә ял көнө кил. 316-сы бүлмә",- тип яҙып блокнот, ручкаһын бирҙе лә, Батыр яҙыуын уҡығас, "Бөгөнгә хуш, ҡайт!" - тигән кеүек йылмайып ҡына ишеккә ымланы.

**(Дауамы. Башы 44-45-се һандарҙа).**

ГӘРӘБӘЛӘР

**Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА.**

# КЕШЕҺЕН НЫҠ ҺАЙЛАП ҠЫНА

## Эйәрен бирә тарих...

### Аңлау

Батҡан һаҙҙан сыҡҡан кеүек,
Аңлау - аңламауҙан сығыу.
Белеү - белмәүҙе артылыу,
Тауға менгән юлды уҙыу.

Һаҙҙан сығам, тауға менәм,
Баҫам яңы арҡаларға.
Сигендергән саҡта сикте,
Юл юҡ бүтән тайҡаларға.

### Һаҙлыҡ

Шарлап аҡкан шаршынан
Килеп сыҡтым һаҙлыҡҡа.
Барса өн сыҡты юҡҡа,
Тынлыҡ килде барлыҡҡа.

Ғәжәп ҡылып мин баҡтым
Һыуҙың мүкләнеүенә,
Тынсып бөткән урында
Йылан төпләнеүенә.

Ғәжәп ҡылдым йәнемә
Тынлыҡ теләгәнемә.
Яҡын килдем, аһ, ниңә
Үлем күләгәһенә?

Тынлыҡ теләү күңелгә -
Теләү икән үлемде!
Еҫләндереү, һөрһөтөү,
Серетеү ул үҙеңде!

Йүгерҙем мин йәһәтләп
Шаулап аҡкан шаршыға:
Мәңге хәрәкәттәге
Тормош баҫты ҡаршыма.

### Һорау

Һорау бирһәм, яуап алам.
Һорамаһам, яуап юҡ.
Ярҙам ҡылһам, сауап алам,
Битарафҡа сауап юҡ.

Зәхмәт түгел, рәхмәт алам
Биргән саҡта һөйөүҙе:
Үҙ-үҙемә яҡынаям,
Эҙләп табам үҙемде.

Үҙ-үҙемдән алыҫаям,
Ҡалған саҡта сауапһыҙ:
Ҡалғанымда был ғәләмдең
Ғәмдәренә яуапһыҙ.

Йән күҙем һуҡыр түгелме,
Йән ҡолағым - һаңғырау?
Донъя нимә уйлағанын
Белер өсөн был һорау.

### Саз

Дошманым юҡ.
Дуҫтарым юҡ.
Һәр кем минең остазым.
Һәр кем минең күңелемдә
Һыҙылып торған сазым.

Ҡайһы саздан һыҡрайым мин.
Ҡайһы саздан тетрәйем.
Буш ҡалмайым,
Тойғоларҙан
Йәнде мәхрүм итмәйем.

Һәр кемдән дә ниҙер алам.
Һәр кемгә мин рәхмәтле.
Һәр кем минең уҡытыусым -
Мөғжизәле, хикмәтле.

Күрмәниһәм, күҙгә төртә,
Ишетмәһәм, ҡысҡыра -
Һәр кем мине тәрбиәләй,
Ташлап ҡуймай, ныҡ тора.

Ташлап ҡуймай мине донъя,
Бырағытмай сүплеккә.
Юҡҡа сыҡтым, тигәндә лә
Урын бирә өмөткә.

Ышанам мин үрләремә
Бәхет тигән түбәгә.
Сыңлай сазым күңелемдә,
Килгән саҡта тәүбәгә.

### Тарих эйәре

Бөгөн эйәрҙә булғандар
Иртәгә ҡайҙа булыр?
Билдәһеҙлеккә осормо?
Мәңгелектә торормо?

Кешеһен ныҡ һайлап ҡына
Эйәрен бирә тарих.
Һирәктәрҙе хәтерендә
Онотмай һаҡлай халыҡ.

Ҡатилды ла онотмай ул,
Батырҙы ла онотмай.
Ҡәһәрләй яуыз даһиҙы,
Изгеләрҙе олоҡлай.

Кем эйәрҙә, шул сәптә тик!
Бар уҡ уға төбәлгән!
Кемдәр мәхрүм мәшһүрлектән,
Шулар оса эйәрҙән.

### Ваҡыт

Яңылыҡтары менән,
Үҙгәрештәре менән,
Үлтереүсе түгел ул,
Тыуҙырыусы ул гелән.

Яҡшылыҡты тыуҙыра,
Яманлыҡты тыуҙыра.
Ваҡыт йәшәү һағында
Тыуҙырған өсөн тора.

Дауам итә донъяны,
Тамам итмәй һис ҡасан.
Үлемде йә ғүмерҙе
Тыуҙыра ул ихластан.

Насар яңылыҡтымы,
Яҡшы яңылыҡтымы,
Барыбер ул тыуҙыра -
Ҡараңғыны, яҡтыны.

Барыбер ул тыуҙыра
Догмаларһыҙ донъяны.
Ошо - ваҡыт бурысы,
Ошо - ваҡыт иманы.

* * *

Көнбағыштың сәскәләре
Көнгә - ҡояшҡа баға.
Сәскә ата алмаҫ ине,
Яҡтыға ҡарамаһа.

Сәскә аттыра мине лә
Йәндәге бер ҡояшым.
Шул Илаһым, шул Аллам тик
Яҡтыға бора башым.

### Күсеш

Тыумайынса үлеп булмай,
Үлмәйенсә тыуып булмай.
Күсенәбеҙ бер өҙлөкһөҙ
Бер тегеләй, берсә былай.

Был донъянан - тегеһенә,
Тегеһенән - был донъяға
Күскенселәр беҙ барыбыҙ,
Килмәгәнбеҙ ултырмаға.

Ваҡытлы беҙ йән йортонда -
Беҙ ғүмерле тәнебеҙҙә.
Ваҡытлы беҙ мәңгелектә -
Тән көтәбеҙ йәнебеҙгә.

Йән ингәнгә күсенәбеҙ
Был донъяға тегеһенән.
Тән эйәһе рөхсәт-маҙар
Һорап тормай минән, һинән.

Үлгән саҡты, үлем, тимәй,
Бары күсеш тип ул атай.
Тыумаҫ элек үлгәндәр тик
Үлем бар ул, тиеп раҫлай.

ҮӘТ, ӘКӘМӘТ!

**Сабый бала ябай ғына көҙгөнө лә ниндәйҙер бер серле әйбер кеүек ҡабул итә: ул унының үҙен дә, тирә-йүндәге барса нәмәне лә ҡабатлап күрһәтә ала бит. Кемгә нисектер, миңә бик бәләкәй сағымда көҙгөлә сағылған донъя яҡтыраҡ һәм матурыраҡ, хатта ғәжәберәк һәм серлерәк булып тойола торғайны. Бәлки, көҙгөнөң ҡояш нурҙарын сағылдырып, һин теләгән ергә нур көлтәһен йүнәлтә алыуы ла уйынсыҡтарға наҡыҫ булған беҙҙең бала сағыбыҙҙы биҙәп-йәмләп торған бер әйбер булғандыр. Шуныһы ғәжәп, электроника менән тыңҡыслап тигәндәй тултырылған хәҙерге донъябыҙҙа кешеләр ана шул ҡәҙимге көҙгөнән һис айырыла алмай, бигерәк тә ул ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ өсөн тәүлек әйләнәһенә кәрәк булып торған бер атрибутҡа тиң.**

# ӘЙТ ӘЛЕ, НУРЛЫ КӨҘГӨМ,

## кем иң һөйкөмлөһө һәм матуры?



### "Мин"ебеҙ сағылышы

Ҡасандыр көҙгө башлыса бай ҡатлам кешеләре йорттарында ғына булып, уларҙың бүлмәләрен биҙәү йыһазы ролен дә үтәһә, бөгөн ул һәр кем өсөн артыҡ иғтибар итерлек булмаған көнкүреш предметына әйләнгән. Һәр беребеҙ йоҡонан уяныу менән йыуыныу бүлмәһендәге көҙгөгә күҙ һирпеп, үҙебеҙҙең ҡиәфәтебеҙҙе тәртипкә килтерәбеҙ. Әммә көҙгө ябай көнкүреш әйбере генә түгел, һәм беҙ унан тик тышҡы ҡиәфәтебеҙҙе, һын-һыпатыбыҙҙы ғына күҙәтмәйбеҙ. Нисек кенә парадоксаль тойолмаһын, ул беҙҙең, психологтар әйткәнсә, икенсе "мин"ебеҙҙең дә сағылышын биреп, хис-кәйеф торошобоҙҙо һис бер тайпылышһыҙ күрһәтеп тора.

Әҙәм балаһының йәшәйешенә хас булған тәбиғи һәм социаль ихтыяждары бихисап. Беҙ туҡтауһыҙ һулыш алабыҙ, туҡланабыҙ, хәрәкәт итәбеҙ, һөнәри ғәмәлдәребеҙҙе башҡарабыҙ, уҡыйбыҙ, ижад итәбеҙ, йырлайбыҙ, бейейбеҙ, аралашабыҙ, яратышабыҙ, ял итәбеҙ, йоҡлайбыҙ... Ошо физиологик, социаль һәм рухи ғәмәлиәтебеҙҙә һәр саҡта ла үҙебеҙҙең барлығыбыҙҙы белеп-тойоп, булмышыбыҙға баһа биреп, башҡалар алдында билдәле бер статусыбыҙҙы, ҡабатланмаҫ айырымлығыбыҙҙы көн һайын иҫбатлап торабыҙ. Күрәһең, хәҙерге заман кешеһенә үҙен шәхсән тойоп-һиҙеп тороу ғына етмәйҙер, һәм уға үҙенең икенсе бер кешеләр күҙенә нисегерәк күренеүен дә мотлаҡ белеп торорға кәрәк. Ә быны иң еңел һәм тиҙ генә өлгәшә алырлыҡ юл - ваҡыты-ваҡыты менән үҙеңдең көҙгөләге сағылышына күҙ һалып тороу. Әйткәндәй, был ғәҙәти күренештә ҡатын-ҡыҙ һәм ир заттары араһындағы психологик айырмалар айырым-асыҡ беленеп тора. Ҡатын-ҡыҙ көҙгөгә ҡарай икән, үҙенең сырайындағы, һын-һыпатындағы етешһеҙ булып тойолған сифаттарҙы табырға тырыша, сөнки уға ошо кәмселектәрҙе нисек тә булһа башҡаларға күрһәтмәҫкә тырышыу хас. Уларҙағы буяныу-биҙәнеүгә әүәҫлек тә тәбиғи етешһеҙлектәрен йәшерергә, ҡапларға тырышыуҙан бит ул.

### Ҡыҙ-ҡатын ғына түгел, ирҙәр ҙә...

Шуныһы ҡыҙыҡ: архаик замандарҙа ҡатын-ҡыҙ ғына түгел, ир-ат та тәненә төрлө билдәләр һалып, йөҙөн битлеккә оҡшатып буяр булған. Әммә кешеләрҙә ул саҡта матурлыҡ ҡайғыһы булмаған, ошондай буяныуҙар билдәле бер образға инеү өсөн кәрәк булған. Ә бына хәҙерге ирҙәр, дөйөм алғанда, көҙгөгә үҙен матурлау өсөн түгел, ә үҙенең ирлек сағылышының үҙ заттары араһында ҡабул ителгән нормаларға ярашлы булыуын раҫлау өсөн генә күҙ һала. Һәр хәлдә лә, улар үҙҙәренә хас булған тышҡы етешһеҙлектәрҙе бар тип тә белмәй, киреһенсә, һәр сифатын үҙҙәренең ирлек дәрәжәһе күрһәткесе итеп ҡарарға тырыша. Ирҙәрҙең ҡиәфәте маймылдыҡынан аҙ ғына алдымыраҡ булһа ла етә, тип шаяртып әйтеү ҙә шул нигеҙҙә килеп сыҡҡандыр, моғайын.

Шулай ҙа, ҡатын-ҡыҙ заты ғына түгел, ир-ат та үҙенең башҡалар алдында нисегерәк күренеүенә, йәғни тышҡы образының ниндәй булыуына иғтибарһыҙ түгел. Ә бының өсөн көҙгөгә бер мәлгә булһа ла күҙ һирпеп алыу мотлаҡ. Швед психологтары Стокгольмда бик ҡыҙыҡлы эксперимент ойоштора. Ҡала универмагтарының береһендә әйбер-фәлән һатылмаған бер урынға ҙур көҙгө ҡуйып, йәшертен камера менән көҙгө алдына туҡталып киткән һәр кемде төшөрөп алалар. Һөҙөмтәләр ғәжәпкә ҡалырлыҡ: көҙгөгә күҙ һалып, үҙҙәренә иғтибар бүлеүселәр араһында 412 ҡатын-ҡыҙ булһа, ир-ат һаны 778-гә етә! Был парадоксты психологтар бына нисек аңлата: ир-егеттәрҙә үҙҙәрен башҡалар алдында танытырға, өҫтөнлөгөн, йәғни лидер сифаттарын күрһәтергә теләү көслөрәк, ә бының өсөн иң әүәл үҙеңдең ылыҡтырғыс, тирә-йүндәгеләр иғтибарын йәлеп итерлек булыуыңа ышаныстың даими раҫлап тороу фарыз. Бында аҫҡы аңыбыҙға тыуымыштан хас булған биологик ҡанундар йоғонтоһон да күреп була: ир заты үҙенең физик көс-булмышы, башҡаларҙы буйһондороп тота алыуы аша ҡатын заты алдында тәбиғи абруй яулай ала. Көҙгөләге виртуаль "игеҙәгебеҙҙе" күреп, беҙ берсә ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисерәбеҙ, ҡай сағында унда борсолоу, хәүефләнеү саҡҡыларын тоябыҙ. Нисек кенә булмаһын, үҙебеҙҙең көҙгөләге образыбыҙ тормошобоҙҙағы психик тотороҡлологобоҙ өсөн бик мөһим.

### Стрестан сыға алмаһаң...

Көҙгөнөң кеше өсөн үҙенә күрә психотерапия ҡорамалы булыуын иҫәпкә алырға кәрәк. Ысынлап та, автобуста эшкә китеп барыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың сумкаларынан бәләкәс көҙгөләрен алып, биҙәнеп-төҙәнеп алыуын күҙәтергә була. Улар был ғәмәлдәрен өйҙә лә башҡара ала бит (һәм улар быны көн һайын теүәл үтәй), юлдағы уңайһыҙ шарттарҙа был ни өсөн кәрәк икән, тип уйларға була. Кәрәк икән шул: бына ошо аҙ ғына ваҡыт эсендә ҡатын-ҡыҙ үҙенең тышҡы образының, ҡиәфәтенең ҡәнәғәтләнерлек булыуына инанып, үҙенең психологик халәтен көйләп, нығытып та ҡуя. Кәйеф төшә башлаһа, эштәр көйһөҙләнһә, йә булмаһа, ниндәйҙер күңелһеҙ ваҡиғалар күңелде бимазалап, борсоуға һала икән, көҙгөгә ҡарап, үҙенә-үҙең бер йылмайып алып, эстән генә: "Етте һинә, әфәндем, балтаң һыуға төшкәндәй ултырырға, барыбер бөтәһе лә һәйбәт буласаҡ!" - тип уйлап алыу ҙа етә. Стрестан тиҙ генә сыға алмағандарға көҙгөгә ҡарап, төрлө мәҙәк һәм көлкөлө мимик хәрәкәттәр эшләп, даими күңегеүҙәр менән шөғөлләнергә тәҡдим итә бит психологтар. Әйткәндәй, япон халҡының менталитетена башҡалар менән һәр саҡта ла йылмайып, тыныс ҡына һөйләшә белеү хас, тиҙәр. Бәлки, шуғалыр ҙа, япондарҙың тышҡы ҡиәфәттәре оҙаҡ йылдар буйына мөләйем һәм йәш булып күренәләр ул.

### Яман энергияны ла йыя, тиҙәр...

Элек-электән көҙгөнөң магик сифаттарға эйә булыуы хаҡындағы фекерҙәр төрлө халыҡтар араһында киң таралған. Мәсәлән, балаға күҙ теймәһен өсөн испандар уның кейеменә көҙгө ярсығы тағыр булған. Урта быуаттарҙа йәшәгән алхимик һәм табип Парацельс көҙгөнөң тығыҙ физик донъяны беҙҙең күҙгә күренмәгән нескә донъя менән тоташтыра алыусы тоннель ролен үтәй алыуына ышанған. Әүәл бер-береһенә ҡаршы торған ике көҙгө араһына шәм яндырып ҡуйып, күрәҙәлек иткәндәр. Йорт тәҙрәһенә тышҡы яҡҡа ҡаратып ҡуйылған көҙгө яман уйлы кешеләрҙән һаҡлай, тип тә иҫәпләнгән. Күптәребеҙ яман кешеләр ҡарашынан көҙгөлә насар энергия тупланыуына хәҙер ҙә ышана, уның кире йоғонтоһонан хәүефләнеп, йоҡо бүлмәһенә көҙгө ҡуймаҫҡа тырыша. Кеше үлгән осраҡта көҙгөләрҙе ҡаплап ҡуйыу ғөрөфө күп халыҡтарҙа бар. Бына бит ул нисек: кеше көҙгөһөҙ йәшәй алмаһа ла, бороңдан ҡалған хөрәфәттәр уны һиҫкәндереп тора.

### Үҙ-үҙеңде танырға ла өйрәтә

Минеңсә, ябай ғына булып тойолған көҙгөнөң цивилизация үсешенә йоғонто яһауына ла иғтибар итергә була. Тымыҡ һыу өҫтөндә сағылған тәбиғәт күренештәре (әҙәм балаһы белгән тәү көҙгө!) кешеләргә һүрәт төшөрөү идеяһын бирһә, фотография, кино, телевидение ла шул уҡ көҙгө принцибынан сығып уйлап табылған цивилизация емештәре ул. Пушкин әҫәрендәге сибәр ҡыҙ булһынмы, йә башҡорт фольклорындағы Мәскәй ҡарсыҡмы, бына беҙ халыҡ хыялында сағылыш тапҡан әкиәт көҙгөһөн - беҙҙең заман телевизорын күрәбеҙ. Ғөмүмән, бөтә тормошобоҙҙо көҙгө менән сағыштырып була: мейе-көҙгөбөҙҙә сағылыш тапҡан донъя картинаһы булмаһа, беҙ аңлы кеше була алмаҫ инек. Бөйөк Маркс кешеләрҙең үҙҙәрен дә көҙгөгә тиңләгән: әҙәм балаһы донъяға философ булып тыуымай, ти ул, һәм башҡаларға көҙгөгә ҡараған һымаҡ баҡып, үҙ-үҙен таный башлай.

**Ауыҙың ҡыйыш булһа, көҙгөгә үпкәләмә, тиҙәр халыҡта. Бик тә хаҡ әйтелгән: ҡайһы еребеҙҙең ҡыйшайып китеүен көҙгөлә генә күреп була, һәм ул беҙҙе һис алдамай. Тик беҙ үҙебеҙгә түгел, көҙгөгә һылтанабыҙ күп ваҡыт. Бына хәҙерге осорҙа төшөрөлгән кинофильмдарҙы, заман телевидениеһын тетмәһен тетеп әрләйбеҙ, хатта үпкәләйбеҙ, үсегәбеҙ. Ә улар шул уҡ йәмғиәт көҙгөләре бит: унда күренгән донъябыҙ беҙгә ҡыйыш булып тойола икән, иң әүәл үҙебеҙҙе, йәшәйешебеҙҙе төҙәтеү тураһында уйлау фарыз. Матди һәм рухи донъябыҙ төҙөк булһа, көҙгөлә сағылған йөҙөбөҙҙән дә ҡәнәғәт булып йәшәрбеҙ, моғайын.**

Вәлиәхмәт БӘЗРЕТДИНОВ.

ТӘҮБӘ

# ЭСЕҮҘӘН КОТОЛОП БУЛА



## 21-се һабаҡ: "Тау түбәһе"- физик, психологик, мораль мөмкинлектең иң үре, йәғни түбәнге аң телгә килгән урын…

Бынан алда булған һөйләшеүҙә кешенең тау үрендәге күңел кисереше, кәйеф торошо тау түбәнендәгенән ҡырҡа айырыла, тинек. Был хәл-күренешкә ниндәй аңлатма бирергә мөмкин һуң? Тау түбәһе географик яҡтан тигеҙ урындан, диңгеҙ кимәленән өҫтәрәк, юғарыраҡ булғаны өсөн генәме икән был айырма? Әллә был "өҫтән - аҫҡа", "юғарынан - түбәнгә", "бейектән - тәпәшкә" табан үҙендән аҫта булғанды түбәнлек тип кәмһетеп ҡарау психологияһы сағылышымы? Әллә юғарыла һауа башҡасараҡ, таҙараҡ булған өсөн, һулыштар ҙа башҡасараҡ алына ла, йөрәк икенсерәк тибә лә, тойғо-кисерештәр ҙә юғарыраҡ буламы икән? Ни өсөн, әйтәйек, тип-тигеҙ урында ла, шундай уҡ ара йүгереп үтһәк тә, тау үрендәге кеүек юғары тойғолар кисермәйбеҙ һуң?

Ҡыҫҡаһы, был тәңгәлдә бихисап һораүҙар бирергә, мәсьәләләр күтәрергә, дәғүәләр әйтергә, дәлилдәр килтерергә мөмкин булыр ине. Минеңсә, бында барлыҡ хикмәт тау үренә йүгереп менгән саҡта кешенең тигеҙ ерҙә йүгереп барғанға ҡарағанда күберәк көс, энергия, ныҡышмалылыҡ һәм ихтыяр сарыф итеүендәлер. Йәғни, кешегә ни тиклем ауырыраҡ йөк тейәһән, ни тиклем күберәк көсөргәнеш һалһаң, уның потенциаль көсө һәм мөмкинлеге тиҙерәк сарыф ителә. Шулай уҡ, кешене ни тиклем түҙеп торғоһоҙ хәлгә ҡуйған һайын, ул шул тиклем беше, тормошҡа яраҡлашҡан булыусан.

Әйтәйек, һеҙ илле йә йөҙ саҡрым араны йүгереп үтеүгә тамам хәлдән тайҙығыҙ, тамам талсыҡтығыҙ икән, ти. Йәки булмаһа, турникта йөҙ тапҡыр ҡалҡындығыҙ ҙа, артабанғы хәрәкәт өсөн тамсы ла көсөгөҙ ҡалманы, ҡыл да ҡыбырҙата алмайһығыҙ, ти. Әммә һеҙгә һаман да алға барырға, тағы ла йөҙ саҡрым үтергә кәрәк, турникта ла тағы шунсама мәртәбә ҡалҡынырға тейешһегеҙ.

Нимә эшләйһегеҙ инде? Дөрөҫ... **"Бүтәнсә булдыра алмайым!"** тигәндең арьяғына сығып, үҙегеҙҙең физик, психологик һәм мораль көсөгөҙҙән дә төптәрәк яткан түбәнге аңығыҙҙағы РУХ көсөнә таянырға мәжбүр булаһығыҙ был осраҡта. Башҡаса әмәл юҡ. Йәғни һеҙ бығаса тиклем баш мейегеҙҙә ойоп-йоҡлап яткан күсәнәктәрҙе уята башлайһығыҙ. Йәғни һеҙҙең организм үҙенең эшмәкәрлеген һаҡлап ҡалыр өсөн, хәрәкәт туҡталмаһын өсөн баш мейегеҙгә, ундағы түбәнге аңға таяна башлай.

Ә нимә һуң ул түбәнге аң? Уның ҙур өлөшөн кешенең асылы, тәбиғи булмышы, генетик коды, үткәне тәшкил итә. Тимәк, тау түбәһенә үрләү бер үк ваҡытта физик, мораль һәм психологик көсөргәнеш аша **кешене үҙ асылына ҡайтара!**

Икенсенән, мейенең "мәңгелек" йоҡоға талған күҙәнәктәре уяна ла, кешенең бығаса булмаған мөмкинлектәре барлыҡҡа килә. Ғалимдар әйтеүенсә, беҙ баш мейебеҙҙең барлығы 2-3 процент потенциалын ғына (даһиҙар - 5-7 процент) файҙалана алабыҙ. Ә бында иһә тағы ла 0,00001 процент баш мейеһе потенциалы хәрәкәткә килә. Шул уҡ ваҡытта, туранан-тура түбәнге аңына таянған кеше үҙ асылының, тәбиғи булмышының бығаса үҙе тоймаған һәм белмәгән яҡтарын аңлау һәм баһалау дәрәжәһенә барып етә. Белгегеҙ килһә, милли ғорурлыҡ та тап түбәнге аңда йәшәгән төшөнсә.

Ҡарасәле, тимәк, боронғо атай-олатайҙарыбыҙ тәрән ҡайғыға тарып, оҙаҡ ваҡыт онотола алмаған кешене тынысландырыу өсөн тау үренә табан мәжбүр итеп йүгертеп, уның түбәнге аңына тәьсир яһай алған бит! Был шулай уҡ кешелә милли ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү, уны үҙ асылына ҡайтарыу, тәбиғи мөмкинлектәрен асыу мәктәбе лә. Шулай булғас, тау үренә табан йүгереү культы тик ҡайғыға бәйле осраҡ өсөн генә ҡулланылған тип әйтеп буламы? Юҡ, әлбиттә! Беҙ киләсәктә был мәктәптең серҙәренә төшөнөргә тейешбеҙ.

Суфыйҙар тәрбиәләү мәктәбендә лә шундай уҡ сара ҡулланылған. Әммә унда тау үренә табан йүгереү урынына барлыҡ күнегеүҙәр ҡырҡ көн һуҙымында ҡараңғы баҙ эсендә башҡарылған. Буласаҡ суфыйҙарға тик һыу ғына биргәндәр һәм ҡырҡ тәүлек буйына, бер тамсы ла йоҡлатмайынса, туҡтауһыҙ күнегеүҙәр эшләткәндәр. Бында ла, тамам хәлдән тайған шәкерттәр иҫен юғалтып ҡоламаһын өсөн, уларҙың ғүмерен һаҡлап ҡалыр өсөн, һуңғы сиратта түбәнге аңы, генетик коды, рухы уятылған. Ҡырҡ көндән һуң яҡты донъяға сыҡҡас, уларҙың бихисап тәбиғи мөмкинлектәре асылған. Түбәнге аң, мейе эшмәкәрлегенең ҙур өлөшө экстремаль ситуацияла, кеше үлем һәм йәшәү урталығында торған саҡта уяна. Әммә ошондай маҡсатта ғына "үлем менән шаярыу" ахмаҡлыҡҡа тиң.

Ошо урында психологтар үткәргән бер ғәжәйеп тәжрибә хаҡында һөйләп үтеү бик урынлы булыр, тип уйлайым. Тәжрибә өсөн тәғәйенләнгән кешенең ике бармағын гипноз ярҙамында ҡыҙған тимер хәленә килтереп, алдында ултырған һалҡын һыу һалынған стаканға тыҡҡандар. Күп тә үтмәгән, "кипятильник" кеүек ҡыҙған бармаҡтары һыуҙы ҡайнатып та сығарған. Ғәжәп бит! Хәҙер инде ошо хәлгә анализ яһап ҡарайыҡ. Йәғни психологтар бығаса нисек ирешкән һуң? Һыуҙы ҡайнатып сығарыусы ток көсө ҡайҙан килә, тип уйлайһығыҙ? Әлбиттә, был кешенең мейеһенән сыҡҡан энергия, яңы уянған баш мейеһе күҙәнәктәре эшмәкәрлеге.

Хәҙер инде һеҙ миңә тағы ла шул уҡ традицион һораүҙы бирерһегеҙ һәм хаҡлыһығыҙ ҙа. Йәғни башта һөйләгән хәл-күренештәр менән эскелектән ҡотолоу араһында ниндәй бәйләнеш бар һуң? Былар бит ер менән күк араһы кеүек айырым төшөнсәләр. Бәйләнешме? Әлбиттә, бар! Дәлилме? Килтерәм!

Беҙ эсеп алғас, йәғни апарыҡ ҡына булып алғас, ни эшләйбеҙ? Эйе, һис ҡасан булмағанса, үҙебеҙҙе хисле, аҡыллы һәм көслө итеп тоябыҙ. Ни өсөн? Сөнки баяғы түбәнге аңыбыҙҙа йоҡлап ятҡан ҡалған 97 процент мейе эшмәкәрлеген араҡы менән уяттыҡ, тип уйлайбыҙ. Һәм алданабыҙ ғына.

Йәш саҡта Исмәгәзм дуҫым менән хатта төшөрөп алып, бүлмәгә бикләнеп, икебеҙ ике мөйөшкә ҡарап, үҙебеҙҙең "бөйөк" шиғри әҫәрҙәребеҙҙе, философик трактаттарыбыҙҙы ижад итә торғайныҡ. Шунда уҡ бер-беребеҙгә йөҙ менән боролоп, яҙғандарыбыҙҙы бер-беребеҙгә уҡып, маҡтана инек. Йәнәһе, бөйөк әҫәр яҙылды, даһи әҙип донъяға яралды. Имеш... Иртәгәһен тороп, кисә яҙған "ташҡа үлсәйем" әҫәрҙе уҡып, ояла торғайныҡ.

Шулай уҡ эскән кеше донъяла үҙен иң көслөһө итеп тоя, хатта эскән килеш йыр һуҙғанда ла һин үҙеңде кәмендә Шаляпин итеп тояһың. Эскән кешеләрҙе айныҡ килеш ситтән ҡарап-күҙәтеп-тыңлап ултырыуы ла үҙе бер оло мәрәкә. Ул саҡта кешенең күҙәнән, иғтибарынан, ғөмүмән, ысынбарлыҡҡа бәйле объектив ҡараштан алыҫ торған әйбер-күренеш тә шешәләштәр тарафынан "кибернетика" йә "фотосинтез" фәндәре күҙлегенән бәйән ителә һәм тикшерелә. Ныу, ундағы "профессорҙар"ҙың дәғүәләре һәм фекерҙәре, бәхәсләшеүҙәре... Ҡыҫҡаһы, ул саҡта эскән кеше иң хаҡлыһы һәм иң аҡыллыһы һанала. Ап-айныҡ башың менән уларҙың бәхәсенә барып ҡыҫылып ҡара...

Эш шунда: беҙ эскәндә мейебеҙҙәге йоҡо хәлендәге 97 процент запас энергия, көс, мәғлүмәт сығанағын уята алмайбыҙ, бары уның барлығын ғына тоябыҙ ҙа, уның уяныу эйфорияһын кисерәбеҙ, иллюзияға биреләбеҙ. Ысынбарлыҡ иһә, таңда уяныу менән бергә килә. Берәү әйтмешләй: "Баш ауырый, үҙем бәйле ятам, бәхет үҙе ошо түгелме?..".

Хәҙер инде тағы ла тау түбәһенә әйләнеп ҡайтайыҡ. Ни өсөн донъяның иң оҙаҡ йәшәүселәре ерҙең таулы урындарында көн күреүселәр икәнен дә аңлайбыҙ хәҙер. Эйе, тап улар көн һайын иртә таңдан тороп, тауҙарға артылып, кеше булмышына тәбиғәт тарафынан һалынған запастағы йәшәү көсөн уята алыусылар: йөҙ, йөҙ илле, ике йөҙ йәшкәсә ғүмер һөрөүселәр.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Үҙ-үҙеңә хужа бул

"Кем үҙенә хужа түгел, шул азат була алмай". Был хәҡиҡәтте грек фәйләсүфе һәм ҡоло Эпиктет әйтеп ҡалдырған. Әлбиттә, әгәр һин уның кеүек ҡол булһаң, иң төп уйың, моғайын да, үҙеңдең шәхси яҙмышың менән идара итеү азатлығы булыр ине. Ысынбарлыҡта иһә, ҡол менән азатлыҡ араһында хужа кеше тороуын белһә лә, Эпиктет ысын азатлыҡты хужанан ҡасып түгел, ә үҙ-үҙеңә хужа булғанда ғына яулап булыуын яҡшы аңлаған.

Үҙ-үҙеңә идара итеүҙе өйрәткән бик күп юлдар һәм фәлсәфәүи тәғлимәттәр бар. Бығаса ошо темаға яҙылған әллә күпме китаптар дәлил булып тора. Уларҙың һәр береһендә бер дөйөм идея үткәрелә. Азатлыҡ, бәхет, күңел тыныслығы - беҙ эҙләгән бөтә нәмә беҙҙең үҙебеҙҙә урынлашҡан. Үҙебеҙгә тормөне үҙебеҙ төҙөйбөҙ һәм бары тик үҙебеҙ генә унан ҡотолоу юлын таба алаcаҡбыҙ. Ошоно аңлағанда ғына үҙебеҙгә хужа булырға өйрәнә башлайбыҙ. Ҡайһы саҡта беҙ үҙебеҙҙең ирекһеҙлекте бүтәндәрҙән күрәбеҙ, ысынында иһә, беҙҙең ирекле йәки ирекһеҙ булыуыбыҙ үҙебеҙгә ни тиклем хужа була алыуҙан тора бит.

Нимә ул азатлыҡ? Бәлки, был нимә теләйһең, шуны эшләй алыу хоҡуғылыр? Әммә улай түгел, хатта иң азат йәмғиәттә лә һәр кемдең азатлығын тәьмин итеү өсөн закондар кәрәк. Моғайын да, ысын азатлыҡ - нимә теләйһең, шуны эшләү түгел, ә кем була алаһың, шундай булыу хоҡуғылыр ул. Һин нисек ниндәй ҙә булһа музыкаль уйын ҡоралында уйнау йәки йә ниндәйҙер сәнғәт әҫәре ижад итеү хоҡуғын яулай алаһың? Был бит ситтән бирелгән түгел, ә музыка йәки картина тыуҙырыр һөләттәргә үҙең эйә булғанда ғына яулай алған хоҡуғың. Ә бәхетле, ижади тормош менән йәшәү өсөн нисек азатлыҡ яуларға мөмкин? Кемдер берәү был иректе бирә аламы? Юҡ, әлбиттә. Был азатлыҡ ошондай тормош ҡороуға кәрәкле һөләттәргә эйә булыу һөҙөмтәһе ул.

Ҡурҡыуыңды һәм наҙанлыҡты еңә алһаң, ысын азатлыҡ юлында булырһың. Ҡурҡыу һәм наҙанлыҡ - бына улар ысын ҡол биләүселәр, һәм беҙ уларҙы йәрәгебеҙҙә һәм уйыбыҙҙа йәшәтәбеҙ икән, ошо ҡоллоҡта ҡалыуыбыҙҙы дауам итәбеҙ. Ҡурҡыуҙы еңеп, хәҡиҡәткә төшөнгәс кенә беҙ ысынлап та азат буласаҡбыҙ. Ҡурҡыуҙы еңеүҙең иң яҡшы юлы - үҙебеҙ ҡурҡҡан теләһә ҡайһы күренеш менән күҙмә-күҙ осрашыу. "Ҡурҡыуҙың күҙҙәре ҙур" - бына ошо беҙҙе тынысһыҙландыра ла инде һәм, ғәҙәттә, тойолғанға ҡарағанда күпкә әһәмиәтһеҙ хәүеф булып тора. Тормошта ниндәйҙер билдәһеҙ күренешкә тап булғанда һәм ҡурҡыуға төшкәндә, уның күҙенә тура ҡара һәм уның ниндәй мәғәнәгә эйә булыуына анализ үткәр - һәм был тойғо үҙенән-үҙе һүреләсәк. Үҙебеҙҙең ҡурҡыуҙарыбыҙ менән күҙмә-күҙ осрашҡанда уларҙан ҡотолорға һәм тормошобоҙҙо файҙалы үткәрер өсөн үҙебеҙгә яуаплылыҡ алырға өйрәнәсәкбеҙ. Ысын азатлыҡ ошонан ғибәрәт тә инде.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# БАШ ҠАЛА ТАМАШАСЫҺЫН...

## Стәрле, Сибай, Нефтекама саҡыра

**19 - 22 ноябрҙә Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында Башҡортостан филармониялары фестивале үтәсәк. Инде өсөнсө тапҡыр үткәреләсәк был фестивалдең маҡсаты - Башҡортостанда эстрада сәнғәтен үҫтереү. Сәнғәт оҫталарының ижад емештәрен бары тик тамашасы ғына баһалай ала. Тамашасы булһа, сәнғәт тә үҫәсәк, камиллашасаҡ. Филармониялар ошо юҫыҡта нисек эшләй, халыҡтың күңелен арбарлыҡ ниндәй программалар менән сығыш яһарға иҫәптәре бар? Ошо һорауҙарға яуап эҙләп, тамашасыларға республиканың күп милләтле мәҙәниәте менән танышырға мөмкинлек биргән сәнғәт үҙәктәре - филармония директорҙарына мөрәжәғәт иттек.**

**Данир ҒӘЙНУЛЛИН, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы директоры:**

- Тамашасы күңелен яуларлыҡ берҙән-бер ысул - юғары профессиональ кимәлдәге йырсылар менән эшләү. Халыҡтың күңеленә үтеп инерҙәй сәнғәт әҫәрҙәрен, Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Салауат Низаметдинов кеүек мәшһүр композиторҙарыбыҙҙың йырҙарын, халыҡ бейеүҙәрен сәхнәгә сығарыуҙы төп бурысыбыҙ итеп алғанбыҙ. Эстрадала киң таралып киткән табын йырҙарының ваҡыты үтеп бара. Тамашасы халыҡ йырҙарына, халыҡ бейеүҙәренә һыуһаған. Артыҡ ялтырап торған кейемдәр, сағыу сәхнә менән генә кеше күңеленә үтеп булмай, тамашасыға рух күтәренкелеге, көс-дәрт бирерлек ижад емештәре тәҡдим итергә кәрәк. Милли оркестр, милли инструменттарға, тере тауышҡа өҫтөнлөк бирәбеҙ.

Фестивалдә тамашасыға ҡыҙыҡһынырлыҡ программа тәҡдим итәсәкбеҙ. Беҙ - үҙәк филармония, шуның өсөн, башҡаларға үрнәк булырға тырышабыҙ. Ижади аралашыу сәнғәт кешеһенә бик кәрәк, ошо фестиваль беҙгә тәжрибә менән уртаҡлашыу мөмкинлеген бирә.

**Вәкил ЙОСОПОВ, Сибай дәүләт филармонияһы директоры:**

- Беҙ, филармония коллективтары, республикабыҙҙың төрлө төбәгендә йәшәгәс, бер-беребеҙ менән йыш күрешә алмайбыҙ, ә фестиваль беҙҙе берләштерә. Беҙ унда үҙебеҙҙең тәжрибә менән бүлешәбеҙ, киләһе сығыштарға сәмләнеп әҙерләнәбеҙ. Шау-шоуға ҡоролған тамашалар үткәрмәйбеҙ, халыҡтың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерлек рух менән һуғарылған сығыштар әҙерләйбеҙ. Һәр филармонияның үҙ тамашасыһы. Әлбиттә, беҙҙең сығыштарға күберәк үҙебеҙҙең яҡташтар килә. Улар тамашаны ҡарап, үҙҙәренә рухи көс, дәрт-дарман алып ҡайта.

Фестивалгә башҡорт халҡының бөйөк улы, шағир Шәйехзада Бабичтың ижадына арналған "Йөрәктәрҙә ҡалдың йыр булып" тип исемләнгән программа менән киләбеҙ. Концертта фонограмма, плюсовка ҡулланмайынса, оркестрға ҡушылып "тере" тауыш менән сығыш яһаясаҡтар. Был фестивалдән һәр береһе үҙенә нимә кәрәк, шуны алып ҡайта ала. Артистар, музыканттар, бейеүселәр үҙ фекерҙәре менән уртаҡлаша ала. Шул йәһәттән фестивалдең әһәмиәте бик ҙур.

**Рәнис АЛТЫНБАЕВ, Нефтекама дәүләт филармонияһы директоры:**

- Беҙ күберәк гастролдәр менән сит райондарға йөрөргә тырышабыҙ. Йыр-моңға сарсаған халыҡ күңелен арбау - беҙҙең төп бурысыбыҙ. Тамашасы күңел асырға ғына түгел, ә рухи аҙыҡ алып ҡайтырға килә бит беҙҙең концерттарға. Шуға ла программаларҙы фәһем бирерлек сағыу тамаша итеп төҙөргә тырышабыҙ.

Беҙҙең филармония иң йәше булыуға ҡарамаҫтан, үҙ тамашасыбыҙ күп. Коллективта күбеһе йәштәр. Күп милләтле төбәктә урынлашҡанға күрә, уларҙың һәр береһенең ихтыяжын ҡәнәғәтләндерергә тырышабыҙ. Раян Алтыншин етәкселегендәге "Кәрҙәштәр" тип исемләнгән башҡорт рухлы бригада уңышлы эшләп килә. "Түңгәүер" башҡорт бейеү ансамбле лә хәҙер бар республикаға данын таратты. Яңыраҡ башҡорт бригадаһы Ишембай районының Ҡолғона ауылында сығыш яһап ҡайтты. Унда бер нисә йыл тамашалар күрһәтелмәгән. Шулай төпкөл ауылдарға ла йөрөйбеҙ, сөнки тамашасылар ҡала ерендә генә йәшәмәй бит.

**Әхмәр ӘХМӘҘУЛЛИН, Стәрлетамаҡ дәүләт филармонияһы директоры:**

- Һәр филармонияның үҙенә генә хас йөҙө бар. Улар бер-береһен ҡабатларға теләгән саҡта ла ҡабатлай алмаясаҡтар. Тамашасының күңеленә йоғорлоҡ, уларҙың иҫендә ҡалырлыҡ сығыштар, режиссура яғынан яҡшы ҡоролған, бай йөкмәткеле сығыштар алып киләбеҙ баш ҡалаға. "Саптар" тигән яңы бейеү ҡуйҙыҡ, уның ошо фестивалдә премьераһы. "Мөғжизәле донъя һин, мөхәббәт" тип исемләнгән дөйөмләштерелгән программа менән сығыш яһаясаҡбыҙ. Хәҙер йәш йырсылар араһында, йырлай белмәме-юҡмы, фонограммаға эйәреп сығыш яһаусылар күбәйҙе. Ә беҙ бындай "халтураға" юл ҡуймайбыҙ, беҙҙә тик "тере" тауышҡа ғына йырлайҙар.

Зөһрә ҠУНАФИНА
яҙып алды.




ИНТЕРНЕТТАН



# ТУҠ БУЛҒАНДА...

## матур йоҡлата

■ Бостонда балалар госпиталенең биоматериалдар һәм дарыуҙар лабораторияһында дарыу бүлеп сығарырға һәләтле контакт линзалар уйлап тапҡандар. Ике полимерҙан торған был линзалар һынауҙарҙы уңышлы үткән һәм улар хәҙер глаукома һәм ҡоро күҙ синдромы мәлендә күҙгә тамыҙа торған дарыуҙарҙы алыштыра ала.

■ Артыҡ ауырлыҡ, ғәҙәттә, атайҙан улға, әсәйҙән ҡыҙға нәҫел буйынса бирелә икән. Был турала АҠШ-тың Плимут медицина мәктәбе хәбәр итә. Улар 226 Америка ғаиләһен тикшереп, тулы кәүҙәле әсәйҙәрҙең ҡыҙҙары артыҡ ауырлыҡ менән йышыраҡ яфа сигеүен асыҡлаған. Артыҡ ауырлыҡ малайҙарға атайҙарҙан күсә. Артыҡ ауырлыҡтың тәүге билдәләре бала саҡта уҡ күренә башлай, мәҫәлән, һигеҙ йәшлек ҡыҙҙар тиҫтерҙәренә ҡарағанда тулыраҡ була.

■ Ни өсөн ашағандан һуң йоҡо килә? Манчестер университеты ғалимдары асыҡлауынса, баш мейеһенең әүҙемлек өсөн яуап биреүсе күҙәнәктәре ашағандан һуң һүнеп тора. Был орексин (йоҡо һәм ял итеү гормоны) синтезлаусы нервы күҙәнәктәре мембранаһында ҡандағы глюкоза кимәленә тәьҫир итеүсе рецепторҙар булыуы менән аңлатыла. Бына ни өсөн ашағандан һуң йоҡоға тарта башлай, ә ас кеше насар йоҡлап китә.

■ Вандербилт университеты мәғлүмәттәре буйынса, активлаштырылған күмер ҡабул итеү бөйөрҙәре сирле ауырыуҙарҙы йөрәк-ҡан тамырҙары проблемаларынан ҡотҡара. Бөйөр сирҙәре атеросклерозға һәм йөрәк ауырыуҙарына килтереүе күптән билдәле булһа ла, әлегә тиклем уны дауалауҙың аныҡ ҡына ысулы юҡ ине. Активлаштырылған күмер, ғәҙәттә, организмды ағыулы матдәләрҙән таҙартыу өсөн ҡулланыла. Нефрологтар фекеренсә, ул бөйөрҙәре сирлеләрҙең һаулығына ыңғай тәьҫир итәсәк. Ғалимдар һынауҙар барышында сирлеләрҙең артериаль баҫымы, холестерин күрһәткесе яҡшырған һәм ҡан тамырҙары шеше ҡайтыуы күҙәтелгән.

■ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы етәксеһе Татьяна Голикова Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһендәге дауаханаларҙағы марля маска дефициты мәсьәләһен яйға һалырға вәғәҙә иткән. Быға тиклем Рәсәй хирургик масканы башлыса Ҡытайҙан ала ине. Киҙеү башланыу һөҙөмтәһендә маскалар ҙур тиҙлек менән тарала һәм уларҙың хаҡы ҡайһы бер дауаханаларҙа 30 тапҡырға тиклем артҡан. "Фармэксперт" медицина үҙәге етәксеһе Давид Мелик-Гусейнов белдереүенсә, Рәсәйҙә һуңғы көндәрҙә вирусҡа ҡаршы препараттарға ла һорау артҡан һәм дарыуханалар октябрь айында һатыу планын ике тапҡырға арттырып үтәгән.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# СӘХНӘЛӘРҘӘ...

## гөр киләләр күгәрсендәр



**Күгәрсен районы Тәүәкән ауылында йәшәгән, район мәҙәниәт йортонда эшләгән Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Ғәзим Ильясов халыҡ йырҙарын һәм эстрада йырҙарын башҡарыусы булараҡ, тамашасыға яҡшы таныш. Унын, үҙе әйтмешләй, ҙур сәхнәгә сығыуына өс-дүрт йыл ғына әле, шулай булыуға ҡарамаҫтан, үҙенә генә хас моңо, үҙенсәлекле тауышы, халыҡсан йырҙары менән күптәрҙең күңелен яулап өлгөрҙө ул.**

Һөнәре буйынса филолог булған Ғәзим ағайҙың шофер булып эшләп йөрөгән еренән мәҙәниәт хеҙмәткәре булып китеүенә лә егерме йылдан артыҡ ваҡыт үтеп киткән. Әсәһе, әсәһенең атаһы Исмәғил ҡарттың халыҡ йырҙарын башҡарыуын ишетеп үҫкәнгәме, әллә әрме һурпаһын татып, тыуып-үҫкән төйәкте һағынып ҡайтыуы сәбәпсе буламы, ул радионан Рамаҙан Йәнбәковтың йырлауын тыңлап, күңеле үҙенән-үҙе йыр-моңға тартыла башлаған саҡта уйламағанда ғына район мәҙәниәт йортона эшкә саҡырыла. Һәүәҫкәр йырсының баш ҡала сәхнәһен яулауы ла көтөлмәгәндә була: унын Мораҡта үткән 15 йыллыҡ ижад кисәһен телевидение килеп төшөрә һәм оҙаҡ та тормай, Ғәзим ағай Өфөлә концерт ойошторорға тәҡдим ала һәм йыл һайын бындай концерттар үткәреү матур йолаға әүерелә.

Ғәзим Ильясовтың Күгәрсен районы ҡурайсыһы, һәүәҫкәр йырсы һәм композитор Нәғим Нуриманов менән ошо уҡ районндан булған йәш йырсы Эльвир Ишкилдиндан торған төркөмө лә бар. "Төркөмгә тауыштары матур булған моңло егеттәрҙе туплап алдым, сөнки концертҡа күберәк ҡатын-ҡыҙ йөрөй. Килеп, ысын ир-егеттәр башҡарыуында йырҙар тыңлап ҡайтһындар", - ти йырсы. Бейеүселәрҙе һәр концерт һайын төрлө урындарҙан саҡыралар. Ғәзим ағай фекеренсә, Рәсәй эстрадаһы мауыҡҡан шоуҙар башҡорт халҡына хас түгел. "Бөгөн миненә дә сәхнә тултырып ярым ялангас ҡыҙҙар ҡуйып бейетергә мөмкинлегем бар, тик бының тамашасыға кәрәге юҡ. Унын урынына халыҡ яратҡан йырҙарҙы башҡарыу барыһының да зауығына тап килә, күңелен байыта. Ғөмүмән, Башҡортостанда ысын шоу эшләгән кеше юҡ әлегә, беҙҙең сәхнәләр быға ҡулайлашмаған да". Төркөм йырсылары баянға ҡушылып та йырлай, был саҡта алҡышлауҙар бөтөнләй икенсерәк, дәртлерәк була, тиҙәр улар. Шулай уҡ ҡурай, гармун, тальян моңдары ла ишетергә була күгәрсендәрҙең концертында.

Бөгөнгө эстраданы "Апайыма", "Ағайыма", "Еҙнәмә" тигәнерәк йырҙар баҫып барған ваҡытта Ғәзим Ильясов башҡарыуында "Болоттар ағыр инде", "Кеше бәхетенә үрелмәгеҙ" һ.б. йырҙарҙы тамашасылар һағынып көтөп ала. Һәүәҫкәр композиторҙар Муса Смаков, Рәмил Ғимрани, Илшат Байгазин, Нәзирә Ишҡолова, Мөҙәрис Ғәзетдинов ижад иткән йырҙарҙы бергә туплап, "Бәхетлемен" тип аталған яңы диск та яҙҙыра Ғәзим Ильясов, ул ошо арала һатыуға сыға ла инде.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ғәзим Ильясов үҙенең тамашасыларын "Бәхетлемен" тип аталған өр-яңы концерт программаһы менән дә ҡыуандырмаҡсы. Унда Радмир Туйсин, Айгөл Һағынбаева, Артур Ҡунаҡбаев, һуңғы арала сәхнәнән юғалып торған Венер Абдуллин һәм башҡа йырсылар ҡатнашасаҡ. Концерттар 16 ноябрь - Мәләүеҙә, 17 ноябрь - Өфө ҡалаһының Моторҙар эшләүселәр берекмәһе мәҙәниәт һарайында, 18 ноябрь - Ҡала мәҙәниәт һарайында, 19 ноябрь - "Юбилейный" мәҙәниәт һарайында, 20 ноябрь - Стәрлетамаҡ ҡалаһының СК мәҙәниәт һарайында, 21 ноябрь - Салауат ҡалаһының "Алмаз" мәҙәниәт һарайында үтәсәк.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

МӘРХӘМӘТЛЕК

# ЯРҘАМ ИТЕГЕҘ!

Ошо йылдың майында Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылында йәшәүсе Туйсиндар ғаиләһенә бәлә килде. 1985 йылда тыуған Гөлйөҙәм ҡаты сиргә юлыҡты. Диагнозы: киҫкен лейкоз. Беҙҙең гәзит аша ҡыҙҙың әсәһе Мәҙинә Туйсина яҡташтарына мөрәжәғәт итә:

Хөрмәтле яҡташтарым, зинһар өсөн минең ҡыҙыма ярҙам итегеҙ. Раиса Горбачева исемендәге Санкт-Петербург балалар-үсмерҙәр гематологик үҙәгендә унын һөйәк елегенә ҡатмарлы операция яһау өсөн аҡса талап ителә.

**Гөлйөҙәмдең реквизиттары:**
Уральский Банк СБ РФБаймак ОСБ N 4583
453630, г. Баймак, пр. С.Юлаева, 32
Тел.: 3-10-36, 3-14-39 (бухгалтерия)



**Реквизиты Банка:**
БИК 048073601
Корсчет: 30101810300000000601
Расч\счет: 47422810706529940001
ИНН 7707083893/025402001
Л\счет: 40817810606520018709
**Туйсина Гульюзум Акрамовна.**

**Алдан уҡ рәхмәтемде белдерәм, хөрмәтле яҡташтарым. Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе мәрхәмәтенән айырмаһын!**

**Әсәһе Мәҙинә.**

## *КОТЛАЙБЫҘ!*

Әлхәмдулиллаһ, Хоҙай тәғәләнән, пар ҡанаттарыма һыйынып, улар йылыһын тойоп, улар ҡеүәтенән көс алып, улар менән бергә-бергә тағы ла оҙон-оҙаҡ ғүмер кисерергә насип ит инде, тип һорайым көн-төн.



Пар ҡанаттарым - ул минең йәндәй күргән ҡәҙерлеләрем -

**әсәйем Мәрзиә Низам ҡыҙы менән атайым Миңнехәт Ғариф улы ИҘЕЛБАЕВТАР.**

...Һуғыштан һуңғы ауыр, етешһеҙ осорҙа - 1949 йылдың көҙөндә улар яҙмыштарын бергә бәйләп, атайымдың был тормоштан иртә киткән ата-әсәһе донъяһын индәренә күтәреп, йәшәп алып киткән. Етешһеҙ мәлдә ҡауышһалар ҙа, уларҙың тырышлыҡтары, уңғанлыҡтары арҡаһында тормошобоҙ етеш, йортобоҙ иркен һәм дә яҡты, ә беҙҙең - ун баланың - өҫтөбөҙ бөтөн, тамағыбыҙ туҡ булды.

Атайым тирә-йүндә даны таралған балта оҫтаһы булһа, әсәйем ҙур йорт - хужалыҡ эштәрен башҡарҙы. Атайым менән әсәйем Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылында йәшәй. Бергә тормош көтөүҙәренә ошо көндәрҙә 60 йыл тула. Ошо уңайҙан уларға Президентыбыҙ Мортаза Рәхимовтың ҡотлауы һәм бүләктәре тапшырылды.

Атай, әсәй! Күҙемдең нурҙары - һеҙ, донъям ҡото, тормошом асылы - һеҙ. Собханалла, әлегеләй матур итеп, ауырыу-һыҙлауһыҙ, шатлыҡ-ҡыуаныстар менән бергә-бергә оҙаҡ йәшәйек әле, бирешмәгеҙ бер ҙә! Һеҙ булғанға, беҙ бәхетле бик тә.

**Ҡыҙығыҙ Фәүзиә һәм уның ғаиләһе.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӘ ҺӘР НӘМӘГӘ ЫШАН,

## йә һәр нәмәлә икеләν...

Мин йәш саҡта йәшлеккә бер ниндәй хөрмәт юҡ ине; олоғайғайным, ололарға ла хөрмәт юҡ икән. Был донъяға ваҡытһыҙ килгәнмен һәм был донъянан ваҡытһыҙ китәм.

**(Джон Пристли).**

Алданған ирҙәр тирә-яғында ла алданған ирҙәрҙе генә күрә.

**(Марсель Пруст).**

Тормош юлынан еңел генә үтеүҙең ике ысулы бар: йә һәр нәмәгә ышанаһың, йә һәр нәмәлә икеләнәһең. Былар икеһе лә һине уйланыуҙан ҡотҡара.

**(Анри Пуанкаре).**

Закон ижад итеүҙә - йөҙәрләгән, ә уны урап үтеүҙә... миллионлап кеше ҡатнаша.

**(Владимир Путин).**

Ахмаҡтарҙы күргән килмәһә, иң тәүҙә көҙгөндә ват.

**(Франсуа Рабле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Остаз йылға буйында ял итеп ултырғанда, эргәһендә шыуышып йөрөүсе саяндың һыуға ҡолап төшөүен күреп ҡала. Саян нисек кенә һыуҙан сығырға тип тыпырсынмаһын, булдыра алмай. Остаз уны ҡотҡарырға теләп, ҡулын һыуға тыға. Һөйрәп тә сығара, саян унын ҡулын сағып та ала. Ауыртыуға түҙә алмай, Остаз ҡулдарын ысҡындыра һәм саян яңынан һыуға төшөп китә. Остаз икенсе тапҡыр саянды ҡотҡарырға маташа. Тик һөйрәп сығарҙым ғына тигәндә, саян тағы унын ҡулын саға. Был хәл өсөнсө тапҡырға ҡабатлана. Был хәлде күҙәтеп тороусы бер юлсы Остазға өндәшә:"Һеҙ бигерәк үҙ һүҙле инде, - ти ул. - Саянды нисә тапҡыр һыуҙан һөйрәп сығарһағыҙ ҙа, ул барыбер һеҙҙең ҡулды сағасаҡ бит". Быға ҡаршы Остаз шулай ти: "Саяндың тәбиғәте шундай: һөжүм итеү, сағыу һәм үҙ-үҙен яҡлау. Ләкин был минең тәбиғәтемде үҙгәртмәйәсәк. Минең тәбиғәтем - ярҙам итеү". Ошо һүҙҙәрҙе әйткән дә Остаз, бер япраҡ алып, саянға шул япраҡҡа йәбешеп һыуҙан сығырға ярҙам иткән. Шулай итеп, үҙ тәбиғәтеңә хыянат итмә, ләкин кемдер һине рәнйетә, ярарлай икән, һаҡланыу саралары күрергә лә онотма, тигәнгә ишара был..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 5615
Заказ 4864